ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

13-19 июнь (һөтай) 2020

№24 (910)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

***Әҙип һәм ғалимдары булмаған халыҡ - бәхетһеҙ. Мәшһүр кешеләрен онотҡан халыҡ - яҡлаусыһыҙ. Әҙәбиәте булмаған халыҡ - рухһыҙ.***

***Ризаитдин Фәхретдин.***

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ырыуыбыҙ - Йәнәй,**

**асылыбыҙ - көнбайыш башҡорттары**



7

**Башҡорт этносы...**

**Өфө-II ҡаласығында ла формалашҡан!**



8-9

**Өләсәйем аманаты**



11

**Шәмеғол олатайҙың мөғжизәләре**



12-13

**ТВ-программа** 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Гәзит-журналдар тормошобоҙҙа ниндәй урын биләй?

***Мөхтәр хәҙрәт МОНАСИПОВ, Баймаҡ районының Ярат ауылы имам-хатибы, "Атайсал" клубы рәйесе:*** Гәзит-журналдар минең тормошомда һәр ваҡыт иң мөһим урындарҙың береһен алып торҙо, эшләгән саҡта ла, хатта әлеге ваҡытта - матбуғат баҫмалары тираждары кәмеп, уға яҙылыусылар һаны бермә-бер һирәгәйгәндә лә. Был кешенең тормошҡа мөнәсәбәтенә, уның граждандыҡ позицияһына бәйлелер, тип уйлайым. Йәшәргә була, әлбиттә, үҙ тормошоңа бикләнеп, шәхси хужалығында ҡайнап, үҙеңдән арыны күрмәй-белмәй генә лә, ләкин бындай тормоштоң ни ҡыҙығы? Матбуғат баҫмалары бит барыбер кешене йәмғәтселек менән бәйләп, ил-йорт хәлдәрен белеп-төшөнөп торорға, теге йәки был ваҡиғаға ҡағылышлы объектив фекерләргә, имеш-мимеш, ғәйбәт кеүек яҙыҡтарҙан ары йөрөргә - ҡыҫҡаһы, ил хәстәре менән йәшәргә булышлыҡ итә. Күптәр шуға ла, мин яңылыҡтарҙы телевизорҙан йә интернеттан да беләм алам, тип аҡлана башлай, тик шуны аңламай улар: гәзит-журналдар бит мәғлүмәт сығанағы ғына түгел, уның тәрбиәүи йоғонтоһо ла көслө. Иң беренсе һәм мөһиме - гәзит-журнал һәм китаптар әсә телебеҙҙе рәсми йәшәтеү сараһы булараҡ та баһалап бөткөһөҙ ҡиммәткә эйә икәнен аңлау фарыз һәр кемебеҙгә. Икенсенән, яҙма матбуғат үткәндәребеҙ һәм бөгөнгөбөҙҙөң йылъяҙмаһы ла бит ул. Мәҫәлән, ил, республика, район тормошонда бөгөн, кисә йәки былтыр булған хәлваҡиғаларҙы гәзиттәрҙән башҡа тағы ҡайҙан табаһың? Халҡыбыҙ тарихынан героик үткәндәрҙең ошоғаса билдәһеҙ булып килгән биттәрен асып биреүсе, эшлекле замандаштарыбыҙ, билдәле ғалимдар, яҙыусылар, сәнғәт оҫталары менән таныштырыусы ла шул гәзиттәребеҙ бит ул!

Был йәһәттән мин айырыуса ғаиләбеҙ менән нисәмә йылдар инде яратып уҡыған "Киске Өфө"нө күҙҙә тотам. Үҙебеҙҙең башҡорт донъяһы хаҡында тағы ла ҡайҙан уҡый алабыҙ һуң? Әлбиттә, милли баҫмаларыбыҙҙа. Ауылдаштарыма үпкә юҡ: "Киске Өфө"гә лә, "Башҡортостан", "Йәшлек", "Атайсал" һәм район гәзиттәренә лә яҙылалар былай, бөтөнләй гәзит уҡымай йәшәүе лә мөмкин түгел бит. Үкенескә, халҡы матбуғат баҫмалары менән дуҫ булмаған ауылдар ҙа бар. Үҙҙәре хаҡында берәй мәҡәлә сыға ҡалһа, гәзит эҙләп, район китапханаһына барып етһә етә ундайҙар, ләкин гәзиткә яҙылыу хаҡында уйламай. Гәзиткә яҙҙырыу эшен почта хеҙмәткәрҙәренә генә йөкмәтеп ҡалдырыу дөрөҫ түгелдер, тейем шуға ла. Был эштә редакцияларға ауыл хакимиәте лә ярҙам итергә тейештер. Ни тиһәң дә, гәзиттәребеҙ бөгөнгө көндә лә һәр төрлө йәмғәтселек сараларына халҡыбыҙҙы туплаусы, әйҙәүсе халыҡ трибунаһы булып ҡала. Гәзит уҡымаусылар нисек кенә электрон технология мәғлүмәттәре яҡлы булып ҡыланмаһын, улар ҙа донъянан артта ҡалып килеүҙәрен белеп ҡуйһындар. Был хаҡта шул уҡ интернетта һис йәшермәй яҙыла: күптәр хәҙер, был нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, электрон уҡыуҙан баш тарта башлаған, сөнки, беренсенән, ундағы хәбәрҙәрҙең яртыһынан күберәге - фейк (ялған, алдаҡ) һәм ундағы мәғлүмәттәр тикшерелеп тормайынса, ашыҡ-бошоҡ һәм хаталы яҙыла икән; икенсенән, күҙ алдында туҡтауһыҙ яныпһүнеп торған кадр, һорауһыҙниһеҙ һинең пространствоңа килеп инеүсе реклама "тәҙрәләре" иғтибар туплауға ҡамасаулай, нервыға тейә. Унан бит, интернетҡа яҙышмаған кеше юҡ бөгөн: аҡыллыһы ла, ғәфү итегеҙ - аҡылы камил булмағаны ла ниҙер яҙып маташа... Ниңә әле мин шуларҙың сүбәк сәйнәүҙәренә ваҡытымды сарыф итеп, уҡып ултырырға тейешмен, тип уйлай хәҙер йөнлерәк әҙәм. Былар тураһында "Экспресс газета"ның 2018 йыл 29 март һанындағы "Ни өсөн яҙма матбуғат бер ҡасан да үлмәйәсәк?" тигән мәҡәләне уҡырға тәҡдим итәм, ышанмаһағыҙ. Японияла, Америкала гәзиттәр тиражы йылдан-йыл арта барыуы тураһында ла аныҡ һандар бар. Үкенескә, беҙгә аҡыл һәр ваҡыт һуң килә, ә шулай ҙа дөйөм ҡуҙғалыш тиҙҙән килеп етер беҙгә лә, тип өмөтләнәм.

**(Дауамы 2-3-сө биттәрҙә).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ӘЙҘӘ, АҒИҘЕЛ БУЙЫНА...

**Йыл төҙөләһен көн төҙөлмәһә лә, 2014 йылда башланған Ағиҙел яры буйын нығытыу һәм төҙөкләндереү эштәренең һөҙөмтәһе күренә башланы ла инде. Әлеге ваҡытта биш саҡрымға һуҙылған гидротехник ҡоролмаларҙы төҙөү һәм Салауат Юлаев һәйкәленән Дуҫлыҡ Монументы туктальшына тиклем араны төҙөкләндереү эштәре тамамланған.**

Көндән-көн күркәмләнеп, матурланып, бигерәк тә ошо йәмле йәй көндәрендә ул йәштәрҙең генә түгел, ололарҙың да яратҡан урынына әүерелә бара, сөнки һәр кем күңеленә хуш килгән ниндәйҙер үҙенсәлек табып, ошо урынға ҡабат-ҡабат килгеһе килеп тик торасаҡ. Йүгереүселәрҙе, велосипедсылар һәм скандинав атлауы менән шөғөлләнеүселәрҙе юлдар ылыҡтырһа, хиселәр ҡояш сығыуын һәм офоҡто шәфәҡ нурҙарына мансып байыуын ҡарар өсөн генә килһә, кемгәлер был урын фотосессия өсөн уңайлы. Йылғалар төнөн һөйләшкән кеүек, ғашиҡтар ҙа Ағиҙелдең йылғыр тулҡындарына ҡарап серләшә; самокатта йөрөгән балалары артынан ата-әсәләре лә эйәреп, саҡрымдар һанай. Балыҡсылар бер кемгә лә иғтибар итмәйенсә, үҙ шөғөлө менән мәшғүл. Салауат Юлаев һәйкәле ҡаршыһында хатта ултырып ял итеү урындары ла эшләнгән. Тиҙҙән бында кафелар асылыр, ҡояштан һаҡланыу өсөн ышыҡтар, музыканттар һәм рәссамдар өсөн ижад урындары, парковкалар, туҡталыштар, ял урындары, арт-объекттар һәм башҡа уңайлыҡтар булдырылыр. Һәр хәлдә, өфөләр был көндө түҙемһеҙләнеп көтә.

**"Башинформ".**



12+

БАШ ҠАЛАМ

# КҮҢЕЛЕМӘ ЯҠЫН ТӨЙӘГЕМ

**Мин Өфөнө бала саҡтан яратам. Баш ҡаланан алыҫта урынлашҡан төпкөл ауылда тыуып үҫеп, мәктәпте тамамлағансы Өфөлә булырға тура килмәһә лә, ни өсөндөр ул һәр ваҡыт күңелемә яҡын булды. Телевизорҙан Өфөнө күрһәтеүҙәрен көтөп йөрөр инем, китапта баш ҡаланы сағылдырған һүрәттәрҙе ҡат-ҡат ҡарар булдым. Шуға күрә, ваҡытында университетҡа уҡырға инеүемдән дә бигерәк, баш ҡалала йәшәйәсәгемә ҡыуандым, шикелле. Хәҙер бына 30 йылдан ашыу яратҡан Өфөмдә йәшәйем. Уның һәр үҙгәрешен күҙәтеп, ҡалаға ҡағылышлы яңылыҡтар менән танышып барам.**

Ҡала көнләп үҫә. Киңлеккә лә, оҙонлоҡҡа ла, бейеклеккә лә, тип әйтәйем. Әле булһа ҡайҙандыр ер табып өйҙәр һалалар, иҫкеләре һүтелеп, улар урынына яңылары барлыҡҡа килә, быға тиклем киноларҙа ғына күргән бейек йорттар үҫеп сыға. Төҙөлөш бара икән, тимәк, ҡала йәшәй. Ҡыуанысլы хәл. Һис шикһеҙ, Өфөнө заман талаптарынан ҡалышмайынса үҫешкән мегаполис, тип ауыҙ тултырып әйтергә була.

Ҡалала мәҙәни тормош бик йәнле. Балаларҙы бәләкәйҙән сәнғәткә, мәҙәниәткә, матурлыҡҡа өйрәтеп үҫтереү өсөн барыһы ла бар, төрлө түңәрәктәр әүҙем эшләй. Өфөнөң ландшафты ни тиклем үҙенсәлекле! Салауат Юлаев һәйкәле эргәһенән тирә-яҡҡа ниндәй матур күренеш асыла! Ҡарап туйғыһыҙ. Айына бер булһа ла ошо майҙанда рәхәтләнеп йөрөп, ял итеп ҡайтыу күңелдәрҙе күтәреп, йәшәүгә дәрт өҫтәп ебәрә. Әгәр ҙә ниндәй ҙә булһа башҡорт телендәге сараға тура килһәк, икеләтә ҡыуаныс, сөнки милләттәштәрҙе күпләп күреп, үҙ телебеҙҙә йыр-моң ишетеп кинәнәбеҙ.

Өфө урамдары таҙалығы менән күп ҡалаларҙан айырылып тора. Был урындағы халыҡтың мәҙәнилеге тураһында ла һөйләй, шулай уҡ коммуналь хеҙмәттәр ҙә әүҙем эшләй, тигәнде аңлата. Мәҫәлән, мин йәшәгән Дим биҫтәһендә иртәнге 7-лә үк урамдар ҡышын ҡарҙан таҙартылып ҡуя. Көҙгө миҙгелдә иһә сүп-сар, ҡойолған япраҡтар тиҙ арала йыйып алына. Шул уҡ ваҡытта Өфө ойошмалары алдында сүп-сар һауыттары бик әҙ, ҡала урамдары буйлап буш һут һауытын, трамвай билетын һәм башҡа ҡыйҙы ҡайҙа ташларға белмәйенсә йөрөгәнем бар. Һәр бинаның ишек төбөндә сүп-сар һауыттары булырға тейештер, тип уйлайым.

Беҙҙең ҡалала машиналар күп булһа ла, артыҡ тығындар юҡ тиерлек. Юлдарҙың торошо ла, башҡа күп миллионлы ҡалаларҙан айырмалы рәүештә, үтә насар түгел. Ҡала хакимиәте юлдарҙы төҙөкләндереүҙе лә өфөләргә мәшәҡәт яһамай ғына тиҙ арала тамамларға тырыша. Әгәр ҙә башлаған эштәре ҡала халҡына һәм ҡунаҡтарға ҡыйынлыҡ тыуҙыра ҡалһа (мәҫәлән, быйыл йәй, ремонт эштәре алып барылыуы һөҙөмтәһендә, аэропортҡа тиклемге юлды 4 сәғәт үтергә тура килде), үҙ хатаһын танып, ғәфү үтенә беләләр.

Үҙ һаулығын спорт ярҙамында нығытырға теләгәндәр өсөн баш ҡалала мөмкинлектәр етерлек. Спорт залдары ла, стадиондар ҙа, урамдарҙа төрлө махсус тренажерҙар ҡуйылған майҙансыҡтар ҙа бихисап. Йәшеллеккә күмелеп ултырған парктар күп. Якутов исемендәге паркты алып ҡарағанда ла, төрлө йәштәге кешеләр саф һауала ял итһен өсөн барыһы ла эшләнгән. Иң мөһиме, ошо йәшел утрауҙарыбыҙҙы киләсәк өсөн һаҡлап ҡалайыҡ.

Етешһеҙлектәргә килгәндә, водителдәрҙең йәйәүлеләргә ҡарата ихтирамһыҙлығын, сит төбәктәрҙән килгәндәрҙең ҡайһы берҙәре үҙҙәрен әҙәпһеҙ тотоуҙарын, эт аҫраусыларҙың уларҙы бәйһеҙ көйөнсә бик иркен йөрөтөүҙәрен, ҡайһы бер ойошмаларҙағы һыу буйы сират булыуын, төрлө ауҙа һәм күңел асыу комплекстарының ифрат күп асылыуын билдәләп үтер инем.

Һәр ҙур ҡалаға хас булғанса, Өфө лә үҙенең күркәм сифаттарына һәм матурлығына эйә, шул уҡ ваҡытта етешһеҙлектәре лә бар. Шулай ҙа ул минең иң яратҡан ҡалам.

**Дилбәр ҮҘӘНБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Гәзит-журналдар тормошобоҙҙа ниндәй урын биләй?

(Башы 1-се биттә).

***Көнһылыу ҠОТЛОБАЕВА, педагогика ветераны, Бөрйән районы:*** Мин совет осоро балаһы. Ғүмеремдең күп өлөшө шул ваҡытҡа тура килде. Ул дәүерҙең ниндәй етешһеҙлектәрен тапҡанда ла, шул осорҙағынан да күберәк уҡыусы халыҡ булды микән донъяла? Китапханалар, шәхси китапханалар, матбуғат, әҙиптәр, журналистар иң юғары кимәлдә абруйға эйә ине. Бигерәк тә ваҡытлы матбуғат, журналистар эйә булған ғәйәт ҙур абруй, шөһрәт хәҙер юҡ инде.

Совет заманында матбуғат һүҙенең ҡиммәтен, ҡеүәтен баһалай белделәр, шуға ла халыҡ араһында уның абруйы булды. Ваҡытлы матбуғатта күтәрелгән мәсьәләләр бер ваҡытта ла иғтибарһыҙ ҡалманы, тәнҡит мәҡәләләре буйынса йыйылыштар, бюро ултырыштары уҙғарылып, ғәйеплеләр яҙаһын ала һәм көн тәртибендәге мәсьәләләр ваҡытында хәл ителә барҙы. Ул ваҡыттағы райком секретарҙарының ниндәй власҡа эйә булыуын хәҙерге быуын белмәйҙер ҙә. Әммә шул властың журналистар алдында нисек аяғүрә тып баҫып торғанын да күҙ алдына килтерә алмаҫтар.

Халыҡ аҡсаға бик етешмәй йәшәгәндә лә республика һәм үҙәк баҫмаларға яҙылмай ҡалманы. "Совет Башҡортостаны", "Ленинсы", " Башҡортостан пионеры"на тиклем барлыҡ гәзиттәр, "Пионер", "Башҡортостан ҡыҙы", "Ағиҙел", "Һәнәк " журналдары, "Правда", "Комсомольская газета", "Труд" үҙәк гәзиттәре, "Роман газета", "Наука и жизнь", "За рубежом","За рулем", "Квант", "Пионер" һәм "Костер", "Работница","Юный техник" кеүек бик тә популяр баҫмаларҙың һәр ҡайһыһы көтөп алынып булды.

Әммә был гәзит йә журнал өйгә килеп инеү менән уҡ ҡулыңа



эләгә тигәнде аңлатмай ине әле. Яҙылмаған ҡанундар буйынса, өйҙә һәр кемдең үҙ сираты: иң беренсе атай менән әсәй уҡый, унан йәш буйынса сират китә. Йөрөйһөң шунда утҡа баҫҡан бесәй һымаҡ ҡасан сиратың етерен көтөп. Эйе, илебеҙ өсөн ғорурланып, уңыштарына ҡыуанып, хәҙер беҙгә һуғыш ҡурҡынысы янамай тип ирәйеп, октябрят, пионер, комсомол тормошо менән янып, уҡырға теләгән һәр кем белем ала һәм теләгән һөнәргә эйә була ала, хеҙмәте барҙың - хөрмәте бар, тип дәртләнеп, етешһеҙлектәр булһа,

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Бөгөн, бөтә донъяны тетрәткән коронавирус ваҡиғалары мәлендә, 2020 йылдың икенсе яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһын үткәреү бик үк еңелдән түгел икәнен белеп-һиҙеп тораһығыҙҙыр.**

Шуға ла ҡайта-ҡайта мөрәжәғәт итәбеҙ уҡыусыларыбыҙға: 2020 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу дауам итә. Алты айға яҙылыу хаҡы 694 һум 34 тин. Почтальондан яҙҙырыу мөмкинлеге булмаһа, өйҙән сыҡмай ғына яҙылыу өсөн "Почта России" https://podpiska.pochta.ru/ сайтына инеп, эҙләү һыҙығында "Киске Офо" тип, үҙегеҙҙең адресты, исем-фамилияны, яҙылыу осорон яҙып, кәрзингә күсәһегеҙ ҙә, банк картаһы менән онлайн түләйһегеҙ. Гәзит уҡыусыларыбыҙ даими рәүештә беҙҙән бүләккә матур китаптар алып тора, был йолабыҙ артабан да дауам итәсәк. Гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияларығыҙҙы ебәрергә онотмағыҙ.



Почтальондарға рәхмәтлебеҙ, улар үҙ эшен эшләй, өйҙән-өйгә, фатирҙан-фатирға йөрөп, матбуғат баҫмаларын, ҡарттарға пенсия аҡсаһын тарата. Шуға ла бар ышанысыбыҙ, өмөтөбөҙ - почта хеҙмәткәрҙәрендә һәм... уларҙы өйҙәрендә ҡабул итеп, гәзитебеҙгә яҙылыу ғәмәлен атҡарыусы аңлы милләттәштәребеҙҙә. Әйткәндәй, гәзитте әүҙем таратыусы почтальондарға ла матур бүләктәр әҙерләйбеҙ.

**Әйҙәгеҙ, гәзитебеҙгә яҙылып, дуҫлығыбыҙҙы, берҙәмлегебеҙҙе нығытайыҡ!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓11 июнгә мәғлүмәттәр буйынса Башҡортостанда 4273 коронавирус инфекциялы иҫәпләнә. Тәүлек эсендә улар 79-ға артҡан. Вафат булғандар һаны үҙгәрешһеҙ - 18 кеше. Һуңғы тәүлектә Рәсәйҙә 8779 яңы осраҡ өҫтәлгән, 174 кеше үлгән. Илдә барлығы 502 436 коронавирус сирле теркәлгән. Уларҙың 261150-һе һауыҡҡан. 6532 кеше донъя ҡуйған. Башҡортостанда бөгөн 100 мең кешегә 92 коронавирус инфекциялы тура килә. Республикала ауырыуҙарҙың һан яғынан артыу темпы 2,2 процент тәшкил итә.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров белдереүенсә, был аҙнала коронавирус буйынса юғары әҙерлек режимын йомшартыу һәм иҡтисадтың башҡа өлкәләрен (4-5 сегмент) асыу көтөлмәй. "Беҙ вахтасыларҙың иркен йөрөүе сәбәпле 65 йәштән өлкәндәр араһында сирлеләрҙең артыуын теркәй башланыҡ", - тине республика етәксеһе хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә. Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, Башҡортостанда йәшәүселәр "үҙ һаулығына вайымһыҙ ҡарай". Шуға ла ул муниципалитет етәкселәренән ошо йүнәлештә эште көсәйтеүҙәрен һораны.

✓Башҡортостанда COVID-19 йоҡторған медицина хеҙмәткәрҙәре һаны 716 -ға еткән. Уларҙың 194-е - Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһы, 55-е - Бәләбәй үҙәк район дауаханаһы хеҙмәткәре. 23 табип - Иҫәнғол үҙәк район дауаханаһынан, 18-е - Республика онкология диспансерынан, 17-һе - 13-сө ҡала клиник дауаханаһынан, 9 хеҙмәткәр - Бишбүләк район дауаханаһынан.

✓"Быйыл республикала 1000 саҡрымдан ашыу юлдарҙы төҙөкләндерәбеҙ, эштәр 100-гә яҡын участкала алып барыла, - тип яҙҙы Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә. - Ҡайһы бер объекттарҙы ваҡытынан алда тапшырырбыҙ. Өфө - Иглин - Ҡыҙылъяр - Павловка юлында тиҙҙән япма түшәй башлайҙар. Әбйәлил, Аҫҡын, Илеш, Ҡырмыҫҡалы, Көйөргәҙе, Стәрлебаш, Тәтешле, Федоровка, Шаран райондарында юлдарҙы әүҙем тәртипкә килтерәбеҙ". Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, быйыл 2021 йылға ҡаралған эштәрҙең бер өлөшөн башлау ҙа планлаштырыла.

*✓ Гәзит уҡымаған кешене оҙаҡ тотонолмай ятыу сәбәпле тутыҡҡан берәй тимер әйбергә оҡшатам мин. Ундай кеше менән теге йәки был темаға һөйләшеүе лә әллә ни ҡыҙыҡ булмай сыға.*



матбуғат аша хәл итеп була тигән ышаныста инек. Эйе, ул саҡта ил менән бер булып, ил тип бергә янып йәшәгән, коллективлыҡ хисе, илһөйәрлек тойғоһо көслө ине.

Бөгөн килеп нимә үҙгәрҙе һуң? Хәҙерге ваҡытлы матбуғат ябай кешегә яҡыная ла төштө һымаҡ, тик ни өсөн уға ҡыҙыҡһыныу һүрелде һуң? Берәүҙәр бөгөнгө ҡиммәтселек менән аңлатһа был күренеште, икенселәр уның сәбәбен аңыбыҙҙы ла, донъябыҙҙы ла электрон технологиялар баҫып алыуында тип уйлай. Ә минеңсә, кешенең аң-белем, интеллектуаль торошонда барған үҙгәрештәр ҙә күп сәбәптәрҙең береһеләр. Яңы быуын килде. Мәктәптә лә, ғаиләлә лә элеккесә уҡыу культы һүнде. Ғөмүмән, гәзит-журнал түгел, классик әҙәбиәтте лә уҡымай бит хәҙерге йәштәр. Шунлыҡтан, минеңсә, уларҙа туған телебеҙгә, хатта илебеҙгә беҙҙең замандағы һымаҡ йәнен фиҙа ҡылып, әҙәләптәр яратыу хистәре лә әллә ни күҙәтелмәй. Улар еңеллек менән ауыл йә ҡалаһын ғына түгел, ә туған илен дә ташлап, ситкә сығып китергә әҙерҙәр. Күпселек йәштәр әле үҙ илебеҙҙә үк башҡортса һөйләшмәй, шунан уларҙы нисек итеп гәзиткә яҙҙыраһың? Быңдай мәсьәләләрҙә айырым-айырым ғына хәл итеп булмай. Йәнә лә: йәштәрҙе гәзит уҡырға өгөтләп кенә телһөйәрҙәр, илһөйәрҙәр тәрбиәләп тә булмай. Йәштәр тәрбиәһе лә, туған телебеҙ һәм матбуғат мәсьәләләре лә дәүләт кимәлендә һәм юғарыларында хәл ителергә тейеш тип уйлайым. Шул саҡ ҡына гәзиттәр ҙә йәшәр, йәштәр ҙә ситкә сығып китеүҙе генә ҡарап тормаҫ.

Элеккебеҙҙе һағынып һөйләһәм дә, бөтәһе лә идеаль ә түгел ине шул. Нисек кенә тырышып, яратып уҡыһаҡ та, совет осоро балаларының ауыртҡан урыны ғаилә өлкәһендә тома наҙанлыҡ ине. Йәмғиәтебеҙ нигеҙе булған ғаилә һәм ғаилә мөнәсәбәттәре, шәхси тормошобоҙ икенсе планда булды. Был мәсьәләгә балалар баҡсаһынан алып мәктәп, урта һәм юғары уҡыу йорттарында ла бөтөнләй урын булманы. Йәмғиәт менән ғаилә һәм айырым кеше мәнфәғәттәре ҡапма-ҡаршы ҡуйылыуы арҡаһында тома наҙан көйө тип әйтерлек тормош ҡорҙоҡ һәм йәшәнек, тиһәң дә була. Матбуғат баҫмаларында кешенең шәхси проблемаларын, ғаиләләрҙәге эске мәсьәләләрҙе яҡтыртыуға урын да, минә ҡалһа, рөхсәт тә юҡ ине һымаҡ. Бөгөнгө гәзит һәм журналдарыбыҙ, ниһайәт, ергә төштө, ябай кеше тормошона яҡын килде. Бигерәк тә, "Киске Өфө" гәзите. Барсабыҙ ҙа һыуға сарсаған, ҡорғаҡһыған ер кеүек ҡабул иттек был гәзиттең тормошобоҙға килеп инеүен. Хатта бер мәл Әхмәр Үтәбай "Гәзиттең өс йыллыҡ төпләмәһе менән генә лә йәшәйеш өсөн кәрәк булған бөтөн белемде алырға була", тигән һымағыраҡ фекер әйткәйне. Гәзитебеҙ бөгөнгө көндөң иң кисәкен мәсьәләһе булған туған телебеҙ проблемаларын арыу-талыуһыҙ яҡтырта. Тамсы тамата таш яра, тигәндәй, бер заман был тырышлыҡтар әлеге гәзит уҡымаған быуын аңына ла юл табыр, моғайын, тип өмөтләнге килә.

"Киске Өфө"лә йәштәр һәм ололар өсөн дә, айырым кешеләр һәм төрлө һөнәр эйәләре өсөн дә, ғаилә һәм йәмғиәт мәсьәләләре лә, йәшәйеш ҡанундары һәм башҡа бик күп темалар буйынса ихтыяжға, зауыҡҡа тап килгән материалдар баҫылып килә. Артабан да үҙебеҙҙе ошо рухи хазинабыҙҙан мәхрүм итмәйек, замандаштар. Барлыҡ матбуғат хеҙмәткәрҙәренә лә ижади уңыштар, илһамлы хеҙмәт, ғаилә именлеге, рух бөтөнлөгө насип булһын.

***Миңзәлә ШӨҒӘЙЕПОВА, журналист, БР Яҙыусылар берлеге ағзаһы, Учалы районы:*** Гәзит-журналдар беҙҙең йортта бала саҡтан бихисап күп булды. Әсәй һуғыш йылдарында тракторҙа һуҡасы булып эш башлап, сиҙәм ерҙәрҙе үҙләштереүҙә ҡатнашҡан, аҙаҡ ғүмере буйы һауыусы булып эшләгән ябай ауыл ҡатыны, беҙҙе уҡымышлы итеп күргеһе килгәндер инде, йыл һайын әллә күпме матбуғат баҫмаларына яҙылыр ине. Йәнә шуныһы: әсәй эштән ҡайтып, кистәрен тамаҡ ялғап алғас та, ғаиләбеҙ менән бергә йыйылабыҙ ҙа уҡыу сәғәттәре ойоштора инек. Миннур һеңлем менән алмашлап ҡысҡырып уҡыйбыҙ. Нәнәй ҙә беҙҙең менән бергә... Ололар шунда уҡ үҙҙәренә оҡшаған мәҡәләгә үҙ мөнәсәбәтен белдереп, үҙ-ара әңгәмә ҡороп ебәрә. Хәҙер һеңлем менән шул саҡтарҙы иҫләйбеҙ ҙә яңы аңлайбыҙ: ниндәй дөрөҫ тәрбиә мәктәбе булған! Үҙенә күрә беҙҙе фекерләргә, донъяны танып белергә, аҡты ҡаранан айырырға өйрәткән үҙенсәлекле "Түңәрәк ҡор" булған икән йыйылып гәзит уҡыу ғәҙәте. Ә күпме китаптарҙы ла шулай уҡый инек!

Бала ваҡытта беренсе тапҡыр шиғырҙарымды "Башҡортостан пионеры" һәм "Пионер" журналында баҫтырып сығарғас, түбәм күккә тейҙе. "Мәктәп тормошо" тигән таҡтаға шул шиғырҙарҙы элеп ҡуйҙылар. Ошо көндән башлап "шиғыр ене" ҡағылған беҙҙең байтаҡ малай-ҡыҙҙарға матбуғаттың мөртәбәһе йәнә бер башҡа күтәрелде. Әллә ҡайҙағы буй еткеһеҙ бейеклектәге Өфөнөң Өфөһөндә Урал төпкөлөндә ятҡан ауылыбыҙҙы исемләп, Ураҙ ауылы тип күрһәтеп тороп, шиғырҙарыңды баҫһындар әле! Класташтарым менән ихлас ҡыуанышҡан мәлдәребеҙ әле лә күңелдә йылыта. Һуңынан уҡытыусыбыҙ Зифа Фәсхетдин ҡыҙы башҡа тиңдәштәремдең дә шиғырҙарын туплап ебәргәс, йәнә ташҡа баҫтылар. Һәр номерын көтөп алып уҡыр инек. Әлеге көндә лә ирем һөнәре буйынса журналист булараҡ, шулай уҡ гәзитһеҙ йәшәй алмайбыҙ. Ауылға йәшәргә күскәс тә аҙна һайын Учалыға барып, бер ҡосаҡ матбуғат баҫмалары һатып алып ҡайтып уҡый. Балалар ҙа белеп бөткән: ялға ҡайтһалар, күстәнәскә иң тәүҙә гәзит-журнал һатып алалар. Йәл, күп гәзиттәр элекке кеүек көн аша түгел, аҙнаһына бер тапҡыр ғына сыға. Улары ла күбеһенсә ауылға һуңлап килә. Мин үҙем күберәген баҫмаларҙағы яңылыҡтарҙы интернет селтәре аша уҡыйым, ә ирем элеккесә ҡулға тотоп уҡымаһа, тынһығы ҡанмай.

Ғөмүмән, гәзит-журналдар беҙҙе ғүмер буйы оҙата килде. Артабан да шулай булырына өмөтләнәм, сөнки, мәғлүмәт саралары ни тиклем генә төрләнмәһен һәм алға китмәһен (электрон сараларҙы күҙҙә тотоуым), яҙма матбуғат барыбер йәшәргә тейеш: уның үҙ уҡыусылары, үҙ даирәһе бар. Быны гәзит уҡыуҙың өҫтөнлөктәрен, тәмен тойған кешеләр генә раҫлай алалыр. Шуныһы ла бар: аналитиктар билдәләүенсә, кешелек бер заман электрон технологияларҙан бүген, барыбер ҡағыҙ матбуғатҡа әйләнеп ҡайтасаҡ. Европа, Азия һәм хатта Америкала ла ошондай тенденция күҙәтелә, ти улар. Бирһен Хоҙай!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# УҠЫУ ЛӘЗЗӘТЕНӘН...

## мәхрүм булмайыҡ!



**"Киске Өфө"нөң үткән бер һанында Миләүшә Ҡаһармановаҙың "Ә һеҙ гәзиткә яҙылманығыҙмы ни?" тип бер ағайҙы оялтҡаны хаҡындағы мәҡәләне уҡығас, Айгиз Баймөхәмәтовтың да шундайыраҡ бер хәл тураһында яҙғаны иҫемә төштө.**

Өлкә гәзиттәренең береһенә сираттағы ярты йыллыҡҡа яҙылыу башланғас, йола буйынса, бер нисә гәзит хеҙмәткәре районлар буйлап командировкаға сыҡҡан.Пропагандалаусылар араһында олораҡ йәштәрҙәге бер яҙыусы ағай ҙа булған. Осрашыуҙарҙың береһендә был ағай сығыш яһаған мәлдә уға: "Ә һеҙ үҙегеҙ шул гәзиткә яҙылдығыҙмы?" - тип аңғармаҫтан һорау биргән. "Гәзиткә яҙылыу бигерәк ҡыйбат бит хәҙер, нисек яҙҙырып бөтәһең уларҙы", - тип һалдырмаһынмы ағайыбыҙ...

Әйткәндәй, ундай һорауҙы миңә лә биргеләгәндәре бар. Гәзиткә яҙылып өлгөрмәҫ борон шундай һорау алһаң, ысынлап та оят булып китә. Нәҡ теге бала саҡта дәресен әҙерләргә онотоп килгән мәктәп уҡыусыһы һымаҡ, шыбыр тиргә батаһың хатта. Шунлыҡтанмылыр, мин үҙем шәхсән "ташламалы" ун көнлөктө лә көтөп тормаҫтан, иң беренселәрҙән булып гәзитебеҙгә яҙылырға ашығам. Ә инде матбуғатҡа яҙылыуҙы бер аҙ ғына кисектерә башлаһаң, өйҙәге "старшина" (хәләл ефетем) шунда уҡ иҫкә төшөрөргә тотона. Гәзитһеҙ тора алмай ул да...

Әлеге ағай әйтмешләй, ысынлап та ҡиммәтме икән гәзит хаҡы? Мәҫәлән, "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу хаҡы бер айға 115 һум ғына килеп сыға! Шул ҡиммәт буламы? Әйтәйек, тәмәке тартҡан кеше быңдай ғына суммаһы көн эсендә зыянлы төтөнгә әйләндереп бөтөрә. Хәйер, эш унда ла түгел. Гәзит уҡымаған кешене оҙаҡ тотонолмай ятыу сәбәпле тутыҡҡан берәй тимер әйбергә оҡшатам мин. Ундай кеше менән теге йәки был темаға һөйләшеүе лә әллә ни ҡыҙыҡ булмай сыға. Ә бәғзе берәү менән әңгәмәләшә башлап, уның "фәлән гәзиттә шуны уҡыным, быны күрҙем" тигәнерәк һүҙҙәрен ишетһәң, быңдай кешегә ҡарата ниндәйҙер кимәлдә ихтирам уяна.

"Киске Өфө"нөң һәр һаны - үҙе бер ҡыҙыҡлы китап һымаҡ бит ул! Күп яҡлы, тәрән йөкмәткеле булған был баҫма ил яңылыҡтарын ғына һөйләп ҡалмай, ҙур тәрбиәүи әһәмиәткә лә эйә. Милләтеңде, телеңде, тарихыңды яҡшыраҡ белеү өсөн дә бик ҡиммәтле сығанаҡ булып тора гәзитебеҙ. Әленән-әле хаҡ динебеҙгә ҡағылышлы мәҡәләләрҙе уҡып шатланаһың. "Ғаиләм - ҡәлғәм", "Шифа" һымаҡ махсус биттәрҙә һәммәбеҙ өсөн бик файҙалы мәғлүмәттәр баҫылып сығып тороуы гәзитебеҙҙе тағын да уҡымлыраҡ итә. Ә иң мөһиме, гәзит уҡыу процесы - үҙе бер ҙур ял ул. Түҙемһеҙлек менән көтөп алған "Киске Өфө"нө аҙнаһына бер мәртәбә (тап шәмбе көн) ҡыҙыҡлы берәй спектакль йә иһә фильм ҡараған һымаҡ, уның өсөн үҙенә махсус ваҡыт бүлеп, кемдер әйтмешләй, шартына килтереп (креслола йәйелеп ултырып), тәмләп-тәмләп уҡырға яратам мин. Бәғзе бер мәҡәләләрҙе икешәр, хатта өсәр мәртәбә уҡып сығам! Сөнки хәтерләп йә ятлап алып ҡалырға кәрәк булған факттар, аҡыллы фекерҙәр йыш осрай унда. Бына шулай, гәзит уҡыуҙы иң ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс шөғөл, хатта уны "үҙе бер сәнғәт", тип тә атар инем.

Гәзит уҡыуҙың сәләмәтлеккә файҙалы яғы хаҡында ла аныҡ бер миҫал килтереп китәйем. Элегерәк тәмәкенән бер нисек тә ҡотола алмаған бер танышым фәҡәт гәзит-журналдар яҙҙырып уҡый башлауы ғына уға был алама ғәҙәттән ҡотолорға ярҙам иткәне хаҡында һөйләгәйне. Тәмәке тартыуын ташлап, ғүмеренең ахырынаса тик гәзит уҡыуҙан ғына ләззәт табып йәшәне ул. Гәзит уҡыуға шундай ҡараш булғандар, моғайын, күп кенәлер, тип ышанам. Бына ошо шөғөлгә мәктәп балаларын ылыҡтыра алған хәлдә, был уларҙың төрлө яҡлап үҫешенә лә булышлыҡ итер ине, тигән инаныуҙамын. Ғөмүмән, гәзитебеҙҙе даими яҙҙырып, уның ҡәҙерен белеп, тәмләп кенә бөтә ғаиләбеҙ менән уҡыуҙы ғәҙәт итеп алайыҡ. Йәш быуынға ла йоҡторайыҡ ошо ғәҙәтебеҙҙе. Гәзитһеҙ, кемдер әйтмешләй, ҡатып, мүкләнеп, тутығып ултырмайыҡ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Роспотребнадзор халыҡ-ара рейстар өсөн тәҡдим иткән аэропорттар исемлеге баҫылып сыҡты. Туроператорҙар ассоциацияһында билдәләүҙәренсә, самолеттар сит илгә 15 июлдән оса башлай. Тәҡдим ителгәндәр исемлегендә Өфө халыҡ-ара аэропорты ла бар.

✓Республика Башлығының матбуғат хеҙмәте мәғлүмәте буйынса, Радий Хәбиров ҡатнашлығындағы барлыҡ саралар Роспотребнадзор һәм Рәсәй Федерацияһы Һаулыҡ һаҡлау министрлығының ғәмәлдәге тәҡдимдәре сиктәрендә үҙғарыла. Атап әйткәндә, биналарҙа һауа даими зарарһыҙландырыла һәм дезинфекция үткәрелә, был тулыһынса санитар-эпидемиологик хәүефһеҙлекте тәьмин итә. 1,5 метрлыҡ социаль дистанцияны үтәү ҙә мотлаҡ. Шулай уҡ Радий Хәбировтың көн һайын коронавирус инфекцияһына тест тапшырыуы билдәләнә.

✓Бөгөндән Рәсәй граждандарына эшләү, уҡыу һәм дауаланыу өсөн сит илгә сығырға мөмкин. Хөкүмәттең тейешле бойороғона ҡул ҡуйылды, тип хәбәр итте ТАСС Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Михаил Мишустинға һылтанма менән. "Беҙҙең медицина ойошмаларында дауаланырға йыйынған, шулай уҡ бында тәрбиәгә мохтаж яҡын туғандары, опекундары йәки попечителдәре йәшәгән сит ил граждандары ла Рәсәйгә инә ала", - тине министрҙар кабинеты башлығы.

✓Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге һәм Башҡортостан Республикаһының сәсәндәр үҙәге милли батырҙың тыуған көнө уңайынан флешмоб иғлан итте. Флешмобта ҡатнашыусылар социаль селтәрҙә #БашҡортСәсәндәре #СалауатМенән #СалауатЮлаев #РЦНТРБ #МКРБ #ЦентрСэсэновРБ хештегы менән Салауат Юлаевҡа арналған йырҙар һәм ҡобайырҙар башҡара, яугир шағирҙың шиғырҙарын һөйләй, видеороликтар менән бүлешә. Флешмоб 2020 йылдың 12 июненән 16-һына тиклем дауам итә.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһы "Евразия йөрәгенән ҡараш" концепцияһы сиктәрендә урбанистарҙың халыҡ-ара форумын ҡабул итә. Республика Башлығы Радий Хәбиров сара июнь аҙағында уҙасағын белдерҙе. Радий Хәбиров Өфө хакимиәтенә халыҡ-ара форумға тиклем "Имәндәр" скверын һәм "Торналар" фонтанын файҙаланыуға тапшырырға ҡушты. Алдан хәбәр ителгәнсә, яңы һалма объект июль башында асылырға тейеш ине.

✓ Башҡортостандың онлайн-сменалар тәжрибәһе Рәсәйҙең Мәғариф министрлығында юғары баһа алды. Айбулат Хажин билдәләүенсә, Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән 400-ҙән ашыу бала республиканың онлайн-лагерҙарында ҡатнаша.



ҠЫҪҠАСА

# БАЛАЛАР ХӘСТӘРЕ

✓ **Республика мәктәптәрендә быйыл сығарылыш кисәләре 27 июндә онлайн уҙғарыла.** "Беҙ балаларҙың байрамы булырға тейешлеген аңлайбыҙ, әлбиттә. Барыһы ла яҡшы булһа, санитар табиптарҙың рөхсәте менән 25 июлдә имтихандарҙан һуң ошондай кисәләр ойоштора алырбыҙ тип уйлайбыҙ", - тине Башҡортостандың мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин "Мәғариф сәғәте"ндә. Кәңәшмәлә Берҙәм дәүләт имтиханына әҙерлек тураһында ла һүҙ барҙы. Ул 3 июлдә башлана. Етди сәбәптәр буйынса июлдә имтихан бирә алмағандар өсөн августа өҫтәмә осор ҡаралған. Мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин һүҙҙәренсә, берҙәм дәүләт имтиханын ҡабул итеү пункттарында санитар контроль тәьмин ителгән. Мәктәп автобустары көнөнә ике тапҡыр антисептиктар менән эшкәртелергә тейеш. Бынан алда республикала 17 меңдән ашыу уҡыусының Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырырға йыйыныуы тураһында хәбәр ителгәйне. Улар өсөн 110 имтихан пункты асылса.

✓ **Башҡортостанда июндең өсөнсө декадаһында юғары уҡыу йорттары документтар ҡабул итә башлай.** Уҡырға алыу августа ойоштороla. Тәү сиратта льготаға эйә студенттар ҡабул ителә. "2020-2021 уҡыу йылына 11 меңдән ашыу бюджет урыны бүленгән. Был уҙған йылға ҡарағанда 1 073-кә күберәк. Абитуриентҡа ҡабул итеү комиссияһына шәхсән килергә кәрәкмәй. Уҡырға инеүселәр ғаризаны һәм тейешле документтарҙы вуздарҙың сайты аша электрон формала ебәрә ала", - тип һөйләне республика юғары уҡыу йорттары ректорҙары советы рәйесе, Башҡорт дәүләт педагогия университеты ректоры Салауат Сәғитов "Мәғариф сәғәте"ндә. Радий Хәбиров Мәғариф министрлығына муниципалитеттар менән берлектә интернетҡа тоташтырылмаған ауыл абитуриенттарына вузға документтар тапшырырға ярҙам итергә ҡушты. "Документтар биреүҙән, абитуриенттарға тест үткәреүҙән дистанция режимында ойошторолоуы һәйбәт. Республикала йәшәүселәрҙең бөтәһе лә ошо хаҡта белергә тейеш", - тине Радий Хәбиров һәм аңлатыу эшен алып барыу бурысын йөкмәтте.

✓ **Ике меңдән ашыу балалар һауыҡтырыу лагерҙары 1 июлдән асылырға әҙер.** Уларҙың хеҙмәткәрҙәре ябыҡ режимда вахта алымы менән эшләргә тейеш. Ата-әсәләр шәмбеһе булмай. Санитар контроль максималь кимәлдә ойоштороla. Был турала онлайн уҙғарылған "Мәғариф сәғәте"ндә Башҡортостандың мәғариф министры Айбулат Хажин һөйләне. "Беҙҙә балалар күп. Бөтәһе лә арыған һәм ял итергә теләй. Ләкин лагерҙы асырҙан алда бөтә нормаларҙың да үтәлгәнме, юҡмы икәнен биш тапҡыр уйлағыҙ. Әгәр рөхсәт ителгәндән һуң лагерҙа сир сығанағы табылһа, сменаны асҡан кешеләргә ҡаршы енәйәт эше ҡуҙғатыла. Эпидемиологик хәл яҡшырмаһа, асмай торорға", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Республикала онлайн-сменалар әүҙем башланды. 70 меңдән ашыу бала дистанция режимында интерактив конкурстарҙа һәм квестарҙа ҡатнаша, буш ваҡытын ҡыҙыҡлы үткәрә. Башҡортостандың онлайн-сменалар тәжрибәһе Рәсәйҙең Мәғариф министрлығында юғары баһа алды - республика проекттары федераль ресурстарға урынлаштырылды. Айбулат Хажин билдәләүенсә, Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән 400-ҙән ашыу бала республиканың онлайн-лагерҙарында ҡатнаша.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ИНВЕСТОРҘАР КИЛӘ...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Ишембайҙа "Алға" махсус иҡтисади зонаһын үҫтереү мәсьәләләре буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Унда республика хөкүмәте ағзалары, министрлыҡ һәм ведомство етәкселәре, махсус иҡтисади зонаның буласаҡ резиденттары вәкилдәре ҡатнашты.**

Потенциаль резиденттар бында үҙҙәренең производстволарын урынлаштырыу өсөн йылдам идара итеү ҡарарҙарын ҡабул итергә тейеш, тип билдәләне кәңәшмәлә ҡатнашыусылар. Махсус иҡтисади зона участкаларының дөйөм майҙаны (нәр районда икешәр) 470 гектар тәшкил итә. Уларҙың яртыһынан ашыуы проекттар өсөн тәғәйенләнгән дә инде. Тиҙҙән Рәсәй һәм Башҡортостан хөкүмәттәре, район хакимиәттәре араһында стратегик йүнәлештәрҙә һәм махсус иҡтисади зонаның үҫеш этаптарын билдәләргә тейешле килешеү төҙөргә кәрәк. "Махсус иҡтисади зона булдырылды. Уның резиденттарының бында мөмкин тиклем тиҙерәк инеүе һәм үҙ башланғыстарын ғәмәлгә ашыра башлауы бик мөһим. Шуға күрә ҡыҫҡа ваҡыт эсендә бында етештереү майҙансыҡтары барлыҡҡа килһен өсөн беҙҙең яҡтан аныҡ ғәмәлдәр кәрәк, - тип йомғаҡ яһаны Радий Хәбиров. - Шулай уҡ реаль проекттары булған ышанысылы инвесторҙар эҙләүҙә дауам итеү зарур. Уларҙың килеүенә беҙҙә бөтә нәмә әҙер булырға тейеш". Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, май аҙағында Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин Ишембай һәм Стәрлетамаҡ райондары сигендә ошо биләмәне булдырыу тураһындағы ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Республика Башлығы Башҡортостан хөкүмәтенә инвесторҙар өсөн инфраструктура булдырыу йәһәтенән әҙерлек һәм проект алды эшен башларға, шулай уҡ проекттарға булышлыҡ итеү буйынса төбәк саралары яҡшылап уйларға ҡушты. Эшмәкәрлектең координаторы - вице-премьер Илшат Тажетдинов.

# ЭШҺЕҘҘӘР АРТА

**Әлеге ваҡытта эш биреүселәр Башҡортостан Республикаһы Мәшғүллек хеҙмәтенең Интерактив порталында вакансиялар банкы аша 16 меңдән ашыу вакансия тәҡдим итә.**

Төҙөләш өлкәһендә, агросәнәғәт комплексында һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡта һорау ҙур. Башлыса эшсе һөнәрҙәр талап ителә. Был хаҡта республиканың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова уҙғарған брифингта белдерелде. Шуның менән бергә кризис күренештәре арҡаһында Башҡортостанда теркәлгән эшһеҙлек арта. Бөгөнгә ул 67 мең кеше тәшкил итә, йыл башынан эшһеҙҙәр һаны 3,7 тапҡырға күбәйгән. Ленара Иванова билдәләүенсә, быны сәбәптәре күп, пандемия ғына түгел. "Сервистар һәм регламенттар шәп үҙгәрә, тулаҙәр тәғәйенләү тураһында ҡарарҙар быға булмағанса тиҙ ҡабул ителә, - тип белдерҙе Ленара Иванова. - Теркәлгән эшһеҙлек кимәленең артыуы хәҙер өйҙән сыҡмайынса иҫәпкә баҫырға мөмкин булыуына ла бәйле. Эшһеҙлек буйынса минималь пособие күләмен арттырыу тураһында ҡарар - беҙҙең республикала 5175 һум - шулай уҡ мөһим роль уйнай, сөнки был пандемияға бәйле эшен юғалтҡандарға түгел, ә оҙаҡ эшләмәгән граждандарға ҡағыла".

# АУЫЛҒА - БЕЛГЕСТӘР

**Рәсәйҙең "Ауыл биләмәләрен комплекслы үҫтереү" дәүләт программаһына үҙгәрештәр индерелде. Хәҙер ауыл хужалығы тауарҙарын етештереүселәр 2021 йылдан университетта студенттарҙы маҡсатлы уҡытыу тураһында килешеү буйынса сығымдарҙың 90 процентҡа тиклемен, ә колледждарҙа 30 процентҡа тиклемен ҡайтара ала.**

Мәсәлән, студент, предприятие һәм Башҡорт дәүләт аграр университеты араһында маҡсатлы уҡытыу өсөн өс яҡлы килешеү төҙөлә. Предприятие семестр һайын студенттың уҡыуы өсөн аҡса түләй һәм йыл аҙағында республика Ауыл хужалығы министрлығына тейешле субсидия алыу өсөн документтар тапшыра. Аграр ведомствоның матбуғат хеҙмәтендә билдәләүҙәренсә, ағымдағы йылда уҡ (беренсе семестр өсөн) предприятиеға 30 процентҡа тиклемен ҡайтаралар, ә киләһе уҡыу йылынан агрокомпанияның белгесте уҡытыу өсөн сығымдары 10 процент ҡына була. Көндөҙгө бүлектә һәм ситтән тороп уҡырға мөмкин. Тулыраҡ мәғлүмәтте Башҡортостан Республикаһы Ауыл хужалығы министрлығының фәнни-белем биреү учреждениелары менән үҙ-ара эш итеү бүлегендә алырға мөмкин. Телефон: +7 (347) 218-05-44. Ғаризаларҙы presnyakov.kv@bashkortostan.ru, almakaeva.rn@bashkortostan.ru почтаһына ебәрергә кәрәк.

# ҠАҒИҘӘЛӘРҘЕ ҮТӘМӘНЕҢМЕ? ЯБЫРҒА!

**Мәғлүм булыуынса, 1 июндән барлыҡ сауҙа үҙәктәре һәм гипермаркеттар ҡурсаланыу режимынан сығып, эш башланы. Башҡортостандың Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса дәүләт комитеты уларҙың "Юғары әҙерлек" режимы шарттарында яңы эш ҡағиҙәләрен раҫланы. Был талаптар аҙыҡ-түлек һәм көнкүреш тауарҙары менән һатыу иткән барлыҡ объекттарға ла ҡағыла. Төп ҡағиҙәләр шундай:**

- Сауҙа үҙәктәре көн дауамында хеҙмәткәрҙәренең һәм һатып алыусыларҙың тән температураһын тикшерергә бурыслы. Тән температураһы юғары булған хеҙмәткәрҙәр эштән азат ителә, ә һатып алыусылар индерелмәй. Сауҙа үҙәге хеҙмәткәрҙәрҙең тән температураһын журналға теркәп барырға тейеш.
- Хеҙмәткәрҙәр, сәләмәтлектәрендә үҙгәреш булған осраҡта эш биреүсегә хәбәр итергә һәм эшкә һауыҡыу тураһында медицина справкаһы булғанда ғына сығырға, шәхси гигиена ҡағиҙәләрен үтәргә тейеш.
- Бинаға ингәндә күренеп торған урында COVID-19 һәм профилактик саралар тураһында мәғлүмәт булырға һәм был хаҡта мәғлүмәт таратыу системалары ла даими иҫкәртеп торорға тейеш.
- Аҙыҡ-түлекте тәмләп, аҙыҡ-түлек булмаған тауарҙы ҡулланып ҡарау, йәғни һатып алыусының продукцияға ҡағылыуы тыйыла.
- Сауҙа үҙәктәре хеҙмәткәрҙәрҙе өс сәғәткә бер тапҡыр ҡулланыла торған битлектәр, бер сменаға бер пар бирсәткә, дезинфекция саралары һәм салфеткалары, антисептиктар менән тәьмин итергә бурыслы. Битлектәрҙе һәм бирсәткәләрҙе бер нисә тапҡыр ҡулланыу тыйыла.
- Техник мөмкинлек булғанда кассаларға һаҡлау экрандары, кассирҙарға һаҡлау ҡүҙлектәре бирелә.
- Һатып алыусылар өсөн ингән һәм сыҡҡан ерҙә дезинфекция саралары ҡуйылырға, ләкин дистанция һаҡланырға, уларҙың хәрәкәтләнеү тәртибе билдәләнергә тейеш.
- Көн дауамында бина бер нисә тапҡыр дезинфекция саралары ҡулланып йыуылырға, елләтелергә, был ғәмәлдәр махсус журналда теркәлеп барылырға тейеш.

Документҡа ярашлы, әгәр хакимиәт был талаптарҙы үтәмәй, хеҙмәткәрҙәрен эшкә һаҡланыу һәм дезинфекция сараларһыҙ үткәрә икән, сауҙа объекты иҫкәртеүһеҙ ябыла.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостанда яңы коронавирус инфекцияһының таралыу формаһы үҙгәрҙе. Быға тиклем кешеләр сирҙе башлыса йәмәғәт урындарында һәм медицина учреждениеларында йоҡторһа, хәҙер ғаиләлә йоҡтороу осраҡтары теркәлә. Республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин әйтеүенсә, был хәл вахтасыларҙың күпләп ҡайтыуы менән бәйле булыуы ихтимал. Билдәле булыуынса, өлкән йәштәгеләр коронавирус инфекцияһын ауыр формала үткәрә, ҡайны берҙә үпкәне яһалма елләтеү аппаратына тоташтырыу, реанимация саралары талап ителә.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында йәйләп Күп функциялы үҙәктәргә алдан яҙылыу процедураһы бөтөрөлдө. 4 июндән "Башҡортостан" сауҙа үҙәгендәге бүлексә сират буйынса ҡабул итә башланы. Бынан алда "Аркада" (Ғөбәйҙуллин урамы, 6) һәм "ХБК" (Менделеев ур., 137, 4-се корпус) операция залдарында ошо процедура тергеҙелде. 5 июндән башҡа операция залдары сират буйынса ҡабул итә башланы. Битлек кейеү һәм социаль дистанция нормаларын үтәү мотлаҡ.

✓Июндә рәсәйҙәрҙе Рәсәй көнө һәм Еңеү парады ойошторолоу унайынан ике ҡыҫҡа эш аҙнаһы көтә. Тәүҙә рәсәйҙәрҙе 12 июндән 14-енә тиклем ял көтә. 11 июндә эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара. Бынан тыш, Рәсәй Президенты Владимир Путин коронавирус пандемияһы арҡаһында күсерелгән Еңеү парады 24 июндә - 1945 йылда Ҡыҙыл майҙанда "еңеүселәрҙең тарихи парады" уҙған көндә буласағын иғлан итте. 24 июндең ял булыуын, ләкин эш хаҡы һаҡланыуын иҫәпкә алып, 23-ө байрам алды көнө тип һаналмай, шуға күрә эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡармай.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында күпселек фонтандар эшләй башланы. Тәүгеләрҙән булып Театр майҙанында "Ете ҡыҙ", Салауат Юлаев майҙанында "Ҡурай", Ленин исемендәге паркта (элекке Александр Матросов баҡсаһы йәки Ушаков паркы), "Башҡортостан" дәүләт концерт залы янындағы һәм башҡа фонтандар асылды.

✓Өфөлә Болгарияның почетлы консуллығы асылды. Ҡарар 3 июндә республика хөкүмәте ултырышында ҡабул ителде. Вәкиллектә Рәсәй гражданы Ярослав Шредер етәкләй. Консуллыҡты асыуҙың маҡсаты - Рәсәй менән мөнәсәбәттәрҙе үҫтереү, сауҙа-иҡтисади мөнәсәбәттәрҙе әүҙемләштереү һәм башҡа өлкәләрҙәге хеҙмәттәшлекте киңәйтеү.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ҺАҠЛАНАБЫҘ...

**Өфө ҡала округы хакимиәтендәге оператив кәңәшмәнең көн тәртибендә йәйге осорҙа һыу сығанаҡтары эргәһендә ял зоналарын ойоштороу, яңы йылытыу миҙгеленә әҙерлек мәсьәләләре ҡаралды.**

Быйыл Өфөлә рәсми ял зоналары тип "Карьер" (Дим районы), "Комсомолец", "Гольфстрим" һәм "Ожмах яры" (Калинин районы), "Кояшлы" (Киров районы), "Водник" стадионы эргәһендәге һәм "Аҡ яр" (Ленин районы), "Кояш яры" һәм "Һупайлы сочиһы" (Октябрь районы) ял зоналары билдәләнде. Уларҙа һыу инеү миҙгеленә әҙерлек шарттары тикшерелгән һәм асыҡланған етешһеҙлектәр буйынса яуаплыларға иҫкәртеүҙәр еткерелгән. Аталып үткән урындарҙа иртәнге 10-дан кискә тиклем әҙләү-ҡотҡарыу отряды хеҙмәткәрҙәре дежур итәсәк. Шулай уҡ барлыҡ һыу инеү урындарында ла санитар нормалар контролләнә, шуға күрә һыу сығанаҡтарында халыҡтың ялын ойоштороусы ойошмалар һәм эшҡыуарҙар санитар-эпидемиологик экспертиза үтергә һәм һығымта алырға тейеш. Илдәге эпидемиологик хәл-торош талаптары хаҡында ла онотоРға ярамай: ял зоналарында шәхси һаҡланыу һәм дезинфекция саралары булырға, ял итеүселәр социаль дистанция һаҡларға тейеш. Иң мөһиме - һыу ингәндә лә хәүефһеҙлек хаҡында һис иҫтән сығармаһындар ине. Юҡһа, күптәр үҙ-үҙенә ныҡ ышанып, рөхсәт ителмәгән урында ла һыу инергә тырыша һәм үҙенең генә түгел, ярҙам итергә теләүселәрҙең дә ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуя. Йыл һайын рөхсәт ителмәгән урындарҙа батып үлеүселәр була тороп та, "батырланыусылар" кәмемәй.

Хәйер, ошо көндәрҙә ҡуҙәтелгән эҫенән ҡаланың тынсыу фатирында ултырып сыҙап та булмай инде. Эҫе тигәндән, кәңәшмәлә алда торған йылытыу миҙгеленә әҙерлек эштәре барышы менән Ҡаланың йәшәү эшмәкәрлеген тәьмин итеү идаралығы начальнигы вазифаһын башҡарыусы Антон Тристан таныштырҙы. Уҙған миҙгел уңышлы үткән, сөнки авария осраҡтары 2018-2019 йылдар миҙгеле менән сағыштырғанда 28 процентҡа кәмегән. Әлеге ваҡытта, графикка ярашлы, 23 километрҙан ашыу арауыҡта капиталь ремонт эшләү планлаштырыла. Шулай уҡ Аэропорт ҡасабаһында һәм Шаҡша биҫтәһендә ике ҡазанлыҡ төҙөләсәк. Ҡаланың идара итеүсе предприятиелары 4,5 мең күп фатирлы йортто йылытыу миҙгеленә әҙерләй. Сығыш яһаусы белдереүенсә, ремонт эштәре барышында график буйынса йылы һыу биреү туҡтатыласаҡ, әммә был ваҡыт 14 көндән дә артмаҫҡа тейеш. Ҡышын йылы фатирҙа, йылы һыу ҡулланып ултырырға теләһәк, йәйге томрала ғына бындай уңайһыҙлыҡтарға түҙергә була.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ӨФӨ УЙНАЙ



**Өфө ҡала хакимиәте уҡыусыларҙың йәйге ялы файҙалы һәм күңелле үтеүен хәстәрләп, "Өфө уйнай - 2020" оффлайн уйынын ойоштора. Сара тураһында тулы мәғлүмәтте журналистар менән осрашыуҙа Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Алина Сөләймәнова, хакимиәттең Мәғариф идараһы начальнигы Елена Хаффазова һәм Йәштәр эштәре буйынса комитет етәксеһе Роман Янгуров еткерҙе.**

Өфөлә барлығы 123 меңгә яҡын мәктәп йәшендәге бала йәшәй, шуларҙың 66 меңе быйылғы йәйге каникулдың беренсе айын баш ҡалала үткәрергә мәжбүр. Сөнки илдә коронавирус инфекцияһына ҡаршы ҡабул ителгән һаҡланыу сараларына бәйле, балалар өсөн һауыҡтырыу һәм ял итеү лагерҙары июлдән генә ойоштоРола. Шуға баш ҡала уҡыусыларының ялын бер аҙ йәнләндереп ебәреү, былай ҙа ялҡытып киткән компьютер уйындарынан айырып, саф һауа һуларға мөмкинлек биреү ниәтендә тәүге тапҡыр "Өфө уйнай - 2020" уйыны ойоштороЛа. Уйын 8 июндән алып ай аҙағына тиклем үтә.

- Бала саҡта беҙ ҙә хазина эҙләргә, "Зарница", "Казаки-разбойники" һәм башҡа уйындарҙы ярата торғайныҡ. Әммә беҙҙең балалар икенсе төрлө фекерләй, уларҙы әлеккке ябай уйындар менән генә ҡыҙыҡһындырып булмай. Шуға һәр балаға индивидуаль эш тәҡдим итәбеҙ, һынауҙар уның ҡыҙыҡһыныуына, белеменә, күнеленә яткан шөғөлдәренә нигеҙләнеп төҙөлә. Уйын өсөн ҡала квадраттарға бүленә һәм бала үҙе йәшәгән территориялағы квадратта ғына уйнай ала. Беҙҙең өсөн уҡыусының ғүмер хәүефһеҙлеге иң мөһим урында тора, шуға ул уйында ҡатнашыу өсөн юлды аша сығырға, кварталдар үтергә тейеш түгел. Баш ҡаланың 7 районында шундай хәүефһеҙ бер нисә квадрат билдәләнде, квота буйынса бер районда 100 кеше уйнай. Ҡатнашыусылар 4 көн дауамында өсәр сәғәт шөғөлләнә, һәр көн 6 задание бирелә, шунан аҙна аҙағында 2 көн баһалама комиссияһы йомғаҡ яһай. Икенсе аҙнала район кимәле үтә һәм унда еңеүселәр ҡала кимәлендә ярышасаҡ. Балаларҙы ылыҡтырыу өсөн елле бүләктәр ҙә әҙерләнек: район кимәлендә еңеүселәргә заманса сымһыҙ ҡолаҡсындар, ҡалала - юғары тиҙлекле планшеттар тапшырабыҙ. Әлбиттә, ҡатнашыусыларҙың береһе лә буш ҡул менән ҡалмаясаҡ, дәртләндереү призлары, иҫтәлекле дипломдар буласаҡ. Баланың белемен, отҡорлоғон, ижади һәләтен баһалайбыҙ. Иң мөһиме, уйын һынауҙарын үткән һайын "Инстаграм" социаль селтәрендә дәлил итеп фото, видеояҙмалар һалып барырға һәм #Өфөуйнай2020 #Уфаиграет2020 хештегтарын ҡуйырға онотмағыҙ. Барыһы ла уңышлы үтһә, һуңыраҡ тағы ла күберәк ҡатнашыусылар менән яңы уйын ойоштороу һәм был проектты федераль грантҡа тәҡдим итеүҙе күҙаллайбыҙ, - тине Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы урынбаҫары Алина Сөләймәнова.

Ойоштороусылар әйтеүенсә, уйында ҡатнашҡан уҡыусылар мотлаҡ рәүештә һаҡланыу сараларын үтәргә - битлек һәм бирсәткәлә килергә, үҙ-ара аралашмаҫҡа, хәүефһеҙ арауыҡ һаҡларға тейеш. Был талаптарҙың үтәлешен ирекмәндәр ҡаты контролдә тотасаҡ.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЙӘШ ЯРЫМҒА ТИКЛЕМ...

**Беренсе баланы йәш ярымға тиклем ҡарау буйынса пособиеның минималь күләме 3 375 һумдан 6 752 һумға тиклем арттырыла. Рәсәй Президенты Владимир Путин тейешле законға ҡул ҡуйҙы.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 11 майҙа Президент бала тәрбиәләү буйынса пособие күләмен арттырырға тәҡдим иткәйне. Уның һуҙҙәренсә, эшләмәгән граждандар, шул иҫәптән студенттар ошондай пособие ала. Ҡағиҙә булараҡ, улар - ярҙамға мохтаж йәш ата-әсәләр.

Бынан тыш, декрет ялы осоронда эшһеҙ ҡалғандар өсөн пособиеның максималь күләме арта. 6000-дән 13 504 һумға тиклем. Был сара бала тәрбиәләгән, ләкин ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ осрағына мотлаҡ социаль страховкалау ҡаралмаған эшһеҙ ҡалған йөклө әсәләргә йәки опекундарға ярҙам күрһәтеүгә йүнәлтелгән.

# ӨС ЙӘШТӘН...

**Рәсәйҙең Хеҙмәт министрлығы 3 йәштән 7 йәшкә тиклемге балаһы булған һәм аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә түләүҙе арттырырға йыйына. Рәсәй Федерацияһының хеҙмәт һәм социаль яҡлау министры Антон Котяков хөкүмәттәге брифингта ошо хаҡта хәбәр итте.**

"2021 йылға беҙгә ошо түләүҙең ғаиләне фәҡирлек сигенән сығарыу өсөн уның дөйөм килем күләмен формалаштырыуға етәме, юҡмы икәнен анализлау бурысы йөкмәтелде. Киләсәктә уны арттырыу тураһында мәсьәләне ҡарарбыҙ", - тине министр.

1 июндә өс йәштән ете йәшкә тиклемге балаһы булған һәм аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә ярҙам программаһы старт алды. Йән башына уртаса килеме йәшәү минимумынан түбән булған ғаиләләрҙең ошо түләүгә хоҡуғы бар. Бындай ғаиләләргә Рәсәй субъектында бала өсөн билдәләнгән йәшәү минимумының яртыһы түләнә, был иһә илдә уртаса 5,5 мең һум тәшкил итә. Башҡортостанда балаға пособие күләме - 4 894,5 һум, ә ғинуарҙан июнгә тиклемге осорҙо иҫәпкә алып, яҡынса 30 мең һум була.

# ҺАЛЫМ ТҮЛӘҮСЕЛӘРГӘ...

**Башҡортостанда һалым инспекциялары 15 июндән халыҡты ҡабул итә башлай. Бының өсөн Рәсәй Федераль һалым хеҙмәтенең "Инспекцияға ҡабул итеүгә яҙылыу" интерактив сервисы аша алдан яҙылырға кәрәк.**

Инспекцияға килгәндә шәхси һаҡланыу сараларын (медицина битлектәре, бирсәткәләр) файҙаланыу мөһим. Һалым түләүселәрҙән ҡағыҙ корреспонденцияны (шул иҫәптән һалым һәм бухгалтер иҫәп-хисап ҡағыҙҙарын, бәләкәй һәм урта бизнесҡа субсидиялар биреү өсөн ғаризалар) Рәсәй Федераль һалым хеҙмәтенең территориаль органдарына ингән урындағы бокстар аша ҡабул итәләр. Һалым хеҙмәтендә билдәләүҙәренсә, һәр хеҙмәтте тиерлек онлайн алырға мөмкин, Федераль һалым хеҙмәте сайтында һәм мобиль ҡушымталарҙа 50-нән ашыу сервис бар. Һалым буйынса башҡа мәсьәләләрҙә хәл итеү өсөн Федераль һалым хеҙмәте Берҙәм бәйләнеш үҙәгенең күп каналлы 8-800-222-22-22 телефоны йәки Федераль һалым хеҙмәте Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығының (347) 226-38-00 телефоны буйынса мөрәжәғәт итергә мөмкин.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Пародонтит булһа

❖ Пародонтиттың ауыр формаһы яфалағанда һәм ҡаҙна ҡанағанда 1 балғалаҡ тоҙ, 2 балғалаҡ аш содаһы, 3 ҡалаҡ ҡайын көлө ҡатышмаһы менән 1-2 көн аша теш таҙартырға кәрәк. Ҡайын көлөн аҙерләгәндә ағас ҡайырыһын эске ҡалын ҡатын һыҙырып ташлап, йоҡаҡ аҡ ҡатламын утта яндырырға, ваҡ иләк аша иләргә һәм ҡапҡасы ныҡлы ябылған быяла һауытҡа һалып алырға. Ярты литр шешәлек көл бер йылға етә.

### Ҡалҡан биҙе

❖ Ҡалҡан биҙе гиперфункцияһы булғанда сөгөлдөрҙө ҡырғыс аша үткәреп, һутын һығырға һәм ике сәғәткә һыуыҡта торорға. Шунан һутҡа тигеҙ миҡдарҙа бал ҡушырға. Уны көнөнә өс тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Ҡалҡан биҙе ҙурайғанда 3 ҡалаҡ ҡылғанды термосҡа һалып, 3 стакан ҡайнар һөт ҡойоп, төнгөлөккә ҡалдырырға. Көн дауамында ике стакандың эсергә, өсөнсөһөнән төнгөлөккә ҡалҡан биҙенә боҫлама эшләргә. Ошо рәүешле ҡомалаҡ сәскәһенән дә дауа әҙерләргә була, әммә уны саманан тыш күп ҡулланырға кәңәш ителмәй, ул ағыулы үҫемлек.

❖ Ҡаратамырҙың 100 грамм яңы ҡаҙылған тамырын ит турағыс аша үткәрергә һәм быяла һауытҡа һалып, өҫтөнә 0,6 литр сусҡаның эске майын ҡойорға. Банканы талғын утҡа ҡуйылған ҡайнар һыу боҫонда 1 сәғәт тотҡандан һуң, мазь әҙер була. Уны ҡалҡан биҙе тәңгәленә һөртергә кәрәк.

### Ауыҙ шешеүҙән

❖ 2 ҡалаҡ меңъяпраҡҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, термоста бер сәғәт тоторға һәм һөҙөргә. Ошо төнәтмә менән ауыҙҙы көн дауамында бер нисә тапҡыр сайҡарға, дауаланыу ауыҙ шешеүе (стоматит) бөткәнсе.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ ***Башҡорттар төрки телле халыҡ булараҡ формалаша, әммә урындағы арийҙарҙың теленән, мәҙәниәтенән бик күп нәмәләр яңы формалашҡан башҡорт мәҙәниәтендә, телендә һаҡланып, артабан үҫеш ала.***



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Көнсығыш башҡорттары араһында тарихи үткәндәрен Урта Азия менән бәйләгән төркөмдәр күп булған. Тәү сиратта был һарт һәм әйләләр. Беҙҙең быуынға тиклем килеп еткән риүәйәттәр буйынса, ҡасандыр улар Бохарамы, Хиуа ҡалалары тирәһендәме йәшәгән һәм Уралға II меңйыллыҡ башында килеп сыҡҡандар (сәсәндәр ҡайһы берҙә XIV быуатты - ислам дине тарала башлаған дәүерҙе лә атай). Көнсығыш башҡорттарының Урта Азия һәм Яҡын Көнсығыш менән мәҙәни бәйләнештәре булыуын ҡатын-ҡыҙҙың кәүҙәһен ҡаплап торған ҡушъяулыҡлы кейем комплексы ла раҫлай.



*Боронғо сәскә-үҫемлек композицияһы киҫәктәре (Силәбе өлкәһе)*



*Ҡайылған орнаменттың үҙәк фигуралары. Ҡуш элмә, шыма ҡайыу (Силәбе өлкәһе)*

Ҡурған өлкәһе ауылдарында ҡыя сәнсеп сатрашлап ҡайыу (вышивка "косой сеткой") көнбайыштараҡ урынлашҡан территорияларҙа (Силәбе өлкәһе, Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышы) кеүек киң таралмаған. Ҡайһы бер көнкүреш әйберҙәре һәм кейемдәр ситтән килгән ғәҙәттәр йоғонтоһонда барлыҡҡа килгән. Был әйберҙәр биҙәге йәһәтенән дә, ҡыя сәнсеп сатраштап ҡайылған нағыштың башҡарылышы йәһәтенән дә традицион "ҡусҡарлы" әйберҙәрҙән айырылып торған: ғәҙәттә уларҙа сәскә һәм япраҡтар сыбар итеп сигелгән, йыш ҡына япраҡтары элмә менән өрөтөлмәгән.

Ҡыя сәнсеп сатраштап ҡайыу таралған төп территория - көнсығыш Урал арьяғында Силәбе өлкәһе (Ҡоншаҡ, Арғаяш, Сосновка һәм башҡорттар йәшәгән башҡа райондар). Ашъяулыҡ, намаҙлыҡ, һандыҡ ябыуы, таҫтамал, түй яҫтыҡтары тышы сигелгән, XX быуаттың 40-сы йылдарынан сигеүле өҫтән ҡаплаулы алъяпҡыстар модаға ингән. Оҙон һабаҡлы сәскә һәм япраҡлы үҫемлектәр төшкән биҙәктәр өҫтөнлөк иткән. Һыҙыҡтар ябай йәки ҡиңәйтелгән (баҫқыська оҡшаш) элмә менән башҡарылған, фигураларҙың уртаһын тығыҙ ҡыя сәнсеп сатраштап ҡайығандар, ул ҡатлап шыма ҡайыуҙы (гладь с настилом) хәтерләткән.



*Боронғо таҫтамал (Силәбе өлкәһе). РЭМ. XX быуат башы*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ӘЙТӘГҮР!*



# ИХ, ӨФӨ ҠАЛАҺЫ!

**Өфөбөҙ матур, йәмле, тик уның йәмен ебәргән нәмәләр ҙә барҙыр, нисек уйлайһығыҙ?**

***Баныу ҠАҺАРМАНОВА, Учалы ҡалаһы:*** Мин Учалыбыҙ менән сағыштырып әйтәм: беҙҙә һәр күп ҡатлы йорт янында тиерлек сирень, муйыл, миләш, акация, шыршы кеүек ағас-ҡыуаҡтар ултыртылған, яҙҙан алып көҙгә тиклем ҡалабыҙ шау сәскәгә күмелә. Бынан тыш, балалар өсөн уйын майҙансыҡтары күп, ә баш ҡалабыҙ Өфөлә улар аҙыраҡ күренә. Үҙәк урамдар төҙөк, матур, ялтырап ята, төпкөләрәк урамдарға барып инһәң - бысраҡ. Һәм күп ҡатлы йорттар янында гөл-баҡса үҫтереүселәр бик һирәк, кешеләр йорт-ерен яратмай кеүек, хужаларса ҡараш юҡ. Өфөлә башҡортса алтаҡталар, милли биҙәктәр тағы ла күберәк ҡуйылһа, отор ғына инек - миллилек Өфөнө башҡа ҡалаларҙан айырып торған һыҙат, йәм булыр ине.

***Сибғәтә РАХМАНҒОЛОВ, Ишембай ҡалаһы:*** Өфө ҡалаһы замандан артта ҡалмай, матурлана, йәшәрә, заукласа. Яңы йорттар ҡалҡып сыға, күҙҙе ҡамаштырып, төрлө ял итеү урындары: баҡсалар, кафелар, күңел асыу урындары барлыҡҡа килә. Мәгәр күңелдә ҡырған нәмәләр ҙә юҡ түгел. Шуларҙың береһе, әлбиттә, сауҙа үҙәктәренең, ойошмаларҙың исем-атамалары сит телдә булыуы. Өфө сит ил ҡалаларынан был йәһәттән бер нәмәһе менән дә айырылмай, үҙ йөҙө юҡ. Башҡорт телендәге атамаларҙың булмауы тураһында әйтергә лә түгел.

Ситтән килеүселәр өсөн тағы шуныһы оло бер проблема: Өфө һынлы Өфөлә йәмәғәт хәжәтханаларының булмауы. Баш ҡала ҡунаҡтары тәһәрәт алыу өсөн ҡайҙа барырға тейеш? Йөрөйҙәр инде бисаралар, тубыҡтарын ҡыҫып, ниңә сәй эскәндәренә үкенеп.

***Фәйхүнә НӘСИБУЛЛИНА, Өфө ҡалаһы:*** Беҙ күптән инде ауылдан ҡалаға килеп төпләнгән быуын. Ул ваҡыттар менән сағыштырғанда, әлбиттә, ҡала көндән-көн матурлана, төҙөкләндерелә, телевизорҙан күргән заманса ҡалаларҙан бер ҙә ҡалышмай, тиер инем. Әммә элегерәк, беҙ күсеп килгән ваҡытта урамдарҙа, ихаталарҙа ул тиклем транспорт күп булманы. Хәҙер йорт алдына инеп тә булмай бит ҡайһы берҙә. Тирәяҡта машиналар туп-тулы. Шуларҙы йорттарҙан ситтәрәк берәй урында ҡалдырып, кеше йөрөгән урындарҙы төрлө транспорттан азат итеп булмаймы икән?

Икенсе яҡтан, элек Өфөнөң боронғо ҡала икәнен сағылдырып торған урамдар, ағас йорттар күберәк була торғайны. Хәҙер иһә улар яйлап ҡына юҡҡа сығыла бара. Бер заман килеп, бөтөнләй тарихи үҙәк булған урындар ҙа ҙур-ҙур йорттар, төрлө сауҙа үҙәктәре һәм күңел асыу комплекстары менән уратылып, килер быуындарға күрһәтерлек боронғо урындарыбыҙ ҙа ҡалмаҫмы икән, тип борсолам.

***Илдар ҒӘБИТОВ, Өфө ҡалаһы:*** Барыһы ла кешенең психологияһына һәм тәрбиәһенә бәйлеләр, тип уйлайым. Фатирын ғына үҙенең милке тип һанап, ошо уҡ йорт алдындағы, йәмәғәт урындарындағы мөхитенә төкөрөп ҡарай ҡала кешеһе. Был бигерәк тә Өфө халҡына хас сифат. Мәҫәлән, өйөнөң балконына сығып тәмәке көйрәтә лә, уның төпсөгөн иҫе лә китмәй урамға ташлап, һис бер уңайһыҙлыҡ кисермәй инеп китә. Ул ғына ла түгел, төрлө суп-сарҙарын балкондан йәки асыҡ тәҙрәнән ташларға оялмаусылар ҙа бар. Ҡала хеҙмәттәре йәиһә матурлыҡ тыуҙырырға тырышыусы ҡайһы бер хужалар ихаталарында газон эшләп, сәскәләр ултырта. Ултыртҡан кешеләр үҙҙәре ҡарамаһа, уларға сарсап, һыуһап ултырһалар ҙа сығарып һыу һибеүсе юҡ. Ул ғына ла түгел, ҡулдарынан, хәлдәренән килгәндә лә тәртип, матурлыҡ булдырырға ашҡынып тормайҙар.

Мин үҙем йорт алдындағы альпинарийға матур таштар килтереп, сәскәләр ултырттым - таштарын, сәскәләрен урлап, ҡаҙып алып бөттөләр. Имән түмәрҙәрҙән юл эшләгәйнем, шул уҡ хәл ҡабатланды - бер нәмә лә ҡалманы. Шунан үҙегеҙ һығымта яһағыҙ инде...

**Земфира ХӘБИРОВА**
**яҙып алды.**

*ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА*

# ЕТЕ ҠАТ ЕР АҪТЫНДА...

## йылан көйшәгәнен һиҙә



**Башҡорттарҙа күңеле һиҙгер, аҡыллы кеше тураһында "Ете ҡат ер аҫтында йылан көйшәгәнен һиҙә" тиҙәр. Был әйтемдең бик боронғо (бер нисә мең йыллыҡ) тарихы бар һәм уның тамыры башҡорттоң боронғо ата-бабаларының береһе булған арийҙар (һинд-ирандар) менән бәйле.**

Билдәле булыуынса, башҡортто формалаштырыуҙа Урал киңлектәрендә борондан йәшәгән арийҙар ҙа ҡатнаша. Арийҙарҙы ғалимдар икенсе төрлө һинд-иран телле халыҡ тип тә атайҙар. Һинд-ирандар (йәғни арийҙар) һинд һәм иран телле халыҡтарҙың уртаҡ ата-бабалары һанала. Аҙаҡ ваҡыт үтә килә һинд-иранлылар һиндтарға һәм дә иранлыларға бүленә. Бына ошо бүленешкә тиклем арийҙар Урал киңлектәрендә һәм уға яҡын-тирәләге тигеҙлектәрҙә йәшәгән һәм башлыса малсылыҡ менән шөғөлләнеп донъя көткән. Һуңғараҡ ошо ерҙә йәшәгән халыҡтарҙың Үҙәк Азиянан килеп сыҡҡан төрки телле ҡәбиләләр менән ҡушылыуынан башҡорттар формалаша һәм әле лә шул уҡ ерҙәрҙә йәшәп ята тиергә кәрәк. Башҡорттар төрки телле халыҡ булараҡ формалаша, әммә урындағы арийҙарҙың теленән, мәҙәниәтенән бик күп нәмәләр яңы формалашҡан башҡорт мәҙәниәтендә, телендә һаҡланып, артабан үҫеш ала. Бына шуларҙың береһе - "Ете ҡат ер аҫтында йылан көйшәгәнен һиҙә" тигән әйтемдер.

Был әйтемде дөрөҫ аңлар өсөн боронғо һинд-иранлыларҙың донъяуи ҡарашын, мифологияһын белергә кәрәк. Ошо мифологик ҡараш буйынса, теге донъя (йәғни ер аҫты) ете ҡаттан торған һәм уның иң аҫҡы етенсе ҡатында Шеша тигән йылан ятҡан. Ошо Шеша бөтә ерҙе тотоп торған, тик ул ваҡыт-ваҡыт ҡыбырлап алыр булған һәм ер тетрәүҙәр ошо йыландың хәрәкәттәре менән аңлатылған. Был йыландың ҡыбырларын тик һиҙгер кешеләр генә алдан тойор булған. Аҙаҡ, ваҡыт үтеү менән башҡорттар Ислам динен ҡабул итеп, мосолман донъяһының айырылғыһыҙ бер өлөшөнә әйләнгәндән һуң боронғо ата-бабаларының ҡайһы бер дини-мифологик ҡараштары онотола, әммә ниндәйҙер бер өлөшө телебеҙҙә, ауыҙ-тел ижадында (әкиәттәрҙә, риүәйәттәрҙә) һаҡланып ҡала. "Ете ҡат ер аҫтында йылан көйшәгәнен һиҙә" тигән әйтемде лә ошо бик тә боронғо дәүерҙәрҙән беҙҙең көндәргә килеп етә алған бер мәғжизә тип ҡабул итергә булалыр.

Телебеҙҙәге бер әйтем, мәҡәл, аҡыл да буштан ғына килеп сыҡмаған. Һәр һүҙ, һәр бер әйтем, мәҡәл ата-бабаларыбыҙ ҡалдырған оло мираҫ. Уларға иғтибарлы булайыҡ, өйрәнәйек, үҙгәртмәйенсә, киләсәк быуынға оло байлыҡ рәүешендә тапшырайыҡ.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**этнограф.**

✓ *Р.Ғ. Кузеев юрматы һәм йәнәй башҡорт ырыуҙарының боронғо мадъярҙар менән тығыҙ аралашҡан ҡәүемдәрҙән булып, сығыштары менән уғырлашҡан төркиҙәр булыуын ысынбарлыҡҡа тап килә, тип иҫәпләй.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЫРЫУЫБЫҘ - ЙӘНӘЙ,

## асылыбыҙ - көнбайыш башҡорттары



**Боронғо башҡорт ырыуҙары номенклатураһында көнбайыш башҡорттарынан булған йәнәй ырыуы ла бар, ул үҙенең килеп сығышы буйынса үтә ҡыҙыҡлы һәм бай тарихы менән бәгзе бер башҡа ырыуҙарҙан айырылыбыраҡ тора. Икенсе бер ырыуҙар менән сағыштырғанда уға йәнәш юрматы ырыуын ғына атап китергә булалыр. Башлыса, тап ошо ике башҡорт ырыуының килеп сығышында венгр-мадъяр эҙҙәрен юллап була.**

Ғөмүмән, Европа историографияһында башҡорт-мадъяр бәйләнештәре, уларҙың иртә урта быуаттарҙа туғандаш ҡәүемдәрҙән булыу мөмкинлеге тураһында байтаҡ ҡына ғилми хеҙмәттәр яҙылыуына иғтибар итеп була. Хатта ки ҡасандыр ошо ике көслө ҡәүемдән бер үк халыҡ булыуы, Көньяҡ Уралда көн итеүе хаҡында ла фараҙлар күп ине. Әммә XX быуатта, башлыса, боронғо венгр һәм башҡорт бәйләнештәре бары тик айырым ҡәбиләләр берлегенә ҡайтарып ҡалдырыла башлай.

Венгр тарихсыһы Иштван Зимони ошо хаҡта былай тип яҙа: "XX быуат башында башҡорт һәм венгр ҡәбиләләре атамалары араһындағы параллелеккә Паулер иғтибар итә; ул ике ҡәбилә исеменән: Джармат - Юрматы, Енё - Йәнәй турағилешлеген билдәләй". Ошондай мәғлүмәттәр донъя күргәндән һуң ғалимдар башҡорттарҙың уғыр сығышлы булыуы хаҡындағы фаразды ҡалдырып тороп, уларҙың этногенезындағы юрматы-йәнәй уртаҡ компоненттының ғына булыуын ысынбарлыҡҡа тап килә, тип раҫлай. Күп йыллыҡ тикшеренеүҙәрҙе йомғаҡлап, тарихсы Эрик Мольнар шундай һығымтаға килә: "Башҡорт халҡына ҡушылған венгрҙарға һәйкәл булып, Башҡортостандың һуңғы осорона тиклем һаҡланып килгән йәнәй һәм юрматы ырыуҙары атамалары тора, улар Венгрияның хәҙерге территорияһын биләгән замандарҙа бында тороп ҡалған Енё һәм Дьярмат исемле ҡәбиләләргә ҡараған ырыуҙаштарҙы берләштергән".

Әлеге тарихи фараз нисек барлыҡҡа килгән? Тарихсылар иң элгәре Византия императоры Константин Багрянородныйҙың (X б.) Венгрия Урҙаһы составындағы ҡәбиләләр хаҡындағы яҙмаларына һылтана. Ошо яҙмаларҙа түбәндәге мадъяр ырыуҙары һанап үтелә: "Беренсеһе - алдараҡ әйтеп үтелгән, хазарҙарҙан айырылып сыҡҡан каварҙар, икенсеһе - Неки ырыуы, өсөнсөһө - Мегери, дүртенсеһе - Куртугермат, бишенсеһе - Тариана, алтынсыһы - Генах, етенсеһе - Кари, һигеҙенсеһе - Каси." Тикшеренеүселәр Мегери атамаһының мадъярға, Курту-гермат ырыу исеменең икенсе яртыһының юрматыға, Генахтың иһә башҡорт ырыуы йәнәйгә тура килеүен билдәләй.

Ошо хаҡта тарихсы-этнограф Р.Ғ. Кузеев былай тип яҙа: "...белемебеҙҙең хәҙерге кимәлендә ныҡлы рәүештә билдәләнгән ике факты һыҙыҡ өҫтөнә алыу мөмкинлеге бар: боронғо грекса Генах, венгрса Енё һәм башҡортса Йәнәй араһындағы бәйләнеш һәм уларҙың уртаҡ тамыры булыуы".

Әгәр ҙә башҡорттар һәм венгрҙар составында бер үк тигәндәй атамалы ҡәбиләләр теркәлгән икән (енё - йәнәй, дьярмат - юрматы), тимәк, уларҙың килеп сығышында һәм боронғо тарихында билдәле бер уртаҡ ваҡиғаларҙы юллап буласаҡ. Кемдәр булған һуң улар: венгрҙар составына килеп ингән төркиҙәрме, әллә, киреһенсә, заманында башҡорттарға ҡушылған уғырҙармы?

Юшо юҫыҡта тикшеренеүҙәр үткәргән лингвистар енё/йәнәй һүҙенең этимологик тамырҙарын табырға тырыша. Мәҫәлән, В.Г. Егоров "енё" һүҙе төркиҙә тамырлы булып, мәғәнәһе буйынса "һыйыр" һүҙенә тап килә, тип иҫәпләй. Венгр ғалимы Д.Немет иһә уны төрки телендәге "ина" тамыры менән бәйләп, "ышаныу" (башҡортса ла инаныу һүҙе бар) мәғәнәһен белдереүе, ә шул уҡ тамырҙан "инаг" һүҙенең "ышаныслы кеше", "министр" мәғәнәләрендә ҡулланылыуына иғтибар итҡән.

Р.Ғ. Кузеев, ошо венгр ғалимының фекере менән килешеп, юрматы һәм йәнәй башҡорт ырыуҙарының боронғо мадъярҙар менән тығыҙ аралашҡан ҡәүемдәрҙән булып, сығыштары менән уғырлашҡан төркиҙәр булыуын ысынбарлыҡҡа тап килә, тип иҫәпләй: "йәнәйлеләрҙең ата-бабалары беҙҙең эраның I мең йыллығы аҙағында төркисә һөйләшкән, әммә уғыр-мадъярҙар менән тығыҙ ҡатнашлыҡ кисергән була".

Тарихсы Салауат Хәмиҙуллин яҙғанса, юрматы/йәнәй башҡорттарының венгр-мадъярҙар менән туранан-тура ҡәрҙәшлеген раҫлау өсөн дәлилдәр етерлек түгел. Ул, мәҫәлән, юрматы ырыуының боронғораҡ ата-бабалары сарматтарҙан булып, тарихи процестар барышында уларҙың бер өлөшө башҡорттар составына инеүе, ҡалғандарының Венгр урҙаһы ҡускенселәре менән мадъярҙар (Мегери) етәкселегендә Паннонияға барып етеүе хаҡында бәйән итә. Ә йәнәй ырыуына килгәндә, уның хаҡында тағы ла бер ысынбарлыҡҡа тап килеүе мөмкин булған фараз ҡылып була: күрәһең, уларҙың ата-бабалары Көньяҡ Урал янына яҡын ерҙәрҙә көн итҡән ярым күсмә ҡәүемдәрҙән булып, үҙҙәренән һуң кушнаренко-караяҡуп археологик комплексына ҡараған ҡомартҡылар ҡалдырған. Шуныһы ла ҡыҙыҡлы: йәнәй этнонимы ысынлап та башҡа төрки сығышлы халыҡтарҙа осрамай. Ә бына әйтеп үтелгән енё-йәнәй турағилешлеген тап боронғо венгр-башҡорт бәйләнештәренең кире ҡаҡҡыһыҙ дәлиле итеп ҡабул итеү фарыз.

Быны заманында тарихи ысынбарлыҡта булып, айырым сығанаҡтарҙа теркәлеп ҡалған ваҡиғалар ҙа раҫлай. VIII быуатта Һырдарья буйы далаларында һәм Арал янындағы территорияла бәшәнәктәр союзы хасил булып, улар IX быуатта боронғо мадъярҙар йәшәгән ерҙәргә тиклем килеп етеп, һуңғыларын Хазар ҡағанатының көнбайыш тарафтарына ҡыҫырыҡлап сығара. Византия императоры Константин Багрянородный ошо хаҡта бына ниндәй мәғлүмәт ҡалдырған: "Төрөктәр (бында төрки ҡәүемдәр хаҡында һүҙ бара. - **Ред. иҫк.**) һәм ул саҡта ҡаңғарҙар тип аталған бәшәнәктәр араһында бәрелеш булғас, төрөк ғәскәре еңелдә һәм ике өлөшкә бүленде. Уларҙың бер өлөшө көнсығышҡа китеп, Персия яҡтарында урынлашты, улар хәҙер ҙә, төрөктәрҙең боронғо ҡушаматы буйынса, саварт-асфалдар тип атала, ә икенсе өлөшө үҙҙәренең воеводаһы һәм юлбашсыһы Леведия менән көнбайыш тарафҡа барып, Ателькузу тип аталған ерҙәрҙә урынлашты".

Мадъярҙарҙың бәшәнәктәр менән бәрелешенә тиклем ниндәй территорияла йәшәүе әлегә тиклем бәхәсле булып ҡала. Ул ерҙәр Арал янында, Волга йәки Дон йылғалары буйында булған, тигән фараҙдар бар. Был мәсьәләнә ҡарағанда беҙ Волга арьяғындағы этногенез процестары һәм иртә урта быуаттарҙа (VI-IX б.б.) барған этник миграция барышын иҫәпкә алырға тейешбеҙ. Мадъярҙар, башҡа уғыр телле күсмә ҡәүемдәр кеүек, Хазар ҡағанаты менән бәйләнештә булған ҙур этник конгломератты тәшкил иткән. Константин Багрянордный иҫкә алған саварт-асфалдарҙың да уғыр телле мадъярҙар булыуы бик мөмкин.

Тикшеренеүсе Д.Моравчик был этник атаманы "енелеү белмәҫ саварттар" мәғәнәһендә булып, савир (сувар, сабир) ҡәбиләһенә ҡарағанын белдерә. Был ҡәүемдең уғыр телле булыуына ғалимдарҙың күпселеге шик белдермәй. Ошо этникон заманында хазарҙарҙың төрки телендәге атамаһы сифатында ҡулланыла, сөнки савир компоненты хазарҙар союзы составының байтаҡ ҙур өлөшөн билә. Ғәрәп ғалимы Әл-Масуди улар хаҡында бына ниҙәр әйткән: "Һәм улар төркисә сабирҙар, фарсыса - хазаран, тип атала. Улар - ултыраҡ төрөк тоҡомо. Ғәрәпсә уларҙы әл-хазар, тип атайҙар".

Ошо тарихи сығанаҡтар боронғо мадъярҙарҙың савир (сабир) этник сығышлы булыуын кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилләй. Грек географы һәм астрономы Клавдий Птолемей (б.э. II б.) савирҙарҙың Рипей (Урал) тауҙарынан көнсығыштараҡ тарафта йәшәүе хаҡында яҙа. Был мәғлүмәт тап савир-сабир ҡәбиләһе атамаһынан хәҙерге географик атама - Себер һүҙенең ниҙәүешле барлыҡҡа килеүен дә раҫлап торғандай.

Шулай итеп, боронғо мадъяр ҡәүемдәре ҡасандыр Көнсығыш Себер территорияһында көн итеп, һуңынан, V быуатта аварҙар (жужандар) тарафынан Хазар сиктәренә тиклем ҡыҫырыҡлап сығарыла. Үҙҙәре өсөн яңы булған ерҙәргә - түбәнге Волга буйына, Төньяҡ Кавказға һәм хатта Кавказ арьяғына сығып, улар бында ярты быуатҡа яҡын ваҡыт дауамында яңы сәйәси көскә әүерелә. Тап Ателькуза исемендә аталып йөрөтөлгән ерҙәрҙә (ул Ҡара диңгеҙҙән төньяҡтараҡ, Днепр һәм Днестр йылғалары араһында була) мадъярҙар үҙҙәрен Азия һәм Европаның боронғо халыҡтарына таныта. Ошо осорға тиклем улар хаҡында хазар, ғәрәп йә иһә Византия сығанаҡтарында бер ниндәй ҙә мәғлүмәт булмай әле. Төрки ҡәүемдәре менән тығыҙ аралашып йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, улар үҙҙәренең этникмәҙәни йөҙҙәрен дә юғалтмай, уғыр теленән төрки теленә лә күсмәй. Шул уҡ ваҡытта көнбайыш тарафтарына юл тотмай ҡалып, ата-бабалары төйәгендә ҡалған савир сығышлы башҡа ҡәүемдәр тулыһынса төркиләшә. Мәҫәлән, Волга Булгарияһында вассал мосолман кенәзлеге форматында йәшәүсе суварҙар этник һәм тел яғынан булгарҙарҙан айырылып тормай. Боронғо Сувар ҡалаһы янында булған, IX-X быуатҡа ҡараған Оло Тиган ҡәберлегендә табылған ҡомартҡы материалдарҙың Паннонияла табылған матди мәҙәниәт өлгөләренә оҡшаш булыуын раҫлаған ғалимдар бар. Был осраҡта шундай тарихи ҡәнәғәт дөрөҫләнә: этник төркөмдәрҙең тарихи процестар барышында һөйләш теле үҙгәргән хәлдә лә, уларҙың матди һәм рухи мәҙәниәтендә боронғолоҡ элементтары оҙағыраҡ һаҡлана.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

---

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Башҡорттар артҡа сигенмәй

Тап шул киҫкен мәлдә сержант Юлмөхәмәтов үҙенең пулемет расчеты менән окоптарҙан алға сығып, шыуыша-йүгерә дошман минометсыларының флангыһына барып етеп, уларҙы пулемет уты менән ҡырып һалды. Атакаға барыусы немец һалдаттары туҡтабыраҡ ҡалды. Шуны ғына көткән эскадрон командиры, өлкән лейтенант Шәйхулла Сирегулов, окоптан һикереп сығып, оран ташланы:

- Башҡортостан улдары, алға! Атакаға!

Эскадрон боецтары, дәррәү күтәрелеп, алға ташланды. Тамаҡтарҙы ярып сыҡҡан, нәфрәт һәм үс менән тулы "Ур-р-а-а!" ташҡындай урғылып, дошман сафтарына барып етте. Контратака шундай киҫкен булды, шаңҡып ҡалған немец һалдаттары, баҙап, артҡа, үҙ позицияларына боролоп ҡаса башланы.

Нафиҡов полкының башҡа эскадрондары ла һан яғынан күпкә өҫтөн булған дошманды һис бер ҡурҡыуһыҙ ҡаршыланы, оҫта итеп маскировкаланған оборона немецтарҙы бик яҡын аранан артиллерия һәм пулемет уты менән ҡырып һалырға мөмкинлек бирҙе. Эскадрон командирҙары Х.Г. Мирсаяпов һәм Н.И. Колесник һалдаттарын контратакаға үҙҙәре күтәрҙе, дошманды ҡыҫырыҡлап, кире сигенергә мәжбүр итте. Башҡорт атлылары тәүге алышта еңеү яуланы.

Кисен һуң ғына полк командиры Г.А. Нафиҡов менән комиссар Х.Н. Әхмәтов көндөҙгө бәрелешкә йомғаҡ яһаны. Улар көн һөҙөмтәһе менән ҡәнәғәт ҡалды. Дошман, һан яғынан 4 тапҡырға артыҡ булыуына ҡарамаҫтан, бер генә метр ҙа алға үтә алманы. Ошо хаҡта комдив Шайморатовҡа ла хәбәр ителде. Ул да, тәүге алыштағы уңыш менән ҡәнәғәтләнеүен белдерҙе лә, һиҙгерлекте онотмаҫҡа кәңәш итеп, дошман көсөнөң күп булыуын, уға яңылары өҫтәлеп тороуын иҫәпкә алып, немецтың яңы һөжүменә тәүлек әйләнәһенә әҙер булырға ҡушты.

- Тиҙ арала боеприпастарҙы тулыландырығыҙ, яралыларҙы тылға оҙатыуҙы хәстәрләгеҙ, дошман яғына разведка ебәрегеҙ, личный составты сиратлап ял иттерегеҙ, батырлыҡ күрһәткән боецтарҙы хөкүмәт наградаларына тәҡдим итегеҙ, ә барса һалдаттарға һәм кесе командирҙарға минең исемдән рәхмәт белдерегеҙ, - был комдивтың тиҙ арала үтәй торған күрһәтмәләре ине.

**Вәли ИҘРИСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Гараж төҙөү өсөн ҡаҙылған соҡорҙо таҙартып, Мәжитов етәкселегендәге студенттар IX-XII быуат әйберҙәренә юлыға. Аҙағыраҡ тәңкәләр таптыҡ. Берәү-икәү генә түгел, ә Алтын Урҙа дәүеренең алтын аҡсалары һибелмәһенә осраныҡ.*



# БАШҠОРТ

## Өфө-II ҡаласығында ла



**Ҡала округы Советында хакимиәт башлығының уҙған йылға йомғаҡ яһау ултырышында ҡатнашып, республика Башлығы Радий Хәбиров Өфө ҡәлғәһе төҙөлөүгә 450 йыл тулыуҙы байрам итеү тураһында һүҙ күтәргәйне. Ул был байрамды федераль кимәлдә үткәреү инициативаһын белдерҙе һәм кәрәкле документтар әҙерләргә ҡушты. Иҫегеҙҙә булһа, нуленсе йылдар уртаһында баш ҡалала Өфө-II ҡаласығы темаһы барлыҡ матбуғат сараларының иғтибар үҙәгендә булды, сөнки Нияз Мәжитов етәкселегендәге археологтар күп ҡатлы йорт төҙөү өсөн бүленгән территорияның Өфө генә түгел, тотош Башҡортостан, Рәсәй, хатта донъя кимәлендә тарихи әһәмиәтле булыуын күтәреп сыҡты. Артабан инде унда табылған ҡаҙылма байлыҡтарға, башҡа сығанаҡтарға нигеҙләнеп, йылдар дауамында ошо теманы иғтибар үҙәгенә ҡуйып, йәмәғәтселекте, етәкселекте инандырып, Өфө ҡалаһының тарихи сығанаҡтар буйынса билдәләнгән тарихи йәше рәсми нығытылып ҡуйырға тейеш ине. Әммә әле һаман Өфө ҡалаһының түгел, ә унда тәүге урыҫ ҡәлғәһе төҙөлөүҙең 450 йыллығын байрам итеүгә әҙерләнәбеҙ. Тарихи хәҡиҡәт ҡасан да булһа тантана итерме? Был хаҡта ошо эштәрҙең уртаһында ҡайнап йөрөгән археолог, тарих фәндәре кандидаты Әлфиә СОЛТАНОВА менән әңгәмәләшәбеҙ.**

**Әлфиә Нияз ҡыҙы, беҙҙең башҡорт ҡалаһы булған Өфө-II ҡаласығының 1500-1800 йыллығын билдәләү мөмкинлегебеҙ бар, ә ни өсөн һуң Өфө ҡәлғәһенең 450 йыллығы тиеү менән генә сикләнәбеҙ? Быныҡ сәбәбе, һеҙҙеңсә, нимәлә?**

- Халыҡ унын асылына төшөнөп тә тормай, теләмәй ҙә. Иң мөһиме - байрам, күңел асыу, тамаша булһын. Икенсе яҡтан, бындай күренеш совет заманынан уҡ килә һәм хәҙер ҙә дауам итә: тарихты, тәү сиратта, Рәсәй тарихы итеп өйрәтәбеҙ һәм өйрәнәбеҙ. Төбәк тарихы йә бөтөнләй телгә алынмай, йә уға икенсе-өсөнсө генә түгел, иң һуңғы роль бирелә. Шул күҙлектән сығып ҡарағанда, ни өсөн хәҙерге Өфө тарихы Өфө ҡәлғәһе һәм Өфө Кремле төҙөлгән датанан алып билдәләнеүе аңлашыла.

Ысынлап та, ни өсөн беҙ 450 йыллыҡты байрам итәбеҙ, ә башҡорттоҡо булған Өфө-II ҡаласығының 1500-1800 йыллығын түгел? Бында бер нисә аспектты ҡарап китергә була. Беренсеһе: Өфө-II ҡалаһының ғәмәлдә бик боронғо булыуын ҡабул итеүе ауыр. Рус ҡалалары Киев Русе осоронда, 9-сы быуат һуңында, икенсе мең йыллыҡ башында барлыҡҡа килгән, ә бында - 1500 йылдан алдараҡ! Өфө-II ҡалаһының ысын йәшен танырға теләмәү ҙә шунан килгән сәйәси акт. Әгәр беҙҙең етәкселек ихтыяр көсө күрһәтеп, ошо хәҡиҡәтте танытыуға өлгәшһә, яҡшы булыр ине, әммә сәйәсмәндәр барыһы ла илдең идара итеүсе партияһы күрһәтмәһе буйынса ғына йәшәй. Үҙәк рөхсәт бирмәгән хәлдә улар ҡыл да ҡыбырлатмаясаҡ. Тағы ла шуныһы: был идеяны туҡтауһыҙ алға һөрөп, бөтөн ерҙә тылҡып йөрөр өсөн Мәжитов булырға, ошо идея менән "сирләргә", фанат, ныҡыш булырға кәрәк. Бөгөн ундайҙар юҡ.

Өфөнө бай, ҙур тарихлы ҡала итеп танып өсөн дөрөҫ һәм маҡсатлы сәйәсәт алып барылырға, быға киң мәғлүмәт саралары, административ һәм сәйәси ресурстар йәлеп ителәргә тейеш. Һәйкәлдең һәм унда табылған артефакттарҙы археология күҙлегенән профессиональ кимәлдә, реклама йәһәтенән дөрөҫ итеп күрһәтеү, материалды аң кимәлендә еткерә, кешеләрҙең йөрәгенә үтеп инә белеү кәрәк. Шунһыҙ беҙгә ниндәй байрамды билдәләргә күрһәтмә бирелә - шуны байрам итәбеҙ һәм итәсәкбеҙ.

**Ошондай шарттарҙа хәтерҙе ҡабаттан яңыртып алыу ҙа ҡамасауламаҫ, мөгайын. Иртә Урта быуаттарҙа уҡ ҡала тибындағы биләмә - ә тап Өфө-II ҡаласығы барлыҡҡа килеүе нимәлә сағыла?**

- Урта быуат, ғөмүмән, совет тарих фәне өсөн ҡала - ул, тәү сиратта, һөнәрселек, сәйәси, сауҙа, хәрби үҙәк. Улар һәр саҡ юлдар сатында тора һәм нығытма ролен үтәй. Өфө-II ҡаласығына ошо билдәләрҙең барыһы ла хас. Хатта унын нығытма яғы Көньяҡ Урал өсөн ғәҙәти ҙә түгел: диуар М хәрефе формаһында эшләнгән, унын эсендә төрлө конструкциялар ҡулланылған, йәғни ағас һалынған һәм ул ер менән ҡапланған диуар барлыҡҡа килгән. Диуар артында уҡ тәрән итеп соҡор ҡаҙылған. Заманына күрә бик ҡеүәтле нығытма булған. Ҡаласыҡ үҙе лә бит нығытма-ҡала тигәнде аңлата. Ә унын тирә-яғында ябай граждандарҙың ғәҙәти йорттары урынлашҡан һәм улар хәүеф килгәндә йәки хәрби хәрәкәттәр ваҡытында нығытмаға инеп ҡаса алған. Бынан тыш, Өфө-II ҡаласығы тығыҙ итеп, кварталлап төҙөлгән - был иһә нығытма өсөн бөтөнләй хас түгел. Уларҙың береһендә керамика етештерелгән, икенсеһендә металлургия производствоһы булған. Хатта 2006 йылғы тәүге ҡаҙыу эштәре барышында беҙ ювелир оҫтаһының торлағына ла юлыҡтыҡ - унда әҙер изделиелар түгел, ә сеймал, йәғни пластиналар табылды. Бынан тыш, хәҙерге Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры бинаһынан Медицина университетына табан тирә-яҡ территорияла ошо осорҙоң бик бай ҡурғандары бар һәм был инде унда аҡһөйәктәр - шул осорҙоң билдәле кешеләре йәшәүе тураһында һөйләй.

Беҙҙең эраның беренсе мең йыллығы уртаһында бында турбаҫлы халҡы йәшәй һәм Өфө-II уларҙың хәрби, сәйәси нығытмаһы була. Улар ошонан тороп тирә-яҡты үҙенең йоғонтоһонда тота. Турбаҫлылар - ситтән килгән халыҡ, уларҙың ҡайҙан килеүе әлегәсә билдәле түгел. Нияз Абдулхаҡ улы уларҙы Урта Азиянан сығыусылар, ти ине, сөнки Арал алдында ла бында табылғанға оҡшаш керамика бар. Икенселәр уларҙы көньяҡ-көнбайыштан, төрөктәрҙең көнбайышҡа хәрби походы ваҡытында баҫым аҫтында тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайтҡан сармат ҡәбиләләре тоҡомо, ти. Бында мәсьәлә уларҙың ҡайҙан килеүендә түгел, ә ҡаласыҡтың беҙ уйлағандан күпкә алданыраҡ, кәм тигәндә беҙҙең эраның өсөнсө быуатында барлыҡҡа килеүендә. Тора-бара ҡаласыҡтың әһәмиәте арта, бигерәк тә ул край тарихына VIII-IX быуаттарҙа ҙур йоғонто яһай. Һуңыраҡ осор хаҡында 2006 йылда башланған ҡаҙыныу эштәре лә асыҡ һөйләй. Гараж төҙөү өсөн ҡаҙылған соҡорҙо таҙартып, Мәжитов етәкселегендәге студенттар IX-XII быуат әйберҙәренә юлыға. Аҙағыраҡ тәңкәләр таптыҡ. Берәү-икәү генә түгел, ә Алтын Урҙа дәүеренең алтын аҡсалары һибелмәһенә осраныҡ. Һуңыраҡ осор бында хәҙерге ҡала төҙөлә башлағас, юҡҡа сыға. Мәғлүм булыуынса, яңы урынға килеп ултырған рус гарнизондары, традиция булараҡ, тирә-яҡты таҙарта, үҙҙәренең Кремль эсендәге хәүефһеҙлеге өсөн эргә-тирәлә башҡаларға йәшәргә рөхсәт итмәй.

Был урынға совет заманында уҡ Әхмәров, Мәжитов иғтибар итә. Шунда йәшәгән малайҙар Әхмәровҡа керамика ҡалдыҡтарын килтерә. 2006 йылда, ҡаҙыу эштәре башланғас, шунда шәхси йорттарҙа йәшәүселәр баҡсаларынан керамика ярсыҡтарын биҙрәләп сығарып түгеүҙәре тураһында һөйләне. Шулай итеп өҫкө ҡатламды боҙоп бөтәләр. Шуға ҡаҙыныусылар иң һуңғы, йәғни X-XIV быуат әйберҙәрен генә тапты, унан һуңыраҡ осорға ҡарағандары халыҡ тарафынан юҡҡа сығарылған. Ҡаҙыу эштәре элекке тарихсыларҙың, тәү сиратта Петр Рычковтың, хәҙерге Өфө территорияһында элек башҡорттар йәшәгән, тигән яҙма мәғлүмәттәренә, Көньяҡ Урал өсөн үҙенсәлекле булған ҡала төҙөү традицияларына, Урта быуат дәүеренең икенсе сығанаҡтарында, Меркатор һ.б. карталарында күрһәтелгән Башкирт, Пашкарти ҡалалары булыуын раҫланы.

**Шул осорҙа был мәғлүмәттәр башҡорт донъяһында ғына түгел, тотош ил, донъя кимәлендә сенсация булғайны. Әммә йылдар үтеү менән ошо күтәренкелек һүрелде...**

- Был тарихты беҙ яҡшы итеп яҡтырттыҡ, ҡаҙыу эштәре шунда уҡ киң йәмәғәтселектең, урындағы археологтарҙың ғына түгел, ә беҙҙең үҙәк органдың - Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының да иғтибар үҙәгендә булды. Әлбиттә, ниндәйҙер бер төркөм был яңылыҡты ҡабул итергә теләмәне, улар үҙҙәренең фекерен башҡорттарҙың күсмә халыҡ булыуына бәйләргә һәм шул сәбәпле уларҙың ҡалалары булмаған, тип раҫларға тырышты. Ғәмәлдә иһә, Евразия далаһында бер ваҡытта ла тулыһынса күсмәндәр йәшәмәгән, улар ярым күсмә тормош алып барған. Йәй дауамында ялан зонаһында йәйләп, һуңынан даими торлаҡ урындарына ҡайтҡандар, уларҙың ҡайһы берҙәре ергә бәйләнеп, ҡалалар төҙөгәндәр, тулыһынса ултыраҡ тормошҡа күскәндәр. Бындай миҫалдарҙы Себер, Урта Азия далаларында ла күрергә мөмкин. Ҡаҙағстан далаларында төрлө ваҡыттарҙа ҙур нығытмалар төҙөлөп, улар һуңынан ҡалаларға әүерелгән, аҙаҡ юҡҡа сыҡҡан. Сөнки ярым күсмә тормош алып барыусылар климатҡа, эпидемиологик шарттарға ныҡ бәйле. Был шарттар халыҡты икенсе урындарға күсенергә лә мәжбүр итә, ә уларҙың тораҡтары яйлап юҡҡа сыға. Әгәр инде һуңынан шарттар яҡшырһа, улар ҡабат үҙҙәренең төйәгенә ҡайта.

Көньяҡ Урал - һуғыштар, климат һәм башҡа сәбәптәр һөҙөмтәһендә халыҡты далалы-урманлы, урманлы зонаға даими ҡыуалап торған төбәк. Заманында Лев Гумилев та, башҡа тарихсылар ҙа Евразия

✓ *Аҫабалыҡ хоҡуғының юҡҡа сығарылыуы көнбайыш башҡорттарының татарҙар тарафынан ассимиляцияланыуына тотҡарлыҡ иткән һуңғы ҡаршылыҡты алып ташлай.*



далаларында йыл әйләнәһенә күсмә тормош алып барыу мөмкин түгеллеген билдәләгән.

Ә был ҡаланың урта быуаттарҙа каруан юлында ултырыуын унда табылған дөйә, ишәк һөйәктәре ҡалдыҡтары ла раҫлай. Өфө-II ҡаласығы халҡы өсөн сауҙа етди урын алып тороуын бында бик күп сит ил әйберҙәре табылыуы ла һөйләй. Тағы ла бер ҡыҙыҡлы факт: ҡала халҡы, ғәҙәттә, ҡайһы бер ташламаларҙы иҫәпкә алмағанда, ауыл хужалығы менән шөғөлләнмәй. Әммә ундағы халыҡҡа аҡһымлы аҙыҡ кәрәк һәм шуға күрә



анализдар эшләтә инек. Хәҙер был эш һүнеп ҡалды, сөнки археологтар юҡ, ә улар булһын өсөн уларҙы беренсе курстан уҡ тәрбиәләргә кәрәк. Археолог - ул берәм-бөртөк һөнәр. Медицинала тар һөнәр белгесе тигән кеүек, археолог та шундайҙарҙан. Әгәр беренсе курста 10 кешенән торған төркөм туплана, уларҙың береһе генә археолог булһа ла бик шәп. Әммә ул ысын белгес булһын өсөн тиҫтәләрсә йылдар талап ителә. Унан һуң, химияла органик һәм органик булмаған химия, физиканың, башҡа фәндәрҙең үҙҙәренең бүлектәре булған кеүек, археологтар ҙа осорҙар буйынса махсуслаша. Бөгөн музейҙа Урта быуаттар буйынса махсуслашҡан археолог юҡ. Шуға күрә тап ошо осор буйынса дөрөҫ итеп һөйләй, мәғлүмәт еткерә белеүсе юҡ һәм музей, беҙ уйлағанса, археология үҙәгенә әйләнмәне.

**Радиоуглерод анализдар тураһында ентекләберәк һөйләгеҙ әле: уларҙы ҡайҙа эшләттегеҙ һәм һөҙөмтәләре нисек булды? Сөнки Нияз Абдулхаҡ улының анализдар һөҙөмтәһен алып, ҡыуанып йөрөгәне әле лә күҙ алдында...**

урынға тупланып, бер халыҡты тәшкил иткән ер. Бында шулай уҡ кешенең көнкүреше һәм артабан үҫеше өсөн кәрәк булған барлыҡ мәғдәндәр ҙә бар. Ә кем уларға хужа - ул донъяға хужа. Шуға күрә Өфө-II ҡаласығы бронза дәүерендә үк тарихи-мәҙәни үҙәк була, үҙенең әһәмиәтен Урта быуаттарҙа ла юғалтмай. Шул сәбәпле бында күпләп киләләр, ә шундай миграция ағымы булған ерҙә яңы этник процестар башлана. Көслө халыҡ, телдең ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, урындағы халыҡҡа исем бирә, бик йыш хакимлыҡ иткән халыҡтың теле лә өҫтөнлөк итә. Өфө-II ҡаласығында тап ошо миксты күрәбеҙ ҙә инде: бында урындағы бахмутин, ҡара-абыҙ, финн-уғыр, турбаҫлы, кушнаренко, ҡара-яҡуп мәҙәниәттәре - беҙҙең атай-олатайҙарыбыҙ берләшеп, башҡорт этносын барлыҡҡа килтерә.

Рус халҡының тарихын ҡарағанда ла, хәҙерге рустар, XVIII быуаттағылары, Алтын Урҙа осорондағылары, Киев Русе дәүерендәге көнсығыш-славян ҡәбиләләре һәм унан алдағылары - улар бөгөн барыһы бергә беҙҙең заманда осрашһа, бер-береһен аңламаҫ ине. Өфө-II ҡаласығында ла

# ЭТНОСЫ...

## формалашҡан!

ит - даими талап ителгән ризыҡ була. Был йәһәттән беҙ саҡырған остеологтар (һөйәктәр буйынса белгестәр) һәр ваҡыт хайуан һөйәктәренең ныҡ ваҡланғанын билдәләй, тимәк, ит бында дефицит булған, тиергә мөмкин.

Нисек кенә булмаһын, Өфө-II ҡалаһына ҡарата ҡыҙыҡһыныу көслө булды һәм беҙ тәүбурыс итеп ҡуйған маҡсатыбыҙға - төҙөлөш эштәрен туҡтатыуға һәм уны музей комплексына бирҙертеүгә өлгәштек. Табылған экспонаттар бик күп һәм уларҙы теләһә ниндәй музей күрһәтергә риза булыр ине. Уларға тирә-яҡтағы, тарихсыларҙың ғына түгел, тотош халыҡтың ҡаҙанышы булып торған ҡурғандарҙа табылған бай ҡаҙылмаларҙы ла ҡушҡанда - был экспозицияның әһәмиәте бик ҙур буласаҡ.

**Бөгөнгө музей һеҙ күҙаллаған концепцияға тап киләме?**

- Музей идеяһын күтәреп сыҡҡанда беҙ уның үҙенсәлекле археологик үҙәк булыуын күҙаллағайныҡ, унда керамик оҫтахана, үҙенең реставрация бүлеге, археологияға ҡағылышлы бөтә нәмә: химия, консервация, реставрация, металлургия, керамика, ювелир, һөйәк ҡырҡыу производстволары һ.б. булырға тейеш ине. Заманында беҙ ситтән белгестәр саҡыра, радиоуглерод

- Австралияла эшләткән анализдарҙы ҡараһаҡ, уларҙың һөҙөмтәһе ҡаласыҡтың йәшен беҙҙең эраның II быуатынан башлап XVIII быуатҡа тиклем күрһәтә. Алдараҡ Киев лабораторияһында ла анализ эшләткәйнек, әммә унда үҙебеҙ түгел, РФА-ның География институты аша ебәргәйнек. Һөҙөмтәләр беҙҙең өсөн мәғлүмәтле булманы, сөнки барыһы ла буталсыҡ, хатта беҙҙең эраға тиклем VIII быуат та күрһәтелә. Ә бына Австралиянан килгән һығымталар археологтарҙың бик күп быуыны эшләгән хронологияға тап килә һәм беҙ күҙаллаған анығ картинаны күрһәтә.

Был анализдарға ышанырға мөмкинме? Теүәл фәндәргә ҡаршы барып булмай, шуға күрә анализ һөҙөмтәләре ҡабул ителде. Шулай уҡ беҙ Миәстә, унда боронғо металдар менән шөғөлләнгән лаборатория бар, ҡаласыҡта табылған алтынға анализ эшләткәйнек. Уның һөҙөмтәләре был ҡиммәтле металдың урындағы булыуы - беҙҙә Урал аръяғында Учалы-Сибай алтын тамыры бар икәне сер түгел - һәм Филиппов ҡурғандарынан табылған сармат алтынына тап килеүен асыҡланы.

Радиоуглерод анализ өсөн сеймалды төрлө тәрәнлектән алдыҡ. Был урын - көньяҡ Уралда булған мәҙәниәттәрҙең барлыҡ компоненттары бер

шулай. V-VIII, X-XII, XIII-XIV, XVIII-XIX быуаттарҙа һәм хәҙер йәшәгән башҡорттар - улар төрлө кимәл, уларҙы сағыштырырға ярамай. Әммә улар - бер халыҡ! Бынан бер ҡайҙа ла китмәгәндәр, һәр ваҡыт ошонда йәшәгәндәр, башҡа халыҡтарҙы ҡабул иткәндәр, ҡушылғандар.

Бындай анализдарҙы күп эшләттек, улар фәнни хеҙмәттәребеҙҙә баҫылды. Һуңғы монографик хеҙмәтте Нияз Мәжитовтың тыуыуына 85 йыл тулыуға арнап үткәрелгән конференцияға ҡарата әҙерләнек һәм ҡатнашыусыларға тараттыҡ. Унда ингән мәғлүмәттәр - барыһы ла беҙ шәхсән ошо ҡаласыҡта эшләгән эшмәкәрлек һөҙөмтәһе.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Радий Фәрит улының инициатива белдереүенә нигеҙләнеп, был мәлде башҡорт халҡының мәнфәғәтендә файҙаланыу дөрөҫ һәм урынлы булыр ине, сөнки борондан килгән яҙма сығанаҡтар, лаборатор анализдар менән раҫланған дәлилдәребеҙ бар. Илдең генә түгел, донъяның Өфө-II ҡаласығы тураһында хәбәрҙар булған археологтары был тарихтың - Өфөнөң нисә йәштә булыуын билдәләү нисек, нимә менән тамамланыуын ситтән генә ҡыҙыҡһынып күҙәтә. Ошо ҡыҙыҡһыныуҙарҙы ла ҡандырһаҡ ине лә бит.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

*Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ*



# ҺЕҘ КЕМ, КӨНБАЙЫШ БАШҠОРТТАРЫ,

## йәки Тарихи документтар ни һөйләй?

**Икенсе фактор.** Башҡорттарҙың татарҙар тарафынан ассимиляцияланыуы оҡшаш социаль-иҡтисади мөнәсәбәттәрҙең күп булыуы менән көсәйә бара.

Алда күрһәтелгән дүрт өйәҙҙә йәшәүсе ерһеҙ көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттары, аҫабалыҡ хоҡуғынан яҙып, припущенник һәм типтәр тип атала башлап, татар припущенниктары кеүек, башҡорт ерҙәренә хужа булмайынса, улар менән файҙаланыу хоҡуғына ғына эйә була. Ерһеҙ ҡалған крәҫтиәндәрҙең ошо ике төркөмө башҡорт аҫабалары менән бәйле булып, община ерҙәре менән файҙаланған өсөн уларға оброк түләргә мәжбүр була. Уларға дәүләт һәм мир бер үк бурыстар йөкмәтә. Башҡорт һәм татар припущенниктарының социаль хәле бер типта булыуы уларҙың яҡынайыуына булышлыҡ итә. Ерһеҙ башҡорт припущенниктары, феодаль бәйлелеккә дусар булған крәҫтиән булараҡ, аҫаба башҡорттарға түгел, социаль яҡтан үҙҙәренә яҡыныраҡ булған татар припущенниктарына ныҡыраҡ тартыла. Ерһеҙ башҡорт һәм татарҙарҙы берләштергән территориаль община (ауыл) уларҙың мәнфәғәттәрен яҡлай. Шул уҡ ваҡытта ерле халыҡ араһынан сыҡҡан припущенниктар элекке аҫабалаштары менән һәр төрлө бәйләнештәрен өҙмәгән. Тел, мәҙәниәт, ғөрөф-ғәҙәттәр уртаҡлығы ошо бәйләнештәрҙе һаҡлау мөмкинлеген ҡалдыра. Башҡорт припущенниктары аҫабалар һәм килмешәктәр араһында тороп, уларҙы бер-береһе менән бәйләүсе ролен үтәй. Ошо роль тора-бара уларҙың үҙҙәренең иң тәүгеләрҙән булып татар мөхитенә инеп китеүенә сәбәп була. Башҡорт аҫабаларының да үҙҙәре припущенник итеп алған татар-типтәрҙәр, яһаҡ түләүсе, хеҙмәти һәм сауҙагәр татар һәм мишәрҙәр менән этник һәм мәҙәни бәйләнеше киңәйә бара. Көнбайыш Башҡортостан аҫабаларының күп йылдар буйы үҙенең төп этносынан айырылып, татар крәҫтиәндәре араһында йәшәүе һуңынан уларҙың татар милләте тарафынан ассимиляцияланыуына алып килә.

Улар араһында тәүге бәйләнештәр XVI быуат аҙағында - XVII быуат баштарында барлыҡҡа килеп, бер нисә быуат дауамында аралашып йәшәү этник яҡынлашыуға килтерә. Әммә аҫабалар һәм припущенниктар араһындағы социаль айырма Октябрь революцияһына тиклем һаҡланып ҡала. Аҫабалыҡ хоҡуғының юҡҡа сығарылыуы көнбайыш башҡорттарының татарҙар тарафынан ассимиляцияланыуына тотҡарлыҡ иткән һуңғы ҡаршылыҡты алып ташлай. Припущенниктарҙың һәм элекке аҫабаларҙың ергә хоҡуҡтары тигеҙләнеүе көнбайыш башҡорттарының үҙ этник асылынан яҙыуына килтерә.

Башҡорт-припущенник мөнәсәбәттәрен ҡайһы бер тикшеренеүселәр дөрөҫ яҡтыртмай. Ер биләмәләрен бүлеү буйынса 1832 йылдың 10 апрелендәге батша указына һылтанып, ер биләмәләре артҡан типтәр һәм мишәрҙәрҙең башҡорт исеменә күсеүе тураһында яҙыусылар бар. Әммә ошо указға ярашлы, аҫабаларҙың да, припущенниктарҙың да ергә хоҡуҡтары сикләнә. Ер биләмәләрен бүлеү 1816 йылғы VII ревизияла кем нисек теркәлгән (аҫабамы, припущенникмы, ғәскәри хеҙмәттәме), шуға ярашлы башҡарыла. Аҫаба башҡорттарға йән башына - 40, ғәскәри ведомствоға ҡараған припущенниктарға - 30, гражданлыҡ сословиеһына ҡарағандарына 15 дисәтинә ер бүлеү рөхсәт ителә. Әлбиттә, аҫабаларға ер милек сифатында, ә припущенниктарға файҙаланыу өсөн генә бирелә.

Ҡайһы бер тикшеренеүселәр башҡорттарҙың ҡарауһыҙ, буш ятҡан ерҙәренең күсеп килеүселәргә милеккә бирелеп, уларҙың "башҡорт" булып китеү мөмкинлеге тураһында фараз итә. Был фараз бер ни менән дә нигеҙләнмәгән. Киреһенсә, тарихи сығанаҡтар быны инҡар итә. П.И. Рычков 1774 йылда "Экстрат башкирского народа" исемле яҙмаһында башҡорттар тураһында: "...привязаны весьма к своим землям и угодьям, так что, почитая их собственными и старинными своими вотчинами, нередко за них бунтовали и умирали, чему в известиях о сем народе многие примеры находятся", - тип яҙа. Башҡорт хәл-торошон яҡшы белгән И.К. Кирилов 1735 йылдың 13 ғинуарында хөкүмәткә тәғәйенләнгән "Изъяснение" исемле яҙмаһында бик аныҡ мәғлүмәт бирә: "Земли и угодьи между родами все разделены, а в некоторых родах уже от настоящих произошли роды, кои называют аймаками, а инде тюбами, и тако никакой земли и угодий нет, кои бы свободно лежали".

**(Дауамы бар).**

✓ Бәләгә тарыған бәләкәс сәүкәне ала ҡарға аралап ҡалды, ә сәүкәнең үҙ иштәре түгел. Әлеге сәүкә көнөндә ҡалған саҡтарҙа юлыңа ала ҡарға килеп сығыуына ла ҡыуанаһың бит ул.



Иҙрис НОҒОМАНОВ

# ҺУНАРСЫ ЯҘМАЛАРЫ



## БАШКИҪӘР

Атымды туғарып, яңғыҙ сауҡаға күрмәгәс алдына бер ҡосаҡ хуш еҫле бесән ырғыттым. Байтаҡ ара юртып, арайһы ғына асҡаҡһырға өлгөргән хайуан шунда уҡ кинәнес менән мыртылдатырға кереште. Үҙем инде, гәҙәттәгесә, йөрәкһей бирер, аҡ халатымды кейҙем. Ошо рәүешле саңғыларыма баҫыу минең өсөн ашҡынып көткән тулҡынландырғыс мәл. Күкшелләнеп ятҡан Ирәндек буйҙарына һәр йәкшәмбе тиерлек йөрөп тороуға ҡарамаҫтан, һунар, тигән уйҙан ғына ла ҡанатлы хисләргә бирелә башлайым. Күпме йылдар инде ошо илаһилыҡ вәғәҙә итеүсе ғәмәлгә һаман күнегеп китә лә, тыныс ҡына ҡарай ҙа алмайым. Һунар ул, уңышлы-уңышһыҙға ҡарамай, минең өсөн үҙе бер байрам. Көтөп алынған оло байрам. Хәйер, бер минең өсөн генә шулаймы икән?..

Күп тә үтеп өлгөрмәнем, ҡапыл һиҫкәндереп, урман ситенән күрәнһыу шаулап ялпылдап уҙҙы. Ифрат ҙур булыуына ҡарамаҫтан, ул бер ботаҡҡа ла ҡағылмайынса, кәйлегә-кәйлегә тауыш-тынһыҙ ғына осоп барҙы ла, ҡапыл күтәрелеп, йөҙйәшәр ҡарағас ботағына ҡунды. Ялбыр ботаҡтан еңелсә бәҫ һибелде.

Мин, һағая бирер, иғтибар менән күҙәтәм. Ерән ҡауырыйҙарын ҡара һыҙаттар сыбарлаған ике "мөгөҙлө" мәҙәк ҡош ғәжәп хәрәкәтсән йоморо башын ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла борғослап, ҡайҙандыр ишетелеп ҡалған тауыш сығанағын шәйләргә тырыша. Шәйләй алмай. Ни өсөн тигәндә, мин туҡтап ҡалғанмын. Ә ҡырағай йәнлектәр, гәҙәттә, ҡыбырлаған нәмәне генә күреп ҡала. Ошо сәбәпле мин тегенең күҙенә салынмайым. Шулай ҙа ул минең ҡайҙалыр яҡында икәнемде һиҙә һәм шунлыҡтан бейегерәк, хәүефһеҙерәк урынды һайлаған. Ағас башында саҡта уға ҡурҡыныс янамай иҫәпләнә. Әлбиттә, һунарсы мылтығын иҫәпкә алмағанда. Әммә һунарсымын тигән һунарсы кәрәккән-кәрәкмәгәнгә ябалаҡ атып йөрөмәҫ. Ә минең алдымда дөү ябалаҡ ултырғанына шигем юҡ. Ябалаҡты элек тә осраштырғаным бар, ләкин былдайын тәүләп осратам. Сама менән ул урман бәһлеүәне һаналған һуйырҙан күпкә ҙур күренә. Әллә ҡышҡы һалҡындан ҡабарып тырпайған ҡауырыйҙары шулай күрһәтәме? Нисек кенә булмаһын, ябалаҡтың һын-ҡиәфәте һоҡландырғыс ине.

Ябалаҡ - төн ҡошо. Оҫта һәм ауыһыҙ йыртҡыс. Ауға ул, гәҙәттә, эңер төшкәс сыға. Ә көн яҡтыһында ышыҡ урында йәшеренеп ултыра. Минә ҡалһа, йыртҡыс ҡош көндөҙөн ҡылған яуыҙлыҡтарынан ҡасып шулай итә. Бәгзе берәүҙәрҙен, ябалаҡ яҡтыла күрмәй, шул сәбәпле көндә ышыҡ урында боҫоп үткәрә, тигәне ысынбарлыҡҡа бөтөнләй тап килмәй. Күҙен күрмәгән көйө ботаҡтарға ҡағылмайса ғына анауы шырлыҡ эсенән осоп ҡара!

Ябалаҡты башҡа ҡоштар ныҡ яратмай. Сөнки ҡоттарын алып бөткән. Тимәк, ул ваҡыты менән көндөҙ ҙә һунар итә. Әлеге хәҡиҡәтте раҫлағандай, был юлы ла ябалаҡ йәшеренеп ултырған ҡарағасты, ғәжәп, шул арала ҡайҙандыр йыйыла һалып киткән ҡарғалар һырып алды. Күптәренең ябалаҡты күргәндәре лә юҡтыр, әммә уның ҡан дошман икәнен белгәндәй сороолдашырға тотондолар. Шулай ҙа төн ҡошоноң үткер тырнаҡлы йыртҡыс булыуын улар ҡайҙан белә? Аптырарһың. Ҡарғаларҙы, бәлки, ҡанға һеңгән тәбиғи һиҙенеү, үҙ-үҙеңде һаҡлап ҡалыу инстинкты һәм башҡаларҙы ла иҫкәртеү тойғоһо шулай ҡыланырға мәжбүр итәләр. Бит, уларҙың сарғалы тауышын ишеткән башҡа кейек-ҡоштар һағая, вағыраҡтары хатта йәшеренеп өлгөрә.

Тәбиғи, ҡыҙыҡһыныуымды тыйып тора алмайынса, әкрен генә яҡынлашырға самаланым. Ҡайҙа ул, саңғы тауышынан ябалаҡ мине шунда уҡ шәйләп тә алды. Хәҙер ҡош алан-йолан ҡаранмай, тынслана төштө. Сөнки хәҙер билдәһеҙ йән эйәһе уның күҙ алдында. Ә күҙ алдындағы дөғүәсе күренмәгәненә ҡарағанда күпкә хәүефһеҙерәк. Һәр ҡырағай йәнлек кеүек, быныһын ғына ябалаҡ та яҡшы белә. Ана, һарғылт күҙҙәрен бур бесәйҙеке ише түңәрәкләндергән дә, туптура минә ҡарап ултыра. Йән өшөткөс зәһәр ҡараште ҡыҙыҡһыныу ҡатыш көҙөкләнеү сағыла. Тағы ла, йыртҡысҡа ғына хас уҫаллыҡ та күренә. Әллә мине шөрләтмәксе? Юҡ инде, ундай ғына ҡараштарҙы күп күргән бар.

Уға табан йәнә бер-ике аҙым яһаным. Беренсе булып ҡоштоң сабырлығы өҙөлдө. Ул, ҡәнәғәтһеҙлек белдереп, ауыр уһылданы ла, ҡанаттарына күтәрелде.

Мин шаҡ ҡаттым. Ҡатмаҫлыҡмы, ҡеүәтле ҡанаттарҙың ҡоласы кәмендә ике метр бар ине. Бына исмаһам ҡош!

Ябалаҡ артынан, ҡара ҡойон булып, ҡарға көтөүе эйәрҙе һәм урманда әйтеп аңлатҡыһыҙ ығы-зығылы тауыш ҡупты. Бындайҙы хатта йыртҡыс ябалаҡ та көтмәгәндер: ул йәһәтләп был тирәнән шылыу яғын ҡайырҙы. Бер аҙҙан ошо шаушыулы өйөр Ирәндек һыртындағы дәү ағастар артына китеп ышыҡланыуға, тирә-йүндә ҡолаҡ сеңләткес тынлыҡ урынлашты. Гәҙәти булмаған тынлыҡты ҡайҙалыр бар донъяға битараф тумыртҡа туҡылдағаны боҙа ине.

Мин әле генә ябалаҡ күтәрелеп осҡан ҡарт ҡарағай төбөнә килдем: бынауы һыуыҡта ҡар өҫтөндә нимәһен ҡарап ултырған икән? Ялбыр ағас ышығында, яртылаш ҡарға сумып... ҡуян кәүҙәһе ята ине. Ҡуяны - ҡуян, ә үҙенең башы юҡ. Башы, әйтерһең дә, үткер бысаҡ менән киҫеп алынған. Киҫелгән урындан боҫрап быу күтәрелә. Тимәк, ябалаҡ ҡорбанын күптән түгел генә эләктергән, шунлыҡтан, бәләкәс кейектең йәнһеҙ кәүҙәһе әле һыуынырға ла өлгөрмәгән.

Өкө заты табышының иң әүәл башын өҙөп йота икән, тигәндәрен ишеткәнем генә бар, ә бөгөн ошоно үҙ күҙҙәрем менән күрергә насип итте. Күренеш әллә ни йәмлеләрҙән түгел ине. Һәр хәлдә, ул миндә ауыр тойғолар уятты. Оңҡоттоң ҡуян башы һынлы нәмәне нисек итеп бөтәү килеш йотоп ебәрә алыуын мин күҙ алдына килтерә алманым. Йотҡолоғо ниндәй киңлектә булырға тейеш уның?..

Артабаныраҡ, тейелмәгән ҡар өҫтөндә, төнгә ҡанлы фажиғәнең "яҙмалары" ярылып ята. Мин уларҙы "уҡырға" тотондом...

Ябалаҡ ҡорбанын асыҡ урында эләктергән. Көтмәгәндә арҡаһына һөжүм ише тырнаҡтар ҡаҙалған мескен ҡуян үҙенең ҡотолғоһоҙ үлемгә дусар ителгәнен белдеме икән? Белһә лә, белмәһә лә, ул, йәнен аяп, яңындағы ҡыуаҡтар араһына тартҡан. Күрһәң, һыртына һыбай атланып алған йыртҡысты ботаҡтарға эләктереп ҡалдырмаҡсы булған. Ҡалдыра алмаған. Шулай ҙа ҡылый, аяҡ аҫтындағы эҙҙәргә ҡарағанда, дошманына анһат ҡына бирелмәгән. Хәйер, кемдең йәшәйһе килмәй? Ана, ҡуян да, ахыры, нимәгәләр өмөт баглап, ваҡ ҡарағайлыҡ араһына барып ингән. Уның һуңғы көсөн йыйып ҡырталашҡаны күренеп тора. Ошо кейектең яҙмышын хәл иткән дә инде. Гәйәт ҙур ҡанаттары менән ҡарҙы ышырып, ҡорбанының кәрен алған ябалаҡ, ни аралалыр, һынар тәпәйе менән ағастарҙың берейенә йәбешеп өлгөргән. Шул урында уҡ ҡуяндың йәнен алған. Әммә үҙенең дә хәле мөшкөлләнгән булғандыр: уны күтәреп алып китә алмаған. Бары әлеге ҡарт ҡарағай аҫтына, ышығыраҡ урынға, күсереп һалырға ғына көс таптҡан.

Бына шул рәүешле ябалаҡ ҡуяндың башына еткән. Еткән генәме, ул башты оҙон ҡолаҡтары менән ҡуша һоғоноп та ҡуйған. Йылы ғына көйөнә. Ҡалған өлөшө, ана, бөтөн килеш ята. Ул хәҙер минең этемә һәләк тәмле күстәнәс буласаҡ. Ҡуян күстәнәсе! Уны әрәм итеп ташлап китеп булмай. Ҡаршымдағы "яҙмалар" минә ошоларҙы һөйләп бирҙе.

Оҙон ҡыш ахырынаса Ирәндек буйҙарын гиҙһәм дә теге төн йыртҡысы - ҡолаҡлы өкө - башҡаса минең юлымда осраманы. Ул, күрәһең, алыҫ тарафтарға үтеп барышлай ғына туҡталып, тамаҡ ялғарға уйлаған ябалаҡ булды. Тәбиғәттә үндайҙары ла осрай.

## АРАЛАНЫ

Апрель айы етеп, ҡар бутҡа ише иҙелә башлағанда мин аҡ юрғандарын аса башлаған баҫыуҙарымды байҡап ҡайтырға һыбай сығам. Йыл да. Әле иртә булыуға ҡарамаҫтан, гәҙәтемә кергән. Урман-ҡырҙар ҙа ныҡ һағындырған. Унан, бар тәбиғәт зыҡ ҡубып уяна башлаған мәлдә нисек сыҙап ятмаҡ кәрәк. Быйыл да ул гәҙәтемде ташламаным.

Инде, унда-бында, үҙҙәренә саҡырып ятҡан "йәй урындар" күренә. Ҡарҙан әрселә башлаған ерҙе беҙҙең яҡтарҙа шулай тиҙәр. "Йәй урын". Минә ҡалһа, ошо бәләкәй генә һүҙҙән ниндәйҙер назлы йылылыҡ килә һымаҡ. "Йәй урындар"ына тәүләп аяҡ баҫырға ғәжәп яратам. Малай саҡтан ошолай булды, әле лә шулай. Ҡарайышып ятҡан "йәй урындар"ынан таныҡлап кителгән еүеш ер еҫе аңҡый. Ошо илаһи еҫтән еңелсә баш әйләнә, тын алыуҙары рәхәт. Әйткәнемсә, тәбиғәтҡә йән керә башлаған саҡ. Көнө ғәжәп матур! Тыуған ер, тыуған төйәк яҙғы ҡояш нурҙарына ҡойона. Шул рәүешле, ныҡ көттөрөп килгән миҙгелгә ҡыуанып, бар тереклек тантана кисерә. Нәҡ ошондай көндәрҙә ялҡытҡыс оҙон ҡыштан биҙеп бөткән тәңгә ҡушылып йән дә ял итә.

Әлегә шыр ялаңғас урман һәр төрлө ҡош-ҡорт тауышынан гөрләп тора. Хисле күңелде иң уйнатып ебәргәне тумыртҡа "йыры": "Тор-р-р, тр-р-р-рр..." Әйтерһең дә, кемдер тырышып-тырышып барабан ҡаға. Ул саҡырыу ауаҙы әллә ҡайҙарға китеп, ағастарҙан, тауҙарҙан ҡаҡлыға ла кире әйләнеп ҡайта. Бер сама моңло ғына үҙе. Моңло ла, моңһоураҡ та. Ҡыҫҡаһы, моңһоу моң. Ниндәйҙер бер ҡыу ағастан да шундай моң сығарып булыр икән. Мин ихлас күңелдән ғәжәпләнәм.

Бысрағы иҙелеп ятҡан юлда ҡарға, сәүкә һәм башҡа ҡанатлы йәндәр көтөүе ҡайнай. Ай-һай шәп бара "ҡоштар баҙары". Нимәһенә шул ҡәҙәре мәж киләләрҙер инде, нимә таптҡандарҙыр, белмәҫһең.

Мин, атымды ҡабаландырмайса, миҙгел хозурлығына һоҡлана-һоҡлана, ләззәтләнеп барам. Һәр саҡтағыса этем Мурзик та ятып ҡалмаған. Уның үҙ кәсебе: аҙым һайын осраған болғансыҡ күләүектәрҙе шаптыратып кисә-кисә, еҫкәнеүҙән туҡтамай. Ул башҡа бер йән эйәһенә лә тәтергә яҙмаған еҫтәр донъяһын туктауһыҙ өйрәнә. Көтмәгәндә бер ҡарға үҙенсәлекле ҡарҡылдап ҡуйҙы. Мин инде беләм: башҡаларын һаҡ булырға саҡыра. Шул саҡ яҡын-тирәләге ҡош өйөрө ҡара болот булып һауаға күтәрелде. Янъяҡта гәҙәти булмаған шау-шыу ҡупты. Ошо мәл күҙ ҡыры менән генә шәйләйем - әлеге мәхшәр эсенә юғарынан, атҡан уҡтай, күгелйем йыртҡыс ҡош ташланды. Ул - сел ҡарсығаһы ине. Күгәрсендән саҡ ҡына ҙурыраҡ. Ҡыйыу ҡарсыға ағастар бейеклегендә бер сәүкәне тырнағына эләктереп алды. Эләктереүен эләктерҙе, әммә күтәреп алып китергә хәленән килмәне. Йыртҡыс менән ҡорбан, йомғаҡ ише, лып итеп һыулы ҡар өҫтөнә килеп төштөләр. Меҫкен сәүкә бар хәленсә ҡаршылашып маташҡан була, кәрҙәштәренән ярҙам һорап, яр һала. Йән бит, һәр кемгә ҡәҙерле. Ә улары яҡын-тирәлә юҡ инде. Ҡайһыны йәшенеп өлгөрҙө, ҡайһыны осоп китте. Тыуған төйәгенә ашҡынып ҡайтып та аяныс яҙмышҡа дусар ителгән ҡошсоҡ япа-яңғыҙы үлем менән алыша. Тик ҡарсыға тырнағына бер тарыһаң....

Мурзик башта был алышҡа аптырай биреп ҡарап торҙо. Ахырҙа, сәүкәгә ярҙамға ашыҡты, буғай, сабып китте. Ләкин барып өлгөрмәне, бәхәскә әллә ҡайһы арала пәйҙә булған шуҡ ала ҡарға ҡушылды. Ул, аҡты-ҡараны айырмай, зәһәр-ҡырағай тауыш сығарып, көсһеҙләнә барған ҡорбаны өҫтөндә ҡуҡырайып ултырған юлбаҫарға ташланды. Ҡарғаның ҡыйыулығына аптырап шаҡ ҡаттым. Ә ҡарсыға? Ул сәүкәне ҡармап алған кәкере тырнаҡтарын бушата һалды ла, ҡорбанын ташлап, яҡындағы ҡыуаҡтар араһына осто. Хәле мөшкөләйгән сәүкә шунда уҡ икенсе яҡҡа китеп юғалды.

Батыр ҡарға, ҡысҡыра-ҡысҡыра, ҡарсығаны эҙәрлеклəүен дауам итте. Мурзик менән беҙ уларҙы ҡыҙыҡһынып күҙәттек. Аҙаҡ уйға ҡалдым: өйөр-өйөр ҡоштоң ҡотон алған ҡарсыға ни эшләп, ни сәбәптән бер йолҡош ҡарғанан шөрләне. Көтмәгәнлектән ҡаушанымы, әллә әрһеҙ һөмһөҙлөк алдында юғалып ҡалдымы? Әҙәми зат араһында ла булғылай ҙа баһа былай. Нисек кенә булмаһын, бәләгә тарыған бәләкәс сәүкәне ала ҡарға аралап ҡалды, ә сәүкәнең үҙ иштәре түгел. Ошоноһо ғәжәп. Кешеләрҙен: "Карама беләккә, ҡара йөрәккә", тигәне әллә ошо буламы? Әлеге сәүкә көнөндә ҡалған саҡтарҙа юлыңа ала ҡарға килеп сығыуына ла ҡыуанаһың бит ул.

## ҺАЙЫҪҠАН ҺАБАҒЫ

Эңер алды һалҡынлығы өтөп барған ҡышҡы кис. Һыуыҡтан йүнкегән тәбиғәт шоҡорайып ҡалған. Тирә-йүндә сихри тынлыҡ хөкөм һөрә. Ҡапыл ошо тынлыҡты боҙоп, ике ҡарға зыҡ ҡубыра тотондо. Мин ныҡ ҡабаланһам да, ҡыҙ-

✓ ***Атай-олатайҙарыбыҙ тарихына күҙ һалһаң, улар, ҡайһылыр ырыу башҡорттары, ҡасандыр диңгеҙ буйында ла йәшәгәндәр, тип яҙалар. Әммә нәҡ ҡортбашты Һиндостан яҡтарынан алып ҡайтыр булғандар.***



ыҡһыныуымды еңә алмайынса, туҡтап ҡалдым. Бейек кенә ерек ағасы башынан ҡарғаларҙы аҡ ҡабырғалы һайыҫҡан ҡыуҙы.

Нимә булешә алмай һуң ҡарғалар? Бынауындай сатнама һыуыҡлы миҙгелдең иң ауыр осоронда бергә-бергә генә көн итәһе урынға. Хәйер, наҙан ҡарға береклектә - тереклек, тигәнде белә тиһеңме. Һуғыш сукмарҙарының борхоп ҡаурыйҙары ғына оса, ҡанат елпеүенән ҡар өйөрмәләре күтәрелә. Ә һайыҫҡан, ниндәйҙер ҡырын эш уйлап, башын ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла борғослай, ҡойроғон уйната, күренеп тора, унайлы мәлде көтә. Бына ул мәл етте шикелле, ала шилма ҡағынып алды ла, сос ҡына шыҡыйып тегеләр янына төштө. Ә ҡарғалар уға әллә ни иғтибар ҙа бирмәне шикелле, йән аямай бер-береһен өҙгөсләүҙәрен белделәр.

Баҡһаң, һайыҫҡанға шул кәрәк булған. Ул битараф ҡиәфәт менән арлы-бирле һикерәнләп ҡуйғандан һуң, кинәт һонолоп, ҙур ғына туң ит киҫәген эләктереп алды ла, йәһәтләп кире әрәмәлеккә осто. Ике асыҡ ауыҙ, ни булғанын аңлап, низағлашыуҙан кинәт туҡтанылар. Күрәһең, әлеге һөмһөҙлөктән аптырап ҡалдылар: ниндәйҙер бер һайыҫҡан өлөштәренә тығылһын әле. Ике ҡарға яр һалып ҡараҡ артынан ташланды, әммә һуң ине. Шул арала кәйелеп кенә ҡуйы сытыр араһына инеп юғалған етеҙ һайыҫҡандың оҙон ҡойроғо ғына күренеп ҡалды. Ҡайҙа инде йыптыр ҡарға затына йылғыр һайыҫҡанды ҡыуып етеүе! Өҫтәүенә, шырлыҡ араһында.

Сараһыҙҙан тынысланырға мәжбүр булған оңҡоттар, әйтерһең дә, оятын юғалтҡан һайыҫҡанды ҡарғай-ҡарғай, уҫал ҡысҡырышып, һауаға күтәрелде. Хәҙер инде улар ифрат татыу һәм берҙәм ине. Ҡарғалар, һайыҫҡан йәшеренгән ҡыуаҡлыҡ тапҡырында бер аҙ әйләнеп йөрөнөләр ҙә, ҡайҙалыр китеп юғалдылар. Төнәр ваҡыт еткән ине.

Мин уларҙың яу урынына килдем: ни сәбәптән шулай ҡыландылар икән? Текә ҡабаҡ ҡырындағы ҡар ялы ышығында ҡан таптары күренә. Ҡарға ҡаурыйҙарына буталып аҡ мамыҡ киҫәксәләре туҙышып ята. Тәжрибәле күҙгә шунда уҡ барыһы ла аңлашыла. Ошо ышыҡ урында хәйләкәр төлкө ҡуян ите киҫәген ҡарға күмеп киткән. Ашап туйғандан ҡалғанын ул һәр ваҡыт шулай итә - "ҡара көнгә" запас яһай. Башы эшләй - ҡуян бит көн дә эләгеп тормай. Ныҡ асыҡҡанда килдең дә ашаның. Күрәһең, һиҙгер ҡарғалар, соҡсоноп йөрөй торғас, йәшерелгән итте табып алған. Баяғы бәхәс тап шуның арҡаһында килеп сыҡҡан да инде. Татыу ғына бүлешеп һоғонаһы урынға, һәр ҡайһыһы күберәкте өмөт итеп, талаш сығарған. Йәнәһе, үҙе генә туйына. Туйынды, көт, күпте уйлап, икеһе лә аҙҙан ҡоро ҡалды. Ҡараҡтыҡын бур урланы. Әлеге мәлдә ҡайҙалыр, ҡыуаҡтар ышығында шуҡ һайыҫҡан тәмле ҡуян ите менән һыйлана, ара-тирә ифрат ҡәнәғәт тауышы ла ишетелеп ҡала. Төнгөлөккә уның тамағы туҡ булыр, ә ҡарғаларға бөгөн ас ҡорһаҡҡа төнәргә тура килер. Үҙҙәре гәйепле.

Ҡоштар киткән яҡҡа ҡарап торҙом да уйлап ҡуйҙым: әҙәми зат тормошонда ла ошоға хас хәлдәр булғылап тора түгелме һуң? Булғылай, хатта йыш ҡына. Ағайэне араһында инсафлы татыулыҡ менән татыу берҙәмлек юҡ икән, күрә алмаусы әтрәгәләмдәр шым ғына ситтән күҙәтеп һөйөнә. Аҫтыртын йылмая бирәп, улар өлөшөнә керер мәл еткәнен көтә. Улар һәр ваҡыт ташланырға әҙер, улар йоҡламай. "Ағай-эне талашыр, атҡа менһә ярашыр", тиҙәр ҙә ул, әммә ҡайсаҡ һуң булыр, та ҡуя. Ярашырға өлгөрмәйенсә, ағаһы ла, энеһе лә теге ҡарғалар кеүек төшкәндәрен һиҙмәй ҙә ҡалалар. Иң ғәжәбе шул: үҙ иштәренең төп башына ултырғанын күреп торһалар ҙа, кешеләр бер-береһенән һаман фәһем ала белмәй. Әллә теләмәй? Аптырарһың.

## ЙОЛА СЦЕНАРИЙЫ

**Ҡатнашалар:**
**Йәмилә (ейәнсәр)**
**Маһира әбей - Йәмиләнең өләсәһе**
**Финзирә - күрше килен**
**Мәрйәм - күрше әбей**
**Ғәйшә - күрше әбей**

*(Йыйнаҡ ҡына башҡорт өйө. Түрҙә һуғылған келәм, иҙәндә һуғылған буй балаҫ. Семәрләп эшләнгән һандыҡ. Йәмилә өләсәһенә ҡунаҡҡа ҡайтҡан. Маһира әбей ошо ҡыуанысты уртаҡлашырға ауылдың бер нисә ағинәйен үҙенә ҡунаҡҡа саҡырған.*

**Йәмилә.** *(урындыҡтағы әйберҙәрҙе күреп ҡалып).* Өләсәй, был матур-матур әйберҙәрҙе ни өсөн бында сығарып һалғанһың ул?

**Өләсәй.** *(Йәмиләне арҡаһынан һөйә).* Ҡыҙым, ҡолонсағым, бөгөн беҙгә күрше ағинәйҙәр килә. Улар ҙа һине һағынған. Беҙҙең халыҡта алты йәшәр юлдан ҡайтһа, алтмыш йәшәр күрә барһын, тигәндәр. Шул матур йоланы йолалай бөгөн күршеләр. Ҡалғанын улар килгәс белерһең.

**Йәмилә.** *(Сәпәкәйләп, һикергеләп ала).* Мин дә бик һағынып ҡайттым барыһын да.

**Өләсәй.** Әйй, минең үҫкәнем, аҡыллы ғына бул инде шулай.

**Агинәйҙәр.** Һаумыһығыҙ. Йәмиләң ҡайтып, ҡыуанып ултыраһыңмы?

*(Йәмиләне һөйөп, һәр береһе һаулыҡ һораша).*

**Өләсәй.** Әйҙүк, әйҙүк, түрҙән уҙығыҙ *(Ултырышып доға ҡылып алалар).* Ҡыҙым, матурҡайым, ҡунаҡҡа килгән саҡта бер мөһим эште башҡарып алайыҡ тигәйнем. Йолабыҙ буйынса, һәр оло быуын йәш быуынға үҙе белгәнде тапшырырға тейешлекте барыбыҙ ҙа беләбеҙ. Ҡыуаныслы осрашыу мәлен ошо маҡсатта файҙаланып ҡалайыҡ, тимәксемен. Бергәләп Йәмиләмә милли биҙәүесебеҙҙең нимәләрҙән эшләнеүе, уның әһәмиәте тураһында һөйләйек, аңлатайыҡ, бер ынғайҙан тарихыбыҙға ла байҡау яһап алырбыҙ.

**Ғәйшә әбей.** Дөрөҫ әйтәһең, Маһира. Был - беҙҙең бурыс. Халҡыбыҙҙың быуаттар буйы тупланған аҡыллы һүҙе лә, ҡул менән булдырылғаны ла аманат итеп тапшырылырға тейеш тәһә.

**Өләсәй.** Әйҙәгеҙ, ҡыҙымды уртаға алып, ошонда йәтешләп ултырайыҡ, күршеләр.

**Мәрйәм әбей.** Башҡорт халҡының милли кейеме бик бай һәм сағыу. Улар - көмөш тәңкә һәм аҡыҡ, мәрүәт, мәрйендәр менән матур итеп биҙәлгән яға, ҡашмау, сылтылдап үҙенә генә хас моң сығарған сулпы, һырға, беләҙек ...

**Финзирә килен.** *(Ул яғаһын, сулпы-беләҙектәрен күрһәтеп өйрәнәләп ала).* Әйе, әйе, ошо биҙәүестәребеҙ башҡорт ҡатын-ҡыҙын сын яһау итә, бөтә гүзәллеген, нәфислеген бермә-бер арттыра, бар булмышын сағылдыра шул.

**Йәмилә.** Өләсәй, ҡайһылай матурҡайҙар! Үҫкәс, минең дә шундай иң киткес матур әйберҙәрем, кейемдәрем булырмы?

**Өләсәй.** Эй, минең аҡыллым, эй, минең ҡыуанысым, күҙ нурым, бик-бик теләһәң, булыр, әлбиттә. Булырға тейеш тә. Һин бит - милләттең

**Финзирә килен.** Перламутр. Төрлө төҫтәр уйната. Һеҙ, ҡыҙҙар, яҡшы беләһегеҙ уны. Перламутр тырнаҡ буяғысы, ирен буяғысы. Төрлө төҫтәр уйната ул мәрүәт. Яғалағы мәрүәт диңгеҙ ҡабырсағынан алынған. Уның ялтырауыҡлы эске яғынан йоҡа ғына ҡат-

# ӨЛӘСӘЙЕМ АМАНАТЫ



киләсәге. Ә кейемеңә ҡарап кешенең ниндәй милләттән икәнен белеп була.

**Мәрйәм әбей.** Эйе шул. Милли кейем - ул сит кешеләр өсөн визит карточкаһы, паспорт һымаҡ.

**Ғәйшә әбей.** *(Көйләй).*
*Көмөш беләҙегем*
*селтер-селтер,*
*Таштары фирүзәнән.*
**Финзирә килен.**
*Көмөш сулпыларым*
*семәр-семәр,*
*Аҫылташтар уйылған.*
**Мәрйәм әбей.**
*Бәрхәт еләнкәйем*
*биҙәк-биҙәк,*
*Алтын уҡа менән сигелгән.*
**Өләсәй.**
*Кейемдәрем ялтлап тора,*
*Күҙ нурҙарым түгелгән*
*(Көлөшеп алалар, Йәмилә сәпәкәй итеп, һикереп-һикереп ала).*

**Йәмилә.** Өләсәй, өләсәй, яғалағы матур биҙәүестәр тураһында белгем килә. Ҡайҙан йыйып бөткәндәр уларҙы?

**Ғәйшә әбей.** Ана, ҡыҙыбыҙҙың аңы асылып, белгеһе килеп тә китте.

**Өләсәй.** Ай үҫкәнем, күпйәшәгерем минең. Беләһең килһә, тыңла, улайһа. Яғаның күп өлөшөн көмөш тәңкәләр, мәрйен менән биҙәгәндәр. Беҙҙең халҡыбыҙ көмөштө алтындан өҫтөн ҡуйған. Уның насар көстәрҙән, ен-зәхмәттән һаҡлай алыуына ышанған.

**Ғәйшә әбей.** Ә көмөш тәңкәләрҙең сылтырауын, зыңғырлауын әйтсәле. Белгән бит халҡыбыҙ нимәне баһаларға.

**Өләсәй.** Мәрйендәре уның диңгеҙ төбөндә үҫә. Коралл тигәнде ишеткәнең бармы, ҡыҙым? Шул була инде ул.

**Йәмилә.** Диңгеҙ буйында йәшәмәйбеҙ бит, өләсәй.

**Мәрйәм әбей.** Ана беҙҙең зирәгебеҙ, элеп тә алды.

**Өләсәй.** Хәҙер, хәҙер, ҡыҙым, уныһына ла етербеҙ, аппағым. Мәрйен, көмөш тәңкәләрҙән башҡа яғаға аҡыҡтан да биҙәүестәр баҫҡандар. Ҡыҙыл аҡыҡты - сердоликшулай уҡ яуыз көстән һаҡлаусы булараҡ ҡулланғандар.

**Финзирә килен.** Аҡыҡ үҙ еребеҙҙә лә бар. Яғаның мөйөштәренә бер нисә мәрүәт төймәләр ҙә баҫҡандар. Ишеткәнең бармы, балам, мәрүәт тигәнде?

**Йәмилә.** Юҡсы, Финзирә апай.

ламды ҡырҡып алып, шунан биҙәүес төймәләр яһағандар.

**Йәмилә.** Үәт, ҡыҙыҡ. *(Ҡортбашҡа күрһәтә).* Ә былары минә ни һөйләр икән, өләсәйҙәр.

**Өләсәй.** Бик үҙенсәлекле ғәжәйеп был ҡабырсаҡтарҙы башҡорттар борондан ҡортбаш тип йөрөтә. Уның хатта күҙ тейеүҙән һаҡлауына ныҡ ышанғандар.

**Йәмилә.** Ысынлап та ҡортҡа оҡшап тора икән. Ә уны ҡайҙан алғандар?

**Ғәйшә әбей.** Ә һин үҙең нисек уйлайһың, балам. Ҡабырсаҡ ҡайҙа була һуң?

**Йәмилә.** Һыуҙа.

**Ғәйшә әбей.** Был төр ҡабырсаҡ ҙур һыуҙа-диңгеҙҙә була. Атай-олатайҙарыбыҙ тарихына күҙ һалһаң, улар, ҡайһылыр ырыу башҡорттары, ҡасандыр диңгеҙ буйында ла йәшәгәндәр, тип яҙалар. Әммә нәҡ ҡортбашты Һиндостан яҡтарынан алып ҡайтыр булғандар.

**Йәмилә.** Һиндостан? Борон самолет, поездар ғына түгел, машиналар ҙа булмағандамы? Булмаҫ та инде.

**Мәрйәм әбей.** Булған шул, аппағым, булған. Борон замандарҙа уҡ башҡорттар баҡыр, көмөш, алтын, тимер, ҡорос, ҡула (бронза) иретеү оҫталары булған. Ошо әйберҙәре менән Рум (Византия), Һиндостан, Ғәрәп илдәре менән сауҙа иткәндәр. Бына тап ҡортбаш Һиндостанда аҡса урынына йөрөгән.

**Йәмилә.** Олатайҙарҙың аҫыл әйберҙәрен ҡортбаш мә-

нән түләп алғандар булып сыға инде.

**Өләсәй.** Сауҙа менән Һиндостанға барып етеүе, халҡыбыҙҙың бик борондан Һиндостан менән бәйләнештә булыуы тураһында ла мәғлүмәт бар. "Урал батыр" эпосында табырға була уны.

**Ғәйшә әбей.** Ысын даһа. Эре аҡ сәскә атыусы ағас тик Һиндостанда үҫә ләһә. Эпоста "Томбойоҡтар япрайып тик ағастай сәскә атҡан" тигән юлдар бар. Боронғо олатайҙарыбыҙ был ағас менән таныш булған һәм нисәмә мең йыл элек ижад ителгән "Урал батыр"ҙа оҫта ғына итеп телгә алған, яҙып ҡалдырған.

**Өләсәй.** Шулай итеп, ҡыҙым, ҡасандыр өләсәйҙәребеҙ насар күҙҙән һаҡланыу сараһы итеп ҡулланған ҡортбаш - ул башҡорт халҡының бик боронғолоғон күрһәтеүсе, халҡыбыҙҙың бик тәрән тамырлы тарихын дәлилләүсе ҡомартҡы ла.

**Йәмилә.** Белдем, белдем. Борон-борон замандарҙан олатайҙарыбыҙ алыҫ-алыҫтан, диңгеҙ буйҙарындағы илдәрҙән алып ҡайтҡан икән мәрйенде лә, мәрүәтте лә, ҡортбашты ла.

**Мәрйәм әбей.** Алыҫ-алыҫтан беҙҙең яҡҡа ла килгән каруансылар, улар ҙа алып килгән был биҙәүестәрҙе. Халыҡтар борон замандарҙан уҡ бер-береһе менән шулай аралашҡан, сауҙа иткән, бер-береһе менән танышҡан.

**Йәмилә.** *(Яғаны үҙенә һалып ҡарай).* Эй, мату-у-ур! Тәңкәләре сыңлап ҡына тора.

**Финзирә килен.** Тап өҫтөнә баҫтың, ҡолонсағым. Башҡорт ҡыҙын тәүҙә ишеткәндәр, шунан һуң ғына күргәндәр. Тәңкәләре сылтырашып, алдан тауыш биргән.

**Өләсәй.** Финзирә килен, әллә мин әйтәм, зыңғылдатып, бер-ике әйләнәһеңме?

**Финзирә килен.** Була ул. Аяҡтарым инде әллә ҡасан тыпырларға ғына тора. Яғаны тағып алайым да.

*(Таҡмаҡ әйтәләр).*
*Башҡортомдоң кейеме,*
*Йыр-моңдары, бейеүе,*
*Һоҡланып туя алмам,*
*Һөйөүемде тыя алмам.*
*Талир тәңкә томомонда,*
*Еләнкәйе шау уҡа,*
*Һалмаҡ ҡына бейеп китте,*
*Хәрәкәте килешле.*

**Агинәйҙәр.** Һай, афарин!

**Өләсәй.** Ҡыҙым, Йәмиләм, йәмгенәм. Үҫкәс, эсәһе һыуризыҡтарың ҡайҙа ғына йөрөтмәһен, бөгөнгө ҡорҙо, аңғәмәне онотма! Уны күңел һандығында ауыл ағинәйҙәренән ҡабул итеп алған аҫыл бер ҡомартҡы итеп һаҡла, балам. Зиһенең асыҡ булһа, күңел һандығыңда ҡомартҡылар артыр ғына. Күршеләрем, рәхмәт һеҙгә. Әйҙәгеҙ, кҫтәнәстәр менән сәй эсеп алайыҡ. Кҫтәнәс ғүмерҙе оҙайта, ти.

**Финзирә килен.** Аҫыл кейемдәрҙе, үҫә төшкәс, эшләргә лә өйрәтербеҙ һинә, Йәмилә. Һау ғына булайыҡ.

**Мәрзиә СОЛТАНБАЕВА.**
**Учалы ҡалаһы.**

✓ *Һөйләшә белмәү, моғайын, иң таралған тәрбиәһеҙлек билдәһелер. "Һимергәнһең, ябыҡһың, нишләп буянмағанһың, был күлдәкте шунсаға алдыңмы һ.б." тигәнерәк һүҙҙәрҙе улар бер-береһенә башҡалар алдында ташлаусан.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ШӘКӘР ЗЫЯНЛЫ

■ Шәкәр һаулыҡҡа ҙур зыян килтерә, тип иҫкәртә эксперттар. Яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, шәкәр матдәләр алмашыныуын боҙа, ҡан баҫымын күтәрә, йөрәк сирҙәренә килтерә. Балалар эндокринологы Роберт Ластиг шәкәргә тотош бер китап арнаған. Уның һөйләүенсә, шәкәр ҡулланыуҙы кәметкән балаларҙың сәләмәтлеге күпкә яҡшырған. Уларға шәкәр урынына крахмал ҡушылған продукттар тәҡдим иткәндәр. Яңы рациондың калориялығы артыҡ үҙгәрмәһә лә, 10 көн эсендә юғары ҡан баҫымы, артыҡ ауырлыҡ кеүек сирҙәрҙе еңеү мөмкинлеге тыуған. Шәкәр күләме 28 проценттан 10 процентҡа, фруктоза 12 проценттан 4 процентҡа кәмегән. Калорияларҙы крахмал тулыландырған. 9 көндән матдәләр алмашыныуы профилендә үҙгәрештәр күҙәтелгән - холестерин, шәкәр, инсулин түбәнәйгән, бауыр яҡшыраҡ эшләй башлаған.

■ Юғары интеллектҡа эйә ҡатын-ҡыҙҙар ир-егеттәрҙә ҡыҙыҡһыныу уятмай, ти Буффало университеты ғалимдары. Эксперимент ваҡытында 105 ҡатын-ҡыҙ менән ир-егет математика менән инглиз теленән тест эшләгән. Һуңынан кеҫлә зат ҡатын-ҡыҙҙы баһалаған, быны алдынан тест һөҙөмтәләре белдерелгән. Ир-егеттәр аҡыллы ҡатын-ҡыҙҙарға һоҡланыуын белдергән, әммә үҙ-ара аралаша башлағас та, уларға ҡыҙыҡһыныуын юғалтҡан. Улар был аҡыллы гүзәл заттар менән ҡабаттан осрашырға теләмәгән. Белгестәр быны ир-аттың аҡыллы ҡатын-ҡыҙ эргәһендә көс-ҡеүәтен юғалтыуы менән аңлата.

■ Артыҡ ауырлыҡтан ҡотолоу, тән ауырлығын нормала тотоу өсөн спорт кәрәкмәй, ти Лондондың иҡтисад мәктәбе ғилимдары. Улар әйтеүенсә, даими рәүештә көнөнә 30 минут йәйәү йөрөүсе бөтөн йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар һәм 50 йәште үткән ир-егеттәр әүҙем күнегеүҙәр яһау менән шөғөлләнеүселәргә ҡарағанда еңелерәк булған. Йәйәү йөрөгәндә ауыр эштә эшләүселәр ҡулланған көскә тиң энергия тотонола. Статистика буйынса, 2025 йылға өлкән йәштәге халыҡтың дүрттән өс өлөшө һимереү менән яфаланасаҡ. Табиптар физик әүҙемлеккә аҙнаһына 150 минут бүлергә кәңәш итә. Тимәк, ваҡытығыҙҙы нисек шөғөлгә бүлергә кәрәк икәнен хәҙер һеҙ ҙә беләһегеҙ.

■ Барыһына ла билдәле, ултырып эшләү организм өсөн зарарлы. Австралия ғалимдары сәләмәтлек менән бәйле проблемалар булмаһын һәм тән һомғоллоғо юғалмаһын өсөн күпме ваҡыт аяҡ өҫтә торорға кәрәклеген иҫәпләп сығарған. Ике сәғәт офиста ултырғанға ҡарағанда аяҡ өҫтә тороу ҡандағы шәкәр кимәле һәм холестерин кимәлен яҡшыртҡан. Әгәр ҙә был ваҡытта атлап йөрөһәң, һөҙөмтәләр тағы ла яҡшыра. Тикшеренеүҙәрҙә 36-80 йәштәге 700 ир-ат ҡатнашҡан. Улар бер аҙна дауамында физик әүҙемлек мониторы йөрөткән. Кеше күпме ултыра, тора, йөрөй, ята - быларҙың барыһын да монитор теркәп барған. Дөйөм алғанда, тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусылар көнөнә 8,8 сәғәт ултырғандар, 4,9 сәғәт торғандар, 2 сәғәт йәйәү йөрөгәндәр. Юғары кимәлдәге физик әүҙемлек оҙайлығы 1,2 сәғәткә тиң булған. Асыҡланыуынса, өҫтәмә рәүештә 2 сәғәт кенә тороу ҙа алда әйтелгәнсә ҡандағы шәкәр һәм холестерин кимәлен төшөрөп ҡалмаған, тән ауырлығының массаһын 11 процентҡа, ә бил үлсәмен 7,5 см-ға кәметкән. Шулай итеп, аяҡ өҫтә эшләү май һәм глюкоза метаболизмына, шулай уҡ йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына ыңғай йоғонто яһай, ти ғалимдар.

ХӘТЕРКИТАП

**Шәмеғол Бәҙретдин улы Бикбаев - өләсәйем Ғилмикамал Бәҙретдин ҡыҙы Бикбаеваның бер туған ағаһы. Өләсәйем Әпсәләм ауылында 1898 йылда тыуған. Миңә уны күрергә яҙманы, ул 1950 йылда, мин тыуғансы вафат булғайны. Өләсәйем тураһында әсәйем Өммөкамал аша ғына ишетеп беләм. Өләсәйем бәйеттәр уйлап сығарырға оҫта булған. 35 йәшендә генә тома һуҡыр булып ҡалыуына ҡарамаҫтан, бик һәйбәт ишеткән: ҡаршыһына килгән кешене аяҡ тауышынан танып, кешенең нимә эшләгәнен ишетеп белгән. Шәмеғол олатай өләсәйемдең күҙҙәрен аса алмаған. "Үҙендә көс бар, шул ҡамасаулай", - тигән.**

# ШӘМЕҒОЛ ОЛАТАЙҘЫҢ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

...Шәмеғол олатай беҙгә йыш килгән. Һәр ваҡыт йәйәү йөрөгән. Туған йәнле кеше булған: алыҫ араны яҡын итеп Ишбирҙенән Яманғолға (хәҙерге Күйөргәҙе районы, өләсәйем йәшәгән, беҙҙең тыуып-үҫкән ауыл, 50-60 саҡрым самаһы) йыш ҡына хәл белергә йәйәү килгән. Уның килгәнен ишетеп ҡалған ауылдаштар тиҙерәк уға күренеп, дауаланып ҡалырға тырышып, өйгә килеп тулыр булғандар. Туғандарының ауыр хәлгә төшөүен, үҙенең ярҙамы кәрәклеген Шәмеғол олатай тойомлап белгән: "Елкә тамырым тарта, туғандарыма берәй хәл булды, ахырыһы",- тип һиҙеп, ярҙамға ашыҡҡан.

...Өләсәйем менән әсәйем Шәмеғол олатайҙарға бер нисә көнгә ҡунаҡҡа барғандар. Бер-ике көн йәшәгәс, өләсәйем күрше ауылға әхирәтенә барып килергә йыйынған, әсәйемде лә эйәрткән. Ул сакта өләсәйемдең күҙҙәре һәйбәт күргән әле. Шәмеғол олатай кибеттән перәник алып ҡайтырға ҡушып, аҡса биреп ебәргән. Перәник алғас, әсәйемден (8-9 йәшлек бала бит инде) берәүһен генә булһа ла алып ашағыһы килгән. Ләкин өләсәйем: "Балам, бер бөртөгөнә лә теймә, теүәл алып ҡайтып бирәйек. Бөлки бабайың һанағандыр, иҫәбен белеп ултыралыр", - тип берәүһен дә алырға рөхсәт итмәгән. Ҡайтып етеүҙәренә Шәмеғол олатай ҡапҡа төбөнә үк сығып, быларҙы ҡаршылап тора икән: "Нишләп балаға перәник ашатманың? Мин бит перәникте мотлаҡ ошо ҡунаҡ ҡыҙым өсөн алдырттым, - тип, түргә менән алып, әсәйемә тотторған:

- Туйғансы аша, ҡыҙым, Шәмеғол олатайың һыйлағанда", - тигән.

...Шәмеғол олатай улы Нурулланы һалдатҡа ебәрмәй алып ҡалған. Сөнки Нурулла олатайҙа ла кешеләрҙе дауаларлыҡ көс барлыгын белгән: "Бында һин халыҡҡа ныҡыраҡ кәрәкһең",- тигән. Районға ҡаралырға барғанда үҙе шапшаҡтай атлап барған Нурулла олатай, табиптар янына инһә, көскә хәрәкәтләнеп, аяҡ-ҡулы йүнләп йөрөмәгән ғәрип хәлендә була ла ҡуя икән. Табиптар: "Нишләп күрәләтә ғәрип кешене һалдатҡа ҡаралырға ебәрәләрҙер", - тип һуҡранып ҡайтарып ебәрәләр икән. Сыҡҡас, Нурулла олатай үҙ аяҡтарында һау-сәләмәт көйө ҡайтып китә икән. Шәмеғол олатай үлгәндән һуң улы Нурулла бик күп кешеләрҙе дауаланы. Мин уны үҙем күреп беләм. Мин бәләкәй саҡта беҙгә лә килеп йөрөгәнен хәтерләйем.



...Әсәйем һөйләгәндән тағы шуны хәтерләйем: совет власы йылдарында бик әҙәрлеклегәндәр Шәмеғол олатайҙы. Ҡулға алғас, төрмә начальнигына индергәндәр. Төрмә начальнигы бик ҡаты һөйләшә ти олатай менән, янай, ҡурҡыта икән. Шәмеғол олатай тыныс ҡына тыңлаған да: "Һин миңә улай ҡаты бәрелмә. Тиҙ генә өйөңә ҡайт, ҡыҙың хәл өҫтөндә ята. Минән башҡа бер кем дә уны дауалай алмай. Миңә көнөң төшәсәк бөгөн йә иртәгә", - тигән. Өйөнә ҡайтһа, төрмә начальнигының ҡыҙы саҡ тын алып ята, телдән ҡалған, ти. Тәүҙә табиптар саҡырып ҡарағандар. Улар диагноз ҡуя алмаған. Аптырағас, төрмә начальнигы, төн булһа ла, олатайҙы килтерткән: "Әгәр ҡыҙымды аяҡҡа баҫтыра алһаң, иреккә сығарып,

ТӘРБИӘ МӘКТӘБЕ

# БЫЛ ҒӘҘӘТТӘР ҺИНДӘ БАРМЫ?

**Нимә яҡшы, нимә насар икәнде, әгәр ул күҙгә күренерлек хәлдә булмағанда, белеп тә булмай ҡуя. Шулай уҡ кешене лә. Яҡшы кешеме ул, насармы - аныҡ ҡына баһалауы ауыр. Әммә үҙен "яҡшы" тип иҫәпләгәндәрҙә ун матур ғәҙәт булырға тейеш, тиҙәр.**

## Ярҙамсыллыҡ

Ярҙамсыллыҡ - ул ауыр, бәләгә ҡалған йәки төшөнкөлөккә бирелгән икәнен белгәндә үҙ белдегең менән кемгәлер ярҙамға килеү. Һүҙ менән, теләктәшлек һәм матди ярҙам менән. "Уй, уның хәле шулай икән!" тип тел сарлау йәки ситтән генә йәлләү түгел, ә кире талап ителмәгән, хаҡ һоралмаған, рекламаға һәм халыҡҡа күрһәтеүгә ҡоролмаған хәйриә ярҙамы. Берәй ауырыуға дарыуға, операцияға аҡса биргәнегеҙ, күп балалыларға үҙегеҙҙең иҫкене түгел, ә берәй тапҡыр яҡшыны бүләк иткәнегеҙ, ҡарауһыҙ әбей-бабайҙы йыуындырып-тәрбиәләп ҡуйғанһығыҙ, кредитҡа баткан туғаныгыҙ (танышығыҙ) өсөн түләшкәнегеҙ, мохтаждарға ит, картуф һымаҡ үҙегеҙ үҫтергәндә алып барып биргәнегеҙ, кемгәлер бушлай эш эшләгәнегеҙ бармы? Ысынлап ярҙам итеү - ул бурысҡа биреп тороу йәки ярҙам иткән булып ҡыланыу, кешенең ауыр хәлен һыҙыҡ өҫтөнә алып күрһәтеү, үҙенә уңайлы йәки файҙалы саҡта ғына ҡул һуҙыу түгел, ул үҙеңдән ҡылығыңдан эске ләззәт алыу һәм икенсегә һиҙелерлек файҙа килтереү.

## Дөрөҫтө һөйләү

Алдашмау. Һәр хәлдә, алдашмаҫҡа тырышыу. Хәбәрҙе йәки ваҡиғаны үҙгәртмәй, үҙеңдән өҫтәмәй, ҡабартмай, арттырмай ғына һөйләй белеү. Дөрөҫ хәбәр һәр ваҡыт уңайлы һәм яйлы ла булмаҫҡа мөмкин. Тик дөрөҫ һөйләй белеү һәм алдашмау йәмғиәттә шундай тиҙ баһалана. Һинең был сифатыңды шунда уҡ аңғарасаҡтар. Шулай уҡ алдаҡсы булыуыңды ла.

## Тәрбиә

Был төшөнсә аҫтына бик күп ғәҙәттәрҙе индерергә булалыр. Мәҫәлән, тейешле урынға ваҡытында килеүҙе - һуңламауҙы. Башҡаларҙың һине көтөп ваҡытын сарыф итеүенә юл ҡуймауҙы. Өҫтәл артында, ашағанда, аҙыҡ-түлек ҡулланғандағы этикет тәртиптәрен тотоуҙы. Кеше менән һөйләшә белеү, уның йөҙөн йыртмау, етешһеҙлектәрен бәреп әйтмәү, унан көлмәү, кәмһетмәү, тупаҫ һүҙҙәр ҡулланмауҙы.

Һөйләшә белмәү, моғайын, иң таралған тәрбиәһеҙлек билдәһелер. Бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙар араһында күҙәтергә була быны. "Һимергәнһең, ябыҡһың, нишләп буянмағанһың, был күлдәкте шунсаға алдыңмы, миндәге матурыраҡ, яҡшыраҡ, уңайлыраҡ, һ.б." тигәнерәк һүҙҙәрҙе улар бер-береһенә башҡалар алдында ташлаусан. Теләктәшлек артына йәшерелгән түпһеҙлек был, үҙен тәрбиәлемен тип иҫәпләгән кеше ундайҙы әйтмәҫ. Тәрбиәле булыу - ул һүҙҙе, вәғәҙәне, әйтелгәнде тота белеү. Үҙең биргәндә лә, башҡаларҙан алғанды ла. Серҙе һатмау. Кеше хәлен ғәйбәт итеп һөйләмәү.

## Тоғролоҡ

Был - иң һоҡланғыс һәм һирәк осрай торған күренеш. Ир менән ҡатын, һөйгән йәрҙәр, туғандар, дуҫтар, коллегалар, рухташтар һәм хатта күршеләр араһында ла була был тойғо. Бер-береңде һатмау, үҙ-аралағы хистәрҙе бысратмау, бирелгән һүҙҙәрҙе, һөйләнгән, эшләнгәндәр араһына башҡаларҙы тығылдырмау һәм ситкә сығармау. Кеше кемгәлер тоғролоҡ һаҡларға тейеш. Үҙе һәм намыҫы алдында. Әгәр унда берәүгә ҡарата ла тоғролоҡ тотолмай, ул иренә (ҡатынына) хыянат итә, дуҫын һөйләй, коллегаһын яманлай, ата-әсәһен, балаларын кемдәргәләр алыштыра ала икән - был әҙәмдең йәнен шайтан биләп алған һәм ул шайтанға ғына тоғро.

## Эшлеклелек

Һәр ир егәрле ҡатын, һәр ҡатын эшлекле ир һәм һәр етәксе хеҙмәтсән хеҙмәткәр теләй. Эшләү - аҡ эшме, ҡарамы, аҡыл эшеме, ҡул эшеме - хәрәкәт, алға китеш, барлыҡ ул. Мәҫәлән, эшкә йөрөйһөң икән - килем алаһың, кәсеп итәһең икән - мал табаһың, өй йыйыштыраһың икән- таҙалыҡта йәшәйһең, баҡса ултыртаһың икән - уңышың, мал аҫрайһың икән - аҙығың була. Ялҡаулыҡ быларҙың киреһен алып килә. Эш башҡарыу күңелде лә аяҙыта, уйҙарҙы таҙарта, ваҡытты исрафлауҙан ҡотҡара һәм эшләгәнең ниндәйҙер ыңғай күрһәткес тә бирә.

✓ ***Батырлыҡ ул өйөрҙәге һәүеректең ҡапыл ҡанаттары асылып китеп толпарға әүерелгәне һымаҡ, ябай ғына, тыйнаҡ ҡына кешенең дә башҡалар өсөн ниндәйҙер хәүефкә, ҡурҡынысҡа ынтылыуы, уларҙы үҙ тәне менән ҡаплай алыуы.***



ҡайтарып ебәрәм", - тигән. Ҡыҙҙы дауалап, аяҡҡа баҫтырып, Шәмеғол олатай өйөнә ҡайтып киткән.

...Тағы бер ваҡиға һөйләгәйне әсәйем. 1933 йылда әсәйемдең атаһы үлгән. Тома һуҡыр өләсәйем ҡулында 3 бала ҡалған: иң ҙуры булған әсәйемә - 11 йәш. Ейәнсура районы Байдәүләт ауылында директор булып эшләгән Әбдрәхим ағаһы (өләсәйемдең көндәшенең улы) әсәйемдәрҙең ғаиләһен ҡышҡылыҡҡа йәшәргә үҙ янына Байдәүләткә алып ҡайтҡан. Ике көндәш бер туғандар һымаҡ татыу йәшәгәндәр. Шуға күрә, өләсәйемдең туғандары уларҙы ла туған итеп күргән. Шәмеғол олатай Байдәүләткә лә барып, һылыуының хәлен белеп йөрөгән. Әбдрәхим бабайым быға ҡаршы булмаған. Әммә ундағы властарға был хәл бер ҙә оҡшамаған. Шулай бер ваҡыт Шәмеғол олатай Байдәүләткә килгәндә, белеп ҡалып, мәктәптән Әбдрәхим бабайымды кәнсәләргә саҡырғандар һәм олатайҙы ҡыуып ебәрергә ҡушҡандар. Әгәр ҡыумаһаң, эшеңдән алабыҙ, тигәндәр. Шәмеғол олатай быны һиҙгән. Өйҙә сәй эсеп ултырған еренән ашығып тора башлаған: "Туғандарҙы берберәһенә ҡаршы ҡуймаҡсы булалар, мәлғүндәр. Туғаным ҡайтып, мине ҡыумаҫ борон, мин үҙ юлымда булайым", - тип йәһәтләп сығып киткән. Сыҡҡанда әсәйемде саҡырып алған да: "Өлкәндәр минең мөғжизә күрһәткәнгә өйрәнгән, һин бала кеше - ҡурҡып ҡуйма. Мин Әбдрәхим абзыйыңа мине ҡыуырға риза булғаны өсөн бер мөғжизә күрһәтәм, өс көндән тәҙәләр, ҡурҡма, миңә ышан",- тигән. Әбдрәхим бабайым ҡайтып еткәнсе Шәмеғол олатай ауылдан сығып та киткән. Әсәйем нимә булырын көтә башлаған. Шул көндә үк Әбдрәхим бабайҙың йөҙө йәмһеҙләнеп, салышая башлаған. Иртән тороуға бөтөнләй кеше ҡарағыһыҙ булып, ауыҙ-мороно ҡыйшайып, ҡурҡыныс хәлгә килгән. Өйҙәгеләр бик хафаланған. Өс көн үтеүгә Әбдрәхим бабайҙың йөҙө әүәлге хәленә ҡайтҡан.

...Һуғыш йылдарында әсәйем икенсе бер ваҡиғаның шаһиты булған. Шәмеғол олатай үҙенең туғандарын төрлө бәлә-ҡазаларҙан ҡурсаларға тырышҡан. Ул ваҡытта әсәйем Ейәнсура районы Ибрай ауылында уҡытыусы булып эшләгән. Әсәһе, туғандары үҙе менән бергә йәшәгән. Бөтә ерҙә аслыҡ, кешеләр астан үлгән, ашарға эт, бесәй ҡалмаған, яланда үлән етмәгән. Һыйыр быҙауларға тейеш булһа, ҡарауыллап тороп, яңы тыуған быҙауҙы урлап алып китеп, һуйып ашағандар; йәй көнө һөт ҡайнатырға тышҡы мейес ҡаҙанына һалһаң, ҡайнап сыҡҡансы, килә һалып, һоҫоп алып урлап китә торғайнылар, ти. Әсәйемдәр ҙә бер генә һарыҡ тәкәһен, бик асыҡҡанда һуйырбыҙ тип, һаҡлағандар. Муйынына ҡыңғырау тағып, бик һиҙгер һаҡларға тырышҡандар. Ләкин үҙҙәре мунсаға киткән арала теге тәкә юҡ булған. Шуныһы ғәжәп: иртән йоҡонан тороуҙарына әҙме-күпме ризыҡ йөкмәп, Шәмеғол олатай килеп еткән. "Тәкәгеҙҙе эҙләп тормағыҙ, кисә төндә үк уның итен ашап бөттөләр инде. 3-4 ай әсендә ул кешенең нигеҙе ҡороясаҡ. Етемдәрҙең ризыҡын урлаған кеше яҙаһын татыр",- тигән. Күп тә үтмәй, бөтөнләй уйламаған, етеш кенә йәшәгән, һуғыштан бронь менән ҡалған бер ир ашлыҡ урлап тотолоп, төрмәгә китә, ҡатыны аҫылынып үлә, балалары приютҡамы, ҡайҙалыр оҙатыла...

...Бөгөнгө көндә лә Шәмеғол олатайҙың рухы беҙҙе, туғандарын, һаман һаҡлай, ярҙамынан ташламай. Ҡыҙымдың күҙҙәре бәләкәй сағында 10 процент ҡына күреүгә асыҡланды. Хәсәйен табип районлдарға сығып, кешеләрҙе дауалаған осор ине. Мин ҡыҙымды уға күрһәтмәксе булдым. Кистән әҙерләнеп, йоҡларға яттыҡ. Таңға табан сәйер төш күреп уяндым. Ап аҡ кейемле бер бабай миңә: "Балам, ҡыҙыңды ул кешегә алып барма, ул беҙҙеңсә дауаламай", - тине. Уянғас, әсәйемә һөйләгәйнем: "Шәмеғол олатай ул, миңә лә гел аҡ кейемдә төшөмә инә", - тине. Тәүҙә ышанманым. Иртән тороуға, кистән һәйбәт торған көн боҙолғайны, буран сыҡҡайны. "Автобус килһә ярай ине, юлға ҡар һалғандыр инде", - тип борсолдом. Әсәйем миңә: "Был - Шәмеғол олатайын, һиңә ризалығын бирмәй", - тине. Шулай ҙа автобус килһә, уйлаған уйымды тормошҡа ашырыу ниәтендәмен. Баланы дауалағы килә бит инде. Һуңлап булһа ла юлда автобус күренде. Туҡталыштан боролоп ҡайта башлаған халыҡ автобусҡа табан йүгерҙек. Ҡыҙым менән мин барып етергә 10-15 метр самаһы ҡалғас, автобус ҡуҙғалды ла китте. Шулай итеп, Шәмеғол олатай беҙҙең юлды ҡыйҙы. Был ваҡиғанан һуң аҙна тирәһе ваҡыт үткәс, ауылға Өфөнән Марат Аҙнабаев етәкселегендә күҙ табиптары килде. Улар ҡыҙыма йүнәлтмә ҡалдырып киттеләр. Һуңынан Өфөгә табиптарға йөрөтөп, ҡыҙымдың күҙҙәрен дауаланым. Хәҙер, Аллаға шөкөр, ҡыҙым һәйбәт күрә.

...2013 йылда йәй көнө миңә операция яһарға тейештәр ине. Шул уҡ ваҡытта Әпсәләмдә шәжәрә байрамы үтәсәк. Был минең өсөн бик мөһим. Сөнки Күгәрсен районынан ситтә тыуып-үҫеү сәбәпле, күп туғандарымды белеп тә еткермәйем, йәки ишетеп кенә беләм. Улар менән күрешеп һөйләшкем килә ине. Ҡургандан Тутыя апай ҙа ҡыҙы Әлфиә менән ҡайтырға тейеш. Шәжәрә байрамынан ситтә ҡалыу бик үкенесле булыр ине. Тәғәйенләнгән көндә операция яһатырға тип, дауаханаға килдем. Әммә табип миңең алып килгән анализ ҡағыҙҙарын ҡарағас, ниндәйҙер сәбәп арҡаһында операция ике аҙнаға кисектерелеүе тураһында әйтте. Сәбәбен дә асыҡ ҡына аңлатманы. Шулай итеп, мин шәжәрә байрамында булып, туғандарымды күреп, ике аҙнанан һуң тыныс күңел менән операцияға яттым. Былар бөтәһе лә Шәмеғол олатайҙың рухы ярҙамында булғандыр, тинем...

**Рәмилә ИҪӘНҒОЛОВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

Эшлеклелек кешегә ҡарата яҡшы ҡараш, хөрмәт тә булдыра. Эшлеклеләнең эргә-тирәһе, тотҡан донъяһы, башҡарған эштәре уның ошо матур сифаты хаҡында мәғлүмәт биреп тора.

## Һығылмалыҡ

Һығылмалы булыу - ул тән һығылмалығын йәки холоҡ йомшаҡлығын аңлатмай. Ә өҙә, ҡырҡа һуҡмайынса, башҡаларҙы ла һәм үҙеңде лә йәрәхәтләмәйенсә хәл итә, килешеп эшләй белеү, ниндәйҙер маҡсаттарға ирешеү, кемдер менән ярашып йәшәү өсөн аҡыллы ысул. Һығылмалыҡ күрһәтә белеү - ул көс һәм аҡыл сифаты. Һығылмалы була белгәндәр, ғәҙәттә, күпкә өлгәшә. Был ғәҙәткә лә өйрәнергә, холоҡто тәрбиәләргә була.

## Хислелек

Алсаҡлыҡ та тиергә мөмкин. Нисек кенә булғанда ла хисле, асыҡ, алсаҡ кешеләр менән аралашыу ҙа еңелерәк һәм уларға тартылаһың да. Йомоҡ, туң әҙәмдәр ышаныс тыуҙырмай, бикһетә. Шаярта белгән, юморҙы ҡабул иткән, һоҡлана, маҡтай, хуплай, телләктәрен еткерә алған, кәрәктә ихлас көлөшә лә белгәндәр менән еңел дә, рәхәт тә. Аралашҡан йәки танышҡан кеше эмоцияларын сығарыу, күрһәтер һүҙ ҡатһа, һөйләһә, уға ҡарата йылы тойғолар уяна. Хисләләр эскерһеҙ ҙә, таҙа уйлы ла, бер ҡатлы ла кеүек. Барыһы ла шундайҙар менән генә аралашырға теләй. Икенселәрҙән ихласлыҡ көтәһең, ә үҙең шулай була беләһеңме?

## Изгелек

Изгелек ул кешегә яуызлыҡ ҡылмау ғына түгел, ә яҡшылыҡты башҡарыу, үҙ булышлығың, үҙ ҡулың менән аткарыу. Икенсе кешегә, тәбиғәткә, хайуандарға ҡарата йылы, сәләмәт, аяулы ҡараш. Оло кешене етәкләп юл аша үткәреү, берәҙәк этте ашатыу, ағасты һындырмау, йылғаны ҡыйған тазалау, юлсыны ултыртып алыу, икмәгең менән бүлешеү, ауырыуҙың хәлен белеү, яҡшы телләктәрҙә ҡала белеү. Изгелек матди берәмектәрҙә баһаланмай, уны аҡса йәки ярҙамдың ҙурлығы-бәләкәйлеге менән билдәләмәйҙәр. Был эске ыңғай энергияның көсөнә ҡарай. Эсеңдә ни тиклем изгелек бар, һин шул тиклем сығараһың да. Изгелек эскерһеҙ ҡылына, мин һиңә изгелек ҡылдым, һин дә ҡыл, тигән рәүештә түгел. Изгелекте көсләп таҡмайҙар, көсләп күрһәтмәйҙәр, быңа мин изгелек эшләнем, һеҙ баһаламағыҙ, тип үпкәләмәйҙәр. Бөгөн изгелек төшөнсәһе артыҡ яһалма һәм күрһәткескә әйләнде. Изгелекте беҙ аҡыллыраҡ һәм мөһимерәк булып күренеү өсөн башҡарабыҙ. Етәкселәр үҙ бурыстарын үтәүҙе лә изгелек итеп күрһәтә экранда. Әммә был изгелек түгел. Изгелек - ул күпкә бөйөгөрәк, юғарыраҡ һәм таҙараҡ төшөнсә.

## Батырлыҡ

Батырлыҡ - ул көслә йәки бәһлеүән булыуҙан килмәй. Яндырай, үсал, еңмеш булыуҙан да түгел. Батырлыҡ әҙәмдә һәр ваҡыт та булмаҫҡа, әммә кемделер яҡларға, ҡурсаларға, ҡотҡарырға кәрәк булғанда ҡалҡып сығырға мөмкин. Эсеңдә, рухыңда батырлыҡ бар икән - ул сығасаҡ, юҡ икән - юҡ, тимәк. Батырлыҡ бәлә килгәндә һинең үҙең хаҡында онотторa, йәнеңде аямаҫ, ғүмереңде йәлләмәҫ халәткә еткерә. Батырлыҡ ул өйөрҙәге һәүеректең ҡапыл ҡанаттары асылып китеп толпарға әүерелгәне һымаҡ, ябай ғына, тыйнаҡ ҡына кешенең дә башҡалар өсөн ниндәйҙер хәүефкә, ҡурҡынысҡа ынтылыуы, уларҙы үҙ тәне (образлы рәүештә лә) менән ҡаплай алыуы. Батырлыҡтың ҙурыбәләкәйе булмай. Ул да дәүмәл менән баһаланмай.

## Тыйнаҡлыҡ

Кешене матурлыҡ та, байлыҡ та, һәләтлелек тә, билдәлелек тә түгел, ә әҙәп һәм тыйнаҡлыҡ биҙәй. Күп билдәле кешеләр тыйнаҡлыҡтары юғалтыу, әҙәп самаһын емереп китеү арҡаһында һөйкөмһеҙгә әүерелә. Интернетты асып ҡарағанда ғына ла самаларға була быны: берәүҙәр фотоһүрәттәрен таҫмаға һала ла һала, һала ла һала. Кешенең күҙен ғарҡ итеп, һүрәттәре арыу ғына булған хәлдә лә, тыйнаҡһыҙлыҡтары менән ытырғаныу уята ундайҙар. Тыйнаҡһыҙ әҙәм үҙенә игтибарҙы, хөрмәтте, данды талап итә. Ә тыйнаҡтар быларҙы хатта яулап алған хәлдә лә алға ҡуймаҫ. Тыйнаҡ кешенең эске тотанағы уның күҙ ҡарашынан, үҙен кеселекте тота белеүенән үк күренеп тора. Тыйнаҡлыҡ үҙбаһаңды төшөрөү йәки үҙеңде кәм итеп күрһәтеү түгел, ә башҡаларҙы түбәнһетмәү ул.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Был ун сифаттың барыһы ла бер кешелә булмаҫҡа ла мөмкин. Әммә быларҙың береһе генә һине биҙәгәндә лә - яҡшыһың, күңелеңә сәләмәт орлоҡтар сәселгән. Һәм тағы ла, үрҙәгеләрҙең барыһы ла бер-берәһенә бәйле һәм бер-береһен тулыландырып, тултырып, үҫтереп килеүсе төшөнсәләр. Тимәк, һин хисле икән, изгелең дә бар, батыр икән, тоғро ла була алаһың, эшлекле генә түгел, кәрәктә һығылмалыҡ та күрһәтер көсөң бар. Эҙлә шуларҙы күңелеңдә, тап, сығар өҫкә һәм һин иң яҡшы кеше булырһың.**

**Лилиә СӘЙҒӘФӘРОВА әҙерләне.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

### 25-се идея
### Яҙыҡ юлға баҫма

Һыуыткыстан ашамлыҡ алып йылытҡас ҡына, ҡапыл һине икенсе урынға ашарға саҡырһалар, һин ни эшләйһең? Ашамлыҡты киренән һыуытҡысҡа тыҡмаҫһыңдыр, моғайын; уны һиңә ашап ҡуйырға тура киләсәк. Үҙ тормошобоҙ хаҡында уйланғанда ла, беҙгә ошондайыраҡ әйберҙәр хаҡында онотмаҫҡа кәрәктер, тип уйлайым.

Марк Твен был проблеманы, ғәҙәттә, үҙе һөйләргә яратҡан бәләкәй генә бер көләмәстә бик асыҡ сағылдырған. Уның өйөнә көнөнә ике тапҡыр бер кеше балыҡ тәҡдим итеп килә, ләкин Марк Твен баш тарта: "Юҡ, рәхмәт, миңә балыҡ кәрәкмәй", - ти. Күпмелер ваҡыттан һуң уның башына, был кешенең ныҡышмалылығы үҙе генә лә бүләкләүгә лайыҡ, тигән уй килә, һәм ул ҡатынына: "Мин шулай ҙа унан балыҡ һатып алайым әле", - ти һәм һатып ала. Балыҡты бешергәс, уның бөтөнләй ашарға яраҡһыҙ булыуы асыҡлана. Иртәгәһенә Марк Твен һатыусыны саҡырып ала ла: "Ҡара әле, кисәге балығың ашарлыҡ түгел ине бит. Иҫкергән булған", - ти. "Был минең ғәйеп түгел, хужа, - тип тыныс ҡына яуап бирә һатыусы. - Был аҙнала мин һеҙгә көн һайын икешәр тапҡыр балыҡ тәҡдим иттем. Балыҡ боҙолғансы ваҡыт һуҙғанһығыҙ, тимәк, мин ғәйепле түгел".

Ошо турала уйлан. Һинең алдыңда "бөгөн" ята: мәңгелек һыуытҡысынан алынған һәм һинең мәнфәғәтең өсөн йылытылған тотош көн. Һин был көндө иртәгә йәки иртәнән һуңға йәшәй алмайһың, һин уны бөгөн генә йәшәй алаһың.

Ҡасан йәшәргә йыйынаһың? Ҡасандыр бәхетле булыр көнөңдө көтөп йәшәмәксеһеңме? Балыҡ боҙолғанға тиклем көтөргә йыйынаһыңмы? Был көнгә боҙолорға ирек ҡуйырһыңмы, йә булмаһа: "Был Аллаһы Тәғәләнең ҡиммәтле бүләге, был бай табынлы көн. Мин уны бөгөн әҙерләп ашаясаҡмын. Был көндө мин хәлемдән килгән тиклем тулыһынса йәшәргә йыйынам. Бер кемдең дә быңдай бүләкте кире ҡағырға хаҡы юҡ. Уны асыҡ йөрәк, асыҡ күңел менән, рәхмәт әйтеп ҡабул итергә кәрәк", - тип әйтерһеңме?

Ошо бөгөнгө көн - һинең ғүмереңдәге иң ҡиммәтле бүләк. Уға "боҙолорға" ирек ҡуйма. Уны төшөнкөлөк, еңелеү һәм яңғыҙлыҡ тойғолары менән тултырма - үҙеңдә энтузиазм уят. Был көн уңыш, бәхет, мөхәббәт һәм шатлыҡ менән тулы, тигән фекергә үҙеңә һеңдер.

Былар бөтәһе лә бөгөн буласаҡ. Уның бушҡа үтеүенә юл ҡуйма: бөгөнгө донъяға сыҡ та, был көндә уңыш, бәхет, мөхәббәт һәм шатлыҡ тап. Һин был көндө иртәгә йәшәй алмайһың, һәм ул бер ҡасан да ҡабатланмаясаҡ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

✓ ***Әлеге көндә республикала барлығы 48 гәзит һәм журнал башҡорт телендә баҫыла. Улар араһында балалар, ҡатын-ҡыҙҙар баҫмаһы, һөнәри тармаҡтарға арналғандары ла бар. Был баҫмаларҙың барыһына ла өйҙән генә яҙылырға була.***



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# АҠЫЛДЫҢ ҮЛСӘҮЕ - ҺҮҘҘӘ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**23-сө һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Йәһүд. Байымов. Наган. Төрөк. Урман. Әлмисаҡ. Сатирик. Арҡар. Үс. Ике. Елән. Урт. Солох. Оҫта. Лама. Беләк. Кәртә. Ғата. Назаров. Ҡылым. Конкурс. Нервы.

**Вертикаль буйынса:** Синерткә. Тәтегәс. Рим. Үлән. Бөрө. Абакан. Кәкүк. Йәйен. Ураҙа. Рычков. Гаити. Тойғо. Автор. Диван. Сөй. Уҡа. Сабаҡ. Рено. Арго. Нар. Хәким.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Июнь (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 15 (23) дүшәмбе | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:23 | 21:53 | 23:23 |
| 16 (24) шишәмбе | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:23 | 21:53 | 23:23 |
| 17 (25) шаршамбы | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 18 (26) кесе йома | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 19 (27) йома | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 20 (28) шәмбе | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 21 (29) йәкшәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Май һәм июнь айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Өфө районы** Шамонин ауылынан Люциә Исхаҡова, Роза Абдуллина, Фәриҙә Мөрсәлимова, Рәғиҙә Түләбаева, Зәйтүнә Абдуллина һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Оҙон ғүмер юлығыҙ бәхеткә, ҡыуаныс-шатлыҡтарға, ҡояшлы көндәргә тулы булһын, сәләмәтлек, изгелек, уңыштарҙы юлдаш итегеҙ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

Өфө почтамты коллективы "Почта России" акционерҙар йәмғиәтенең Башҡортостан Республикаһы Федераль почта элемтәһе идаралығы директоры Ирек Миңлевәли улы Ғәлимовтың

**әсәһе**

вафат булып ҡалыу сәбәпле оло ҡайғыһын уртаҡлаша.

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмәнең.**

АФАРИН!



# БАҪМАЛАРҒА ЯҘЫЛЫП...

## бүләкле булдылар

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы, "Юлдаш" радиоһы үткәргән үҙенсәлекле "Башҡортостандың милли матбуғатына ярҙам ит" акцияһына йомғаҡ яһалды. Ул Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы уҙғарылыуға 25 йыл тулыу айҡанлы ойошторолдо. Акцияның һөҙөмтәләре "Юлдаш" радиоһының "Теге өсәү" тапшырыуы барышында билдәләнде.**

Милли матбуғатҡа яҙылыу акцияһы 23 майҙан 9 июнгә тиклем дауам итте. Был турала белгән 165 мең кеше араһында ойоштороусыларҙың бөтә талаптарын 700-ҙән ашыуы тулыһынса үтәгән һәм еңеүсе тап шулар араһынан билдәләнгән. Осраҡлы һайлап алыу программаһы буйынса Учалы районынан Әлфиә Күсәева 10 мең һум, Баймаҡ районынан Земфира Ғүмәрова 20 мең һум аҡса отҡан. Ә акцияның төп призын - 30 мең һумды алыу бәхете Әбйәлил районы Ишкилде ауылында йәшәүсе Нурия Усмановаға йылмайған. Ауылда 35 йыл фельдшер булып эшләгән ханым республика гәзит-журналдарына даими рәүештә яҙылып уҡый. "Социаль селтәрҙәрҙә лә бик күп башҡорт төркөмдәренә яҙылып, республика һәм район кимәлендәге яңылыҡтар менән танышып барам. Әммә ғәҙәт буйынса гәзит-журналдар уҡыуҙан да баш тартмайым, улар аң өсөн рухи аҙыҡ бит. Башҡортса гәзиттәргә яҙылмай ҡалғаным юҡ", - ти был турала Нурия Усманова.

Акция шарттарына ярашлы, тағы ла "Юлдаш" радиоһы бүләктәренә Альбина Боҫҡонова менән Азамат Ғәҙелшин, "Ашҡаҙар"ҙыҡына Гүзәл Фазылова лайыҡ булды. Шулай уҡ 13 кеше башҡорт гәзит-журналдарына бушлай яҙылыу мөмкинлеген алды. "Юлдаш" радиоһындағы тура эфирҙа ойоштороусылар - Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолова, БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәксеһе урынбаҫары Марат Ғәзизов, "Башҡортостан" нәшриәт йорто филиалы - Республика мәғлүмәт үҙәге директоры Айнур Дәүләтбәков тә ҡатнашҡайны. Улар радио тыңлаусыларҙы милли матбуғатҡа 25 июнгә тиклем яҙылып ҡалырға саҡырҙы.

БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәксеһе урынбаҫары Марат Ғәзизов әйтеүенсә, әлеге көндә республикала барлығы 48 гәзит һәм журнал башҡорт телендә баҫыла. Улар араһында балалар, ҡатын-ҡыҙҙар баҫмаһы, һөнәри тармаҡтарға арналғандары ла бар. "Почта России" сайты йәки мобиль ҡушымтаһы ярҙамында был баҫмаларҙың барыһына ла почта бүлексәһенә барып йөрөмәй, өйҙән генә яҙылырға була", - тине Марат Әсғәт улы.

"Башҡортостандың милли матбуғатына ярҙам ит" акцияһын ойоштороусылар иң актив ҡатнашыусыларға башҡортса гәзит-журналдарға яҙылып уҡыуҙары өсөн тағы бер тапҡыр рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе һәм киләсәктә лә был дуҫлыҡ дауам итеренә ышанысын белдерҙе.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Акция барышында Учалынан Әлфиә Күсәева "Киске Өфө"гә бушлай яҙылыу хоҡуғына эйә булды. Ҡотлайбыҙ!**

## СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# САЛАУАТЫБЫҘҘЫ ХӘТЕРЛӘП...




**2020 йылда Башҡортостандың милли геройы Салауат Юлаевтың тыуыуына 266 йыл тула. Эпидемиологик хәлгә бәйле, Салауат Юлаев көндәрен онлайн уҙғарыу тураһында ҡарар ҡабул ителде, тип хәбәр иттеләр "Башинформ" агентлығына Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтенән.**

12-16 июндә республиканың барлыҡ район-ҡалалары ошо сараға ҡушыла. Республика Милли музейында видеокәңәшмә режимында "Герой һәм шағир. Салауат Юлаев шәхесенең Башҡортостан тарихындағы роле" тип аталған ғилми-ғәмәли конференция ойошторола. Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры үҙенең ютуб-каналында Заһир Исмәғилевтың "Салауат Юлаев" операһын, ә Башҡортостан Республикаһының Милли симфоник оркестры операға башҡарылған увертюраны күрһәтә. Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры архив фондынан Мостай Кәримдең "Салауат. Өн аралаш ете төш" спектаклен (режиссеры - Азат Нәҙерғолов) тәҡдим итә. Нефтекама дәүләт филармонияһы Салауат Юлаевтың тормошона һәм ижадына бағышланған "Оран" тигән музыкаль-поэтик программа әҙерләгән. Әмир Абдразаҡов исемендәге "Башҡортостан" киностудияһы урындағы республика телеканалдарында документаль фильмдар күрһәтеүҙе ойоштора. Улар иҫәбендә - "Салауат Юлаев көндәре" (режиссеры - Малик Яҡшымбәтов), "Мин - Салауат" (режиссеры - Г. Шеваров, А. Морозов), "Һынмаҫ рух" (режиссеры - Әмир Абдразаҡов) фильмдары. Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле "Ғәскәров мираҫы" концертының яҙмаһы һәм Марат Кәримов ҡуйған "Салауат" бейеүе менән ҡыуандырмаҡсы. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Инстаграмда шиғырҙар конкурсы үткәрә. Мәҙәниәт өлкәһенең һөнәри белем биреү учреждениелары Салауат Юлаевҡа арналған тематик концерттар, күргәҙмә, шулай уҡ Салауат тураһында йырҙар башҡарыу һәм яугир-шағирҙың шиғырҙары флешмобын ойоштора. Сибай сәнғәт колледжы "Батырҙар иле" һүрәттәр конкурсын уҙғара. БСТ телеканалы милли батырыбыҙға бағышланған фильмдар һәм тапшырыуҙар шәлкеме әҙерләгән.

# ХАЛЫҠ ШАҒИРЫНА АРНАЛА



**Өфө ҡала округы хакимиәтендә Башҡортостандың халыҡ шағиры, яҙыусы һәм йәмәғәт эшмәкәре, Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар союзының элекке рәйесе Рауил Бикбаевтың (1938-2019) хәтерен мәңгеләштереү буйынса эш кәңәшмәһе уҙҙы.**

Өфө вице-мэры Алина Сөләймәнова етәкселегендәге кәңәшмәлә шағирҙың туғандары һәм мэрияның структур бүлектәре вәкилдәре ҡатнашты. Республика Башлығы указына ярашлы, Өфөлә шағир йәшәгән йортта (Менделеев урамы, 148/3) уның барельефы менән мемориаль таҡтаташ ҡуйыла; 102-се башҡорт гимназияһына һәм Өфөнөң яңы урамдарының береһенә Башҡортостандың халыҡ шағиры исеме бирелә. Шулай уҡ Рауил Бикбаев исеме менән бәйле иҫтәлекле урындарҙы тәҙекләндереү күҙаллана. Өфө музейҙарының береһендә яҙыусыға арналған экспозиция булдырыла. Ҡалала шағирҙың хәтерен мәңгеләштереү буйынса әһәмиәтле саралар үткәреләсәк, тип билдәләне Алина Сөләймәнова.

# МӘСКӘҮ ҺАБАНТУЙЫ...

**Коронавирус пандемияһы сәбәпле, йолаға әүерелгән Мәскәү һабантуйы 4 июлдә интернет-майҙансыҡтарҙа онлайн уҙғарыла.**

Ойоштороусылар әйтеүенсә, программала байрамдың туғандаш халыҡтарҙың йолаларын һәм мәҙәниәтен сағылдырған төп ваҡиғалары һаҡлана. Ете онлайн-урында тамашасыларға милли көрәш, халыҡ уйындары, эстрада йондоҙҙары ҡатнашлығындағы концерт программаһы, милли маркет, аш-һыу әҙерләү буйынса оҫталыҡ дәрестәре майҙансыҡтары, шулай уҡ танышыу һәм йәштәр проекттары өсөн виртуаль киңлек, уникаль контент, интервью, илдең һәм донъяның төрлө төбәктәренән тура бәйләнештәр тәҡдим ителә. Һабантуйҙың яңы форматы сараның аудиторияһын киңәйтергә мөмкинлек бирә - халыҡтың яратҡан байрамын 1 миллиондан ашыу кеше ҡарай ала. "Илебеҙ граждандары өсөн ошо еңел булмаған осорҙа Һабантуй ойоштороу йолаһын һаҡлап ҡалыу, халыҡтың берҙәмлеген, мәҙәниәткә, йолаларға булған һөйөүҙе һәм бер нәмәгә ҡарамаҫтан милли сараларҙы уҙғарыу мөһимлеген күрһәтеү ҙур әһәмиәткә эйә", - тип билдәләне байрамды ойоштороу комитеты.

# БАШҠОРТ МАЛАЙЫ КӘРӘК

**Өфөлә "Башҡортостан" киностудияһы булышлығында "Йәшенмәк" проекты өҫтөндә эш башланды. Был - дүрт ҡыҫҡа метражлы фильмдан торған киноальманах. Фильмдарҙа бала саҡ, атайҙар һәм балалар, тәрбиә һәм кешенең донъя менән мөнәсәбәте кеүек мәңгелек темалар күтәрелә.**

"Йәшенмәк" киноальманахы авторҙары - Рәсәйҙең Мәҙәниәт министрлығы булышлығында Никита Михалковтың Кино академияһын тамамлаусылар. Проекттың художество етәксеһе - Рәсәйҙең халыҡ артисы, кинорежиссёр, сценарист Владимир Хотиненко ("72 метра", "Зеркало для героя", "Поп", "Мусульманин")."Тәүге киноновелла "Айназ" тип атала. Уның өҫтөндә режиссер Динара Әбдрәшитова эшләй. Фильм Башҡортостанда төшөрөлә", - тип һөйләне "Башинформ" агентлығына фильмдың продюсеры Алина Шакирова. Фильмда төшөү өсөн 5-8 йәшлек башҡорт малайы эҙләйҙәр. Анкетаны casting.film @inbox.ru почтаһына ебәрергә кәрәк.

# ФӘРИҘӘ МОҢО ТЕРЕ

**Башҡортостанда күренекле йырсы, Башҡортостандың һәм Татарстандың халыҡ артисы, Рәсәйҙең халыҡ артисы Фәриҙә Ҡудашеваның 100 йыллыҡ юбилейын билдәләйҙәр. Республика Башлығы Радий Хәбиров тейешле указға ҡул ҡуйҙы.**

Ошо ваҡиға уңайынан республикала юбилей саралары ойошторола. Уларға әҙерлек мәсьәләләре менән ойоштороу комитеты шөғөлләнә.

Фәриҙә Ҡудашева (1920-2010) ҡабатланмаҫ тауышы, хисле, йөрәккә үтеп инерлек башҡарыу оҫталығы менән популярлыҡ һәм мендәрсә тамашасының һөйөүен яулаһы. Ике республика - Башҡортостан һәм Татарстан, башҡа төбәктәр халҡы уның башҡарыуында йөрәкләгән башҡорт, татар халыҡ һәм автор йырҙарын тыңларға яратты. Өфө урамдарының береһе, шулай уҡ башҡорт һәм татар йырҙарын башҡарыусыларҙың "Дуҫлыҡ моңо" халыҡ-ара фестивале йырсының исемен йөрөтә, Өфөлә ул йәшәгән йортта мемориаль таҡтаташ ҡуйылған.

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЭШЛЕКЛЕ МИҪАЛҒА ҠАРАР,

## эшлекһеҙ мыҫҡалға ҡарар

Эш, тауға тәгәрәткән таш кеүек, яҡшылыҡ ҡылһаң да, яманлыҡ ҡылһаң да, үҙеңә ҡайтыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йөрәк - бер генә ҡатын-ҡыҙҙы, тойғолар - күп ҡатын-ҡыҙҙарҙы, ә боҙоҡ күңел барлыҡ ҡатын-ҡыҙҙарҙы теләй.

**(Жан Ростан).**

Кем менән никахҡа инеүең мөһим түгел, иртән тороуға ул барыбер икенсе кешегә әйләнәсәк.

**(Уилл Роджерс).**

Һәр кем тәүҙә дан-шөһрәт тураһында хыяллана, шунан уңышҡа ғына өмөтләнә башлай, аҙаҡтан иһә үҙенең туғандары маҡтауҙарына ла ҡәнәғәт ҡала.

**(Этьен Рей).**

"Шулай тип әйтәләр" тигән һүҙҙәр артына бөйөк ялған йәшеренгән.

**(Д. Маллох).**

Изгелек - бер ваҡытта ла туҙмай торған берҙән-бер кейем.

**(Генри Торо).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Яҙғы бер көндә һуҡыр бер кеше транспорт туҡталышы янында хәйер һорап ултыра. Уның алдында баш кейеме ята, баш кейеме янында "Зинһар өсөн, ярҙам итегеҙ!" тигән яҙыу тора. Һуҡыр хәйерсе янынан ниндәйҙер бер фирманың креатив-менеджеры үтеп бара. Ул хәйерсе алдындағы бер нисә тинлек ятҡан баш кейеменә күҙ һала. Рөхсәт-маҙар һорап тормай, һуҡыр хәйерсе алдындағы яҙыулы таҡтаны алып, ундағы тексты үҙгәртеп яҙа ла, үҙ юлы менән китеп бара.**

**Төштән һуң был менеджер тағы ла хәйер һорап ултырыусы баяғы хәйерсе эргәһенән үтә һәм уның алдындағы аҡса менән тулы баш кейеменә күҙ һала. Һуҡыр хәйерсе менеджерҙы аяҡ тауышынан танып ҡала һәм уға мөрәжәғәт итә: "Әйт әле, һин минең алдымдағы таҡтаға ниндәй һүҙҙәр яҙҙың, ни өсөн һин минең эргәгә килеп киткәс тә хәйер биреүселәр күбәйҙе?" - тип һорай. "Шул уҡ һин үҙең яҙған һүҙҙәр улар, тик мин уны башҡасараҡ итеп үҙгәрттем генә", - тигән дә менеджер, китеп тә барған. Ә теге һуҡыр хәйерсе алдындағы таҡтаға: "Бөгөн яҙ, ләкин мин уны күреү бәхетенән мәхрүммен", - тип яҙылған икәнен белмәй ултырып ҡалған...**

**Тырышып-тырышып та, бер ни ҙә килеп сыҡмай икән, эш рәүешен үҙгәртеп ҡарарға кәрәк, бәлки, килеп сығыр!"**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
11 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3600
Заказ - 464/06